ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

10-16 ғинуар (һыуығай) 2025

№ 1 (1145)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ил йолаһына...**

хан да буйһона



3,6

**Баш ҡаланың...**

2025 йылға өмөттәре



5

**Яҙғанындың фәһеме...**

фәһемле булырға тейеш



8-9

**Башҡортостаныбыҙҙа...**

"Урал батыр" эпосы көнө лә билдәләнһен ине



12

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Уйлап та тормайынса миңә яуызлыҡ күрһәткән кешегә мин баш эйәм һәм уны иң йомарт һөйөү менән бүләкләйем; ул ни тиклем күберәк яуызлыҡ ҡылһа, мин шул тиклем күберәк изгелек ҡыласаҡмын.***

***(Будда).***

ҠОТЛАЙБЫҘ!

## ЙЫЛАН ЙЫЛЫНА

*Зинһар, тимен, ҡара йылан,*
*Ағыуың сәсә күрмә.*
*Бәлә-ҡаза тулы тоҡто*
*Уйламай аса күрмә.*

*Һин бит ифрат аҡылллыһың,*
*Кешеләй йүләр булма.*
*Аҡлыҡ-хаҡлыҡ урынына*
*Нахаҡтан түләр булма.*

*Йылан йылы яратыусан,*
*Өшөмәһен кеше лә.*
*Күңеле тулһын шатлыҡҡа,*
*Йырлап торһон эше лә.*

*Әгәр самаларын белһәң,*
*Ағыу үҙе дарыу ул.*
*Мин ышанам, Йылан йылы*
*Изге, йомарт, арыу ул.*

**Тимер НИӘТШИН.**



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ЮЛ ҠАҒИҘӘҺЕН БОҘМА!



**Рәсәйҙә юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙған өсөн штрафтар арттырылды. Законға үҙгәрештәр 2025 йылдың 1 ғинуарында көсөнә инде. Тейешле документ рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған.**

Мәҫәлән, хәүефһеҙлек ҡайышы менән йөрөү өсөн штраф 50 процентҡа арттырыла. Светофорҙың тыйыу сигналына сыҡҡан өсөн штраф арттырыла, хәҙер ул 1 мең һум урынына 1,5 мең һум тәшкил итәсәк. Юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙған өсөн штраф түләүгә ташлама 25 процентҡа тиклем кәметелгән. Иҫерек килеш машина йөрөткән өсөн административ штраф 45 мең һумға тиклем арттырыла.ОСАГО-һыҙ ҡабаттан йөрөгән өсөн штраф индерелә, ул 3-5 мең һум тәшкил итәсәк. Хәрәкәт тиҙлеген арттырған өсөн штраф 50 процентҡа арттырыла. Зыян күреүсенең һаулығына еңелсә зыян килтергән өсөн штрафтар 3750-нән 7500 һумға тиклем тәшкил итәсәк.

## БУЛАСАҠ ӘСӘЙҘӘРГӘ



**Буласаҡ әсәйҙәргә яҡшы хәбәр: йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособие күләме күтәрелгән.**

Рәсәй Социаль фондынан хәбәр итеүҙәренсә, түләү ҡатын-ҡыҙҙың декретҡа тиклемге ике йыллыҡ уртаса эш хаҡынан сығып иҫәпләнә.

Белеүегеҙсә, быйыл илдә МРОТ - 22 440 һум. Ә йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособие шул күләмдә:

140 көн өсөн минимум - 103 285 һум, максимум - 794 355 һум.
156 көн өсөн минимум - 115 089, максимум - 885 139 һум.
194 көн өсөн минимум - 143 123, максимум - 1 100 750 һум.

Пособиеның теүәл генә күләме ҡатын-ҡыҙҙың эш хаҡына бәйләнгән.

## КЕМГӘ ҺАЛЫМДАР АРТА?

**Физик шәхестәрҙең килеменә һалымдың (НДФЛ) яңы шкалаһы ғәмәлгә инә.**

Бынан ара был һалым төрө баҫҡыслы булып, йылына 2,5 млн һумлыҡ килемгә ставка 13 процент тәшкил итә. Йыллыҡ килем 2,4 млн һумдан 5 млн һум булһа, НДФЛ ставкаһы 15 процентҡа етәсәк. 5-20 млн һумға - 20 процент, 50 млн-дан ашһа, ставка 22 процент була.

Был төр һалымда премиялар, фатирҙы ҡуртымға биреүҙән алынған килем, лотерея отоштары ла һанала. Ә бына инвестицияларҙан килем, вкладтарҙың проценттары, акциялар буйынса дивидент, облигациялар купондары, ҡиммәтле ҡағыҙҙар һәм күсмәй торған милек һатыуҙан килем, страховка компанияһы һәм пенсия фондынан түләүҙәр НДФЛ ставкаһына йоғонто яһамай.

## ҠАБЫҘҒЫСТАР ХӘҮЕФЛЕ

**Дәүләт Думаһы балаларға ҡабыҙғыстар һатҡан өсөн штрафтар билдәләне.**

Балиғ йәшенә етмәгәндәргә газы булған тауарҙар һатҡан өсөн 60 меңдән 600 мең һумға тиклем штраф һалына, сөнки балалар уны токсикомания өсөн файҙаланырға мөмкин. Дәүләт Думаһының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, Эске эштәр министрлығы һәм Тәфтиш комитеты мәғлүмәттәренә ярашлы, 2016 йылдан алып ҡабыҙғыстар һәм башҡа газы булған көнкүреш тауарҙарын ҡулланыу һөҙөмтәһендә 800-ҙән ашыу баланың ғүмере өҙөлгән. Башҡортостанда ла ошондай бер нисә осраҡ теркәлгән. Мәҫәлән, газ баллончигы менән уйнау Мәләүездә - 13 йәшлек малайҙың, ә Яңы Балаҡатайҙа 14 йәшлек үҫмерҙең үлеменә сәбәпсе булған. Шулай итеп, физик шәхестәргә - 60 мең, вазифа биләүселәргә - 300 мең, ойошмаларға 600 мең һумға тиклем штраф билдәләнде. Дәүләт Думаһының матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, шулай уҡ балаларға энергетиктар һатҡан өсөн штрафты (физик шәхестәргә - 50 мең һум, вазифа биләүселәргә - 200 мең һум, юридик шәхестәргә 500 мең һумға тиклем) ҡуҙ уңында тотҡан закон проекты ҡарала.

12+

ҺӨЙӨНСӨ!

# ЭШЛӘП ЙӨРӨҮСЕЛӘРГӘ...

## пенсия түләүе арта

**2025 йылдан Рәсәй Социаль фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһе эшләп йөрөүсе пенсионерҙарҙың пенсияһын индексациялай башлай. Был түләүле эш менән мәшғүллегенә ҡарамаҫтан, бөтөн пенсия алыусыларҙың да пенсиялары арттырыласаҡ, тигәнде аңлата. Ләкин әле эшен дауам итеүселәр менән эштән киткәндәр өсөн түләү күләменең артыуы төрлөсә буласаҡ.**

Рәсәй Президенты тарафынан 2024 йылда ҡул ҡуйылған үҙгәрештәргә ярашлы, эшләп йөрөүсе пенсионерҙарға индексация күләме эшләмәгән пенсионерҙарға түләүҙәр менән бер тигеҙ була. Ошоға тиклем пенсионерға эштән киткән осраҡта ғына индексация түләнә ине. Хәҙер иһә, хеҙмәт эшмәкәрлеге менән мәшғүллеккә ҡарамайынса, Рәсәй Социаль фондының Башҡортостан бүлексәһе бөтөн пенсияларҙы ла индексациялаясаҡ. Түләүҙе арттырыу ысулы түләнеүсе пенсияға ҡарап түгел, ә хеҙмәт эшмәкәрлеге осорондағы бөтөн индексацияларҙы иҫәпкә алып, уның билдәләнгән күләменә бәйле буласаҡ. Был индексациялау һөҙөмтәһендә пенсионерҙарға күберәк түләү алырға мөмкин булһын өсөн эшләнә.

Индексация кимәле эшләп йөрөүсе пенсионер әле алған сумманан түгел, ә эшләмәгән осраҡта күпме алыр ине - шунан сығып иҫәпләнә. Мәҫәлән, әлеге ваҡытта эшләп йөрөүсе пенсионер айына 19 527,94 һум пенсия ала, ти. Ә эшләмәгән хәлдә бөтөн иҫәпләүҙәрҙән сығып, ул ҡулға бөтәһе 22 181,05 һум алыр ине. Шулай итеп, пенсионерға эшләп йөрөгән осорҙа ала алмаған бөтөн индексациялау түләүҙәре ҡайтарыла, ә пенсия аҡсаһы 2025 йыл индексын иҫәпкә алып түләнә.

Әгәр пенсионер эштән китһә, 2025 йыл өсөн индексация буйынса түләүенә өҫтәмә рәүештә уға эшләгән осорҙа түләнмәгән индексация суммаһы иҫәпкә алына һәм пенсияһы арттырыла. Шуның өсөн дә ғинуар айында иң күп өҫтәмәне бынан алдараҡ эштән киткәндәр аласаҡ. Икенсе төрлө әйткәндә, түләүҙәрҙе арттырыу бөтәһенә лә ҡағыла, ләкин эштән киткәндәр тағы хеҙмәт эшмәкәрлеген туҡтатыу менән бәйле лә өҫтәмә аласаҡ.

Яңы йылдан индексация күләме 7,3 процент кимәлендә тип фаразлана. Ләкин йыл һөҙөмтәләре буйынса хаҡтарҙың артыуы индексация коэффициентынан юғарыраҡ булған хәлдә, Хөкүмәт тарафынан пенсияларға өҫтәмә биреү хоҡуғы һаҡлана. Эшләп йөрөүсе пенсионерҙар өсөн индексацияны ҡайтарыу страховкалы пенсияға һәм уның бөтөн төрҙәренә, шул иҫәптән, инвалидлыҡ һәм ҡараусыһын юғалтыу буйынса пенсияларға ла ҡағыла.

Башҡа пенсия түләүҙәре һәм эшләп йөрөүсе пенсионерҙарға социаль пособиелар элеккесә индексациялана. Бынан тыш, индексацияға өҫтәмә булараҡ, эшләп йөрөүсе пенсионерҙарға августа арттырыласаҡ түләүҙәр ҙә һаҡланып ҡала. Был индексацияны Социаль фонд йыл һайын эш биреүселәрҙән хеҙмәт эшмәкәрлеген дауам итеүсе пенсионерҙар өсөн килгән яңы страховкалы взностар иҫәбенә башҡара.

Эшләп йөрөүсе пенсионерҙарға индексация мәсьәләһе буйынса өҫтәмә мәғлүмәтте Социаль фондтың Башҡортостан бүлексәһе белгестәренә 8-800-100-00-01 берҙәм контакт үҙәге буйынса шылтыратып алырға була.

**БР буйынса РФ Социаль фонды бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

# БЕҘ - БИРЕШМӘҪ ХАЛЫҠ!



***Гөлкәй СӘМЕРХАНОВА, Сибай институты педагогика факультетының уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса декан урынбаҫары, филология фәндәре кандидаты:*** Беҙ шул хәтлем эскерһеҙбеҙ, эсебеҙҙәге - тышыбыҙҙа. Шул сифатыбыҙҙы үҙ мәнфәғәттәренә файҙаланырға маташыусылар күбәйә, шуныһы аяныслы. Айырым кешеләргә һәр мәсьәләне асыҡлап, йүнәлеш бирергә була, ә бына халыҡ бергә тупланғанда аҡты ҡаранан айырмау, хисмәр шауҡымына буйһоноу аянысльы хәлваҡиғаларға алып килә, шундай хәлдәрҙең шаһиты булыу күңелде әрнетә. Был тәү һәүбәттә халҡыбыҙ мәнфәғәттәрен ҡурсалаусы йәмәғәт ойошмаларының мәғлүмәти яҡтан эшләп еткермәүенең һөҙөмтәһелер. Берәй кире маҡсатлы йүнәлештәге мәғлүмәт халыҡҡа юллана икән, шуның дөрөҫ түгеллеген фашлаған хәбәр халҡыбыҙға алдараҡ барып етһә, йә, бик булмаһа, һуңыраҡ барып еткән хәлдә лә, аныҡ дәлилдәр килтергәндә, халыҡ аҡты-ҡараны айырыр, ғауға ойоштороусылар ситуацияны үҙ файҙаһына ҡуллана алмаҫтар ине. Интернетта хәҙер нимә генә юҡ! Ә шундағы мәғлүмәттәр сылбырынан аңлы рәүештә кәрәклеһен һайлап алырлыҡ кимәл булырға тейеш һәр кемдә. Ә кимәлде кем тәрбиәләй? Беҙ, халҡыбыҙ яҙмышына битараф булмағандар, тәрбиәләйбеҙ.

Һөнәрем буйынса филолог булараҡ, студенттарға туған телебеҙҙең грамматикаһын уҡытыу менән генә сикләнмәйем, тормошта кәрәк булған йолаларҙы, рух уятырлыҡ ысулдарҙы йышыраҡ ҡулланырға тырышам. Беҙ студенттарҙы ике төркөмгә бүлеп уҡытабыҙ: башҡорт телен бөтөнләй белмәгәндәр уны дәүләт теле булараҡ өйрәнә, башҡорт теле туған теле булғандар уны тулыһынса өйрәнә. Дәүләт теле булараҡ өйрәнгәндәргә талап артыҡ ҙур түгел, улар телебеҙҙе хөрмәт итһә, икмәк-тоҙлоҡ аралаша белһә, шул да етә. Ә бына халҡыбыҙҙың киләсәген тәшкил иткән милли быуынға талаптар икеләтә арта. Был турала мин уларға дәрес һайын тылҡыйым, замана башҡорто бөгөн һәм киләсәктә ниндәй булырға тейеш, тигән һорауға күмәкләп яуап эҙләйбеҙ. Минеңсә, иң тәүҙә ул аңлы булырға, юғары эш урынында эшләргә, текә машинала йөрөргә, матур йортта йәшәргә, юғары технологиялар менән дуҫ булырға тейеш. Бының өсөн бик күп уҡырға кәрәк. Мин студенттарыма, программа буйынса уҡыу менән генә сикләнмәгеҙ, тағы ла юғарыраҡ ынтылығыҙ, тим. Ә йәштәребеҙ талантлы, улар менән эшләүгә иғтибарҙы күберәк йүнәлтергә, күндәм булмаҫҡа өйрәтергә кәрәк, юғиһә, хәҙерге шарттарҙа интернет селтәрҙәре аша уларҙың башын бутарға теләүселәр табылып ҡына тора. Шуға күрә кәрәкле мәғлүмәтте башҡаларҙан алдараҡ бирһәк кенә ҡурҡыныс янамаясаҡ.

Тел мәсьәләһенә килгәндә. Әгәр мин туған телемде белһәм, хөрмәтләйем, балам менән шул телдә һөйләшәм, иркен аралашам икән, уның балаһы менән дә мөнәсәбәт шулай ҡоролһа, өс быуындың бәйләнеше ныҡлы булһа, телгә ҡурҡыныс янамаясаҡ. Мин шундай позицияла. Күп нәмә һәр кешенең үҙенән тора. Хәҙерге ваҡытта туған телдә ҡурсалаусы программалар, гранттар күп, төрлө фондттар әллә күпме саралар үткәреп тора, интернет аша ярыш формаһындағылары ла бихисап. Әммә күңелебеҙҙә рух булмаһа, аңлы рәүештә телде һаҡлап ҡалырға тигән уй булмаһа, бөтә ынтылыштар яңалмаға әйләнә, күҙ буяу өсөн, план үтәү өсөн генә үткәрелә. Башланғыстарға дәүләт кимәленән дә яҡлау булырға тейеш, сөнки туған телебеҙ дәүләт теле һанала.

Беҙҙә ихлас халыҡ, тиһәләр ҙә, артыҡ бер ҡатлы булырға ла ярамай, заманға яраҡлаша белергә лә кәрәк. Боронда килгән, ҡаныбыҙға һеңгән тағы бер матур сифатыбыҙ - юғары идеялар менән йәшәү. Шуғалыр ҙа бөгөн ил һағына баҫыусыларыбыҙ күберәк. Беҙ күп уйлап тормайбыҙ: кәрәк икән - кәрәк. Был холҡобоҙ ихтирамға лайыҡ.

Ҡайһы ваҡыт һорауҙар шул тиклем күбәйеп китә, бөтәһенә лә ҡапыл ғына яуап табыуы ла ҡыйын, әммә бер йүнәлеш тотоп алырға, үҙебеҙ булып ҡалырға, паникаға бирелмәскә, бигерәк тә йәштәрҙе ҡурсаларға кәрәк, сөнки уларҙы үҙ мәнфәғәтенә файҙаланырға әҙер генә торалар. Институт базаһында беҙ шундай мөмкинлектәр тыуҙырырға тырышабыҙ ҙа инде. Мәҫәлән, Урал арьяғы бизнесмендарын йыйып, бизнес-һабантуй үткәрҙек. Шәхси эшҡыуарлығын асырға теләгән студенттар эште нимәнән башларға ғәмәли кәңәштәр алды. Йәштәрҙе фән өлкәһенә ылыҡтырыу буйынса ла реаль эштәр башҡарабыҙ, уларҙы үҫтерергә әҙер торабыҙ. Әлбиттә, телебеҙ һағындағы өлкән быуын уҡытыусылары киткәс, фән өлкәһендә әҙәклөк барлыҡҡа килде, алмаш ҡалманы. Хәҙер ана шул әҙәклөктө бөтөрөп, үҙебеҙҙән һуң башҡорт телен, әҙәбиәтен өйрәнерлек алмаш ҡалдырырға кәрәк. Китаптар уҡылмаған заманда был өлкәгә студенттарҙы ылыҡтырыу ауыр, әммә беҙ бирешә торған халыҡ түгел.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда 45 меңдән ашыу ғаилә Яңы йыл уйындарында ҡатнашты. Был турала социаль селтәрҙәге сәхифәһендә республика Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте. Билдәләнеүенсә, ғаилә уйындары быуна инде бишенсе йыл рәттән яңы йыл каникулдарында ойоштоорла. Тәүҙә - мәктәп, унан - муниципаль, иң һуңынан финал уйындары үтә. Финал 31 ғинуарҙа Өфөләге "Динамо" стадионында була.

✓2025 йылдан Рәсәйҙә демографик хәлде яҡшыртыуға һәм шул иҫәптән балалы ғаиләләргә ярҙам итеүгә йүнәлтелгән "Ғаилә", "Йәштәр һәм балалар", "Оҙайлы һәм әүҙем тормош", "Һаулыҡ һаҡлауҙың яңы технологиялары" кеүек яңы милли проекттар эшләй башлай. Башҡортостанда 10 йылда күп балалы ғаиләләр һаны 27,4 процентҡа (59 меңгә тиклем) артҡан. Уларҙың һаны буйынса республика Волга буйы федераль округында - беренсе, илдә етенсе урында тора. Хәҙер тыуым кимәле мең кешегә 8,9 тәшкил итә, был күрһәткес беҙҙә ил (8,7) һәм округ (8,2) буйынса уртаса алғанда юғарыраҡ.

✓Торатау итәгендәге сувенир тирмә илдә иң яҡшыларҙың береһе тип танылды. Геопарктағы сауҙа нөктәһе "Туристик сувенир" Бөтә Рәсәй конкурсы лауреаты булды. Конкурстың финалы ошо көндәрҙә Пермдә тамамланды. "Торатау шиханы янындағы этнокомплекста урынлашҡан сувенир тирмә "Туристик сувенир" Бөтә Рәсәй конкурсы лауреаты исемен яуланы. Магазин "Үҙенсәлекле сауҙа объекты" номинацияһында өсөнсө урынды алды", - тип хәбәр итте "Торатау" геопаркы. Хәбәр иткәнебеҙсә, ҡыш көнө шиханға баҫҡыс яһылды.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Александра Авдееваны республиканың Торлаҡ һәм төҙөләш күҙәтеүе буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы итеп тәғәйенләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы. Быға тиклем ул ведомство етәксеһе урынбаҫары вазифаһын биләне. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, республика Торлаҡ һәм төҙөләш күҙәтеүе буйынса дәүләт комитетының элекке рәйесе Артур Дәүләтшин 2 айға ҡулға алынды. Ул Благовещенда коммерция ойошмаһының күмәртә-бүлеү үҙәген төҙөгән компания вәкиленән 2,5 миллион һум аҡса алыуҙа ғәйепләнә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Бөтә Рәсәй мәктәп ҡоткарыу отрядтары ярыштары призерҙарына рәхмәт хаттары тапшырҙы. Иглин ауылының Данис Тикеев исемендәге 4-се мәктәбе уҡыусылары Артур Имашев, Таһир Исхаҡов, Алиса Верпето һәм Алена Анисимова республика Башлығының Рәхмәт хаты менән бүләкләнде. Радий Хәбиров шулай уҡ командаының тренеры, физкультура уҡытыусыһы Алина Исхаҡоваға иҫтәлекле бүләк тапшырҙы.

КӨН ТЕМАҺЫ

# ИЛ ЙОЛАҺЫНА...

## хан да буйһона




### Көсөргәнеш сығанағы

Бөгөн Өфө урамдарында хиджаб кейгән, йөш бала күтәргән, икенсе ҡулы менән өлкәнерәген етәкләгән, ә өсөнсөһө итәгенә йәбешкән Урта Азия йә Кавказ тарафтарынан килгән ҡатындарҙың минут һайын юлыбыҙҙа осрауҙарына тәүҙәрәк ятһынып ҡараһаҡ та, хәҙер тамам өйрәндек инде. Хатта улар һөйләшкәндә шымып торорға, ситкә янтайып, юл бирергә лә өйрәнеп киләбеҙ, буғай, әммә шулай итмәһән, өҫтөңә килеп менерҙәр төҫлө.

Үҙ закондары һәм үҙ төшөнсәләре менән тормошобоҙға хужаларса бәреп килеп ингән ниндәйҙер ят һәм сит тулҡын ваҡыт-ваҡыты менән йөрәкте сәнскеләп ала шулай ҙа: үҙ тыуған ереңдә кемдең генә ситнәтелгән һәм килмешәк хәлендә ҡалғыһы килер икән! Рәсәйҙең почетлы адвокаты Дмитрий Краснов әйтмешләй, йөмгиәтебеҙ ситтән килгәндәрҙең сит йоғонтоһо баҫымында йәшәргә, һәүетемсә тормошобоҙға килеп ингән үҙгәрештәр менән килешергә мәжбүр була, ҡайҙа бараһың - беҙҙең бит төп тәйәгебеҙ ошонда, башҡа илебеҙ юҡ. Ярай ҙа, урындағы халыҡтың хушкүңеллегәнән разый булып, шым ғына йәшәп ятһалар, ни әйтерһең.

Ә бит мигранттар үҙҙәре генә түгел, үҙҙәре менән бихисап проблемалар ҙа алып килделәр. Тәүҙәрәк эшкә урынлашып, аҙмы-күпме аҡса туплап, мигранттар тыуған илендәге ғаиләләренә ебәреп ятһа, аҙаҡҡараҡ улар илдәге ҡайһы бер "йомшаҡлыҡ"тарҙы күреп ала һалды һәм үҙ файҙаларына бороп та ебәрҙе: тиҙ арала бихисап балалары, ҡатындары, ҡазандары менән һис бер ҡаршылыҡһыҙ илебеҙ түренә килеп тулды. Килеп тә тулдылар, һәләт кенә нисектер гражданлыҡҡа ла эйә булдылар, фатирлы ла булып бөттөләр... Етмәһә, үҙебеҙҙә лә хатта күптәргә тәтемәгән социаль льготалар менән һин дә мин файҙаланып яталар. Илдәрендә төштәренә лә кермәгән Әсәлек капиталы, күрәһең, уларҙы иң ҡыҙыҡтырғаны. Урта Азия һәм Төньяҡ Кавказ республикаларының ҡайһы бер етәкселәре ҡәнәғәтләнеү менән белдереүенсә, үҙҙәрендә Әсәлек капиталы ҡаралмаған, сөнки уларҙың илендә демография проблемаһы юҡ. Әлбиттә, РФ Президенты Владимир Путин былтыр уҡ Әсәлек капиталын балаһы тыуған ваҡытта Рәсәй гражданлығы булғандарға ғына бирергә тигән законға ҡул ҡуйһа ла, был әрһеҙ мигранттар өсөн әллә ни кәртә була алмағандыр, сөнки улар кемуҙарҙан ярышып, Рәсәй гражданлығы юлларға тотондо. Кем белә, уларҙың бөтәһе лә законлы рәүештә эйә буламы уға, әллә беҙҙең коррупцион система ярҙам итәме...

Әйткәндәй, әле ошо көндәрҙә генә РФ Эске эштәр министрлығы Мәскәү буйынса Баш идаралығының миграция бүлегендә эшләгән элекке ике полковник - Дмитрий Тахтаулов менән Вячеслав Фокиндың, шулай уҡ уларҙың ике эшҡыуар йөҙөндәге эшнәләре А.Школьников менән В. Абрамовтың 10 мең (!) сит ил кешеһен законһыҙ рәүештә Рәсәйгә индереүҙе ойоштороуҙары һәм ошо нигеҙҙә законһыҙ бизнес менән шөғөлләнгәндәре өсөн баш ҡаланың Басман район суды тарафынан енәйәт эшен ҡараны һәм улар 6 йылға колонияға хөкөм ителде. Әлеге ваҡытта полицияның экс-полковнигы Тахтауловтың һәм уның туғандарының коррупцион нигеҙҙә тупланған байлығын дәүләт файҙаһына ҡайтарыу буйынса эш ҡарала.

Әлеге көндә РФ Эске эштәр министрлығы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Рәсәйҙә 6 миллиондан ашыу мигрант йәшәй, шуларҙың 750 меңе, ә, бәлки, миллионға яҡыны, рөхсәтһеҙ рәүештә йәшәй. Ғөмүмән, был йәһәттән һандар менән аныҡ ҡына эш итеүе лә ҡыйын, сөнки төрлө сығанаҡтар төрлө һандар менән эш итә. Адвокат Краснов раҫлауынса, рөхсәтһеҙ йәшәгән һәр бер мигрант, йомшаҡ итеп әйткәндә, хоҡуҡ боҙоусы, әгәр енәйәтсе булмаһа. Өҫтәүенә, беҙҙең, йәнәһе лә, "демография һәм иҡтисад мәсьәләләрен хәл итеү өсөн" килеүсе мигранттарҙың белем кимәленә ҡарап та, уларҙың Рәсәйгә "ярҙам итеү" түгел, ә ярҙан этеү һәм илгә өҫтәмә проблемалар тыуҙырыу ғына икәнлеге күренә. Рәсәй Хәүефһеҙлек советы рәйесе урынбаҫары Дмитрий Медведев, Рәсәйгә мигранттарҙың ғаиләләре менән оҙайлы ваҡытҡа килеп тулыуы илдең социаль өлкәһендә көсөргәнеш тыуҙыра, тип бик дөрөҫ әйтте. Бөтәһенән дә бигерәк был улар тарафынан милләт-ара ығы-зығы, терроризм һәм экстремистик кәйеф тыуҙырыу хәүефенә ҡағыла, тине ул.

(Дауамы 6-сы биттә).

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ЙӘШЕН УҒЫ КЕМГӘ ТӨБӘЛДЕ?

**Яңы йыл Америка Ҡушма Штаттарына йәшен уғы булып килде: Яңы йыл төнөндә илдең ике символы иҫәпләнгән архитектура бинаһы - Вашингтондың Капитолий көмбәҙе менән Американың тәүге президенты Джордж Вашингтон иҫтәлегенә 169 метр бейеклектәге (91 мең тонна) Вашингтон монументына, шулай уҡ Нью-Йорктағы 102 ҡатлы 443 метр бейеклектәге күккә олғашҡан Эмпайр-стейт-билдинг бинаһына йәшен атты.**

Бөтә был объекттарҙың да йәшен ҡайтарғыс системалары булыуға ҡарамаҫтан, стихия уғының тап уларҙы һайлауы төрлө юрауҙар һәм фараздар тыуҙырҙы. Капитолий эш һәм кәнәшмә ултырыштары урыны булған АҠШ Сенатының Республикандар партияһы сенаторы Майк Ли үҙенең социаль селтәрендә был хаҡта "иҫкәртеү" тип яҙып сыҡһа, ябай американдар үҙ комментарийҙарында быны, киреһенсә, яҡшыға юраны, икенселәре властҡа яңы президент килеү менән бәйле үҙгәрештәргә, яңырыуға өмөт билдәһе тип ҡабул итте. Әллә инде...

Тик тап бына шул көндәрҙә АҠШ-та ике теракт ҡылынды: Лас-Вегастағы Дональд Трамп отеле янында Илон Маск етәкселек иткән Tesla компанияһының Cybertruck автомобилендә үлемесле шартлау яңғыраны: водитель һәләк булған, ете кеше йәрәхәтләнгән. Бынан тыш, 2 ғинуарҙа Яңы Орлеан ҡалаһында АҠШ гражданы, 42 йәшлек террорсы Джаббар машинаһы менән халыҡ төркөмө өҫтөнә барып менә: 10-дан ашыу кеше һәләк була, 35-е йәрәхәтләнә. Социаль селтәрҙәрендә Америка комментаторҙары был терракттарҙың күрәләтә, асыҡтан-асыҡ башҡарылыуы тураһында яҙа. Ни тиһәң дә, Трамптың "үгеҙҙе мөгөҙөнән алып", илгә традицион ҡиммәттәрҙе ҡайтарыу, миграция менән ҡәтғи көрәш ниәттәре АҠШ-та күптәргә оҡшап етмәй, тиҙәр. Ә дәүләт аппаратын ҡыҫҡартыу һәм хәрби-сәнәғәт комплексындағы (ЦРУ,ФБР һ.б. махсус хеҙмәттәрҙе әйтеп тә тормайынса) үҙгәрештәр Американың юғары ҡатлам элитаһында асыу һәм нәфрәт тыуҙыра, тип яҙа Комсомольская правда сайты кҙәтеүсеһе. Өҫтәүенә, хатта тәбиғәт тә нимәгәлер ризаһыҙлыҡ белдереп кенә тора кеүек: 5-6 ғинуарҙа 10 йыл буйы күрелмәгән ҡеүәтле ҡар бураны айҡанлы илдә ғәҙәттән тыш хәл иғлан ителде: ҡайһы бер штаттарҙа аэропорттар ябылды, 2,5 меңләгән рейс тотҡарланды, электр энергияһы, һыу менән тәьминәт өҙөлдө, транспорт туҡтаны. Көслө буран арҡаһында юлда меңәрләгән кеше ҡар "тоҙағында " ҡалған, үлеүселәр бар, тип хәбәр итә Российская газета сайты. Өҫтәүенә, Калифорния штаты менән Лос -Анджелес тирәһендә көслө урман янғыны сәбәпле, эвакуация иғлан ителде.

Бәлки, ысынлап та, Юғары көс, кемдер әйтмешләй, Америка властарына үҙҙәренең эске эштәре һәм проблемалары менән булышыу хәйерлерәк, тигән ишара яһарға итәлер? Югиһә бит, һаман властан китә алмай йонсоған Байден Украинаға ярҙамдың "хушлашыу пакеты"н әҙерләй, тип хәбәр итә Ассошиэйтед пресс агентлығы. Ярҙамдың аныҡ суммаһы әлегә сер итеп тотола, ә бына Байден хакимлыҡ иткән осорҙа Украинаға йәмғеһе 174 млрд доллар аҡса һәм 71 пакет хәрби ярҙам ебәрелгән. Ә Пентагон ярҙам программаһын 2027 йылғаса дауам итергә ниәтләй. Ошо көндәрҙә генә мәғлүм булыуынса, Германияның Rheimetall хәрби предприятиеһы Украинаға техник йәһәттән камиллаштырылған өр-яңы гусеницалы БМП машинаһының һинау партияһын ебәргән.

Уның ҡарауы, дошман күпме генә көсәнмәһен һәм баштан-аяҡ ҡоралланмаһын, Украина армияһының тере көстәре берҙәм рәүештә сафтан сығарыла бара. Яңы йылдың тәүге аҙнаһында ғына ла МХО зонаһында дошман ҡоралы көстәре пленға бирелгән, үлгән һәм яраланған 13 мең кешеһен юғалтты, шуларҙың 2975-е - Курск йүнәлешендә. Шулай уҡ дошмандың 46 танкы юҡ ителде, тип хәбәр итә Рәсәй Оборона министрлығының Telegram-каналы. 8 ғинуар иртәһенең МХО белешмәһенә ҡарағанда, Рәсәй ғәскәрҙәре Украина Ҡоралы көстәренең Краснолиманский йүнәлешендәге оборонаһын өҙҙө һәм Ивановканан Колодцыға табан ыңғылды. Йәнә лә беҙҙең ғәскәр Курск өлкәһендә үткәргән контрһөжүм һөҙөмтәһендә бер нисә мөһим районда дошман бәреп сығарылды. Рәсәй Ҡораллы көстәре бер тәүлек эсендә 164 районда Украина армияһының хәрби аэродромдарын, склад һәм техника тупланған урындарҙы авиация, ракета ғәскәрҙәре, артиллерия һәм пилотһыҙ осоу аппараттары ярҙамында көслө утҡа тотто. Украина һалдаттары Курскиҙың һуғыш яланынан яраланған иптәштәрен ташлап ҡаса.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓2022 йылдан БР Башлығы башланғыcы менән баҡсасылыҡ ширҡәттәренә илткән юлдар ҙа тәртипкә килтерелә башланы. Өс йылда (2022, 2023, 2024) 212 баҡсасылыҡ ширҡәтенә барлығы 85 км юл ремонтланған. Былтыр Өфө, Күмертау ҡалаларында, Бәләбәй, Ҡырмыҫҡалы, Кушнаренко, Иглин, Өфө һәм Шишмә райондарында урынлашҡан 72 баҡса ширҡәтенә 26 саҡрым юл тәртипкә килтерелгән. Был эшкә 154 млн һум аҡса йүнәлтелгән. Быйыл был маҡсатҡа 150 млн һум аҡса ҡаралған.

✓Республиканың 350 меңдән ашыу кешеһе "Бөтә Рәсәй экологик диктанты - 2024"-тә ҡатнашты. Был - экодиктантта ҡатнашыусы төбәктәр араһында иң яҡшы күрһәткес. Экологик диктантты бөтәһе 6,7 миллион кеше яҙған. Бөтә Рәсәй экологик диктанты Рәсәй Президенты Владимир Путин башланғысы менән ойошторолған "Экология" милли проектының мөһим өлөшө булып тора.

✓"Ватан һаҡсылары" дәүләт фонды менән Рәсәй Армияһының Үҙәк академия театры "Үҙ заманыбыҙ геройы" драматургия конкурсы иғлан итте. Ижади кешеләр МХО ветерандары, ирекмәндәр, табиптар, санинструкторҙар тураһында, шулай уҡ яңы төбәктәребеҙ халҡы тарихы буйынса пьеса яҙырға тейеш. Конкурс эштәре 30 ғинуарға тиклем ҡабул ителә. 40 биттән күберәк һәм синопсис менән булырға тейеш. teatr.armii@yandex.ru адресына "Конкурс "Герой своего времени" билдәһе менән һалырға.

✓Былтыр 20 меңләп өлкән кеше республика төбәктәрендә "Башҡорт оҙон ғүмерлеге. Туризм" проекты сиктәрендә ойошторолған бер көнлөк сәйәхәттә булған, 1333 пенсионер - Белоруссияға, 150-һе Үзбәкстанға барған. Белешмә: проекта ҡатнашыу өсөн долголетие.соцтуризмрб.рф сайтында теркәлеп, тур һайларға, маршурт һәм көнөн билдәләргә кәрәк. 8 (347) 218-17-20 номерына шылтыратып та һорашырға була.

✓Яңы йыл каникулдарында һунарсылыҡ өлкәһендә ғәмәлдәге ҡануниәтте боҙоуҙарҙы иҫкәртеү, асыҡлау һәм тотоу маҡсатында тотош республика буйынса рейдтар үткәрелде. Был осорҙа мышы һәм ҡоралайға һунар рөхсәт ителгәйне. Республикала 80 меңдән ашыу һунарсы теркәлгән. Улар тарафынан һунар ҡағыҙҙарен боҙоу осраҡтары булып тора. Ҡырағай хайуандарҙы атырға рөхсәт ҡағыҙҙары булмау, хәүефһеҙлек сараларын үтәмәү тыу хоҡуҡ боҙоуҙарға инә.

✓Ҡытай тағы ла яңы бер вирустан зыян күрә. Метапневмовирус ОРЗ, ОРВИ кеүек үк билдәләргә эйә: тымау, температура күтәрелеү, тын алыуы ауырайыу. Әлегә вирусты дауалау өсөн тәғәйен генә дарыу юҡ. Сир Ҡытайҙың төньяҡ провинцияларында таралған. Вирус сабыйҙарға, оло йәштәгеләргә бик ҡурҡыныс, айырыуса уны 14 йәшкә тиклемге балалар тиҙ йоҡтора.

*ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!*

# ТЕАТРҘАР - АВТОБУСЛЫ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең йыл аҙағындағы оператив кәңәшмәһендә республиканың 11 төп театры һәм башҡа мәҙәниәт учреждениелары етәкселәренә 11 йөк автомобиле асҡыстарын тапшырҙы.** Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2022 йылда Башҡортостандың мәҙәниәт учреждениелары тарихында тәүге тапҡыр 94 берәмек транспорт һатып алынды. Быға тиклем 2016 йылда ғына биш автомобиль тапшырылды. "Был программа эшләй башлағанға тиклем беҙҙә мәҙәниәт учреждениелары автомобилдәре 100 процентҡа тиерлек иҫкергәйне. Гастролдәргә юлланған артистарыбыҙ өсөн хәүеф янай ине. Ике йыл эсендә ҙур класлы 8 автобус, урта класлы 3 автобус, 16 микроавтобус, 51 еңел автомобиль һатып алдыҡ. Бөтәһе ярты миллиард һумдан ашыу суммаға 89 берәмек автотранспорт һатып алынды. Ошондай ярҙамығыҙ өсөн ҙур рәхмәт һеҙгә, Радий Фәрит улы. Ошо авторанспорт ярҙамында биш мендән ашыу гастроль ойошторолдо", - тип билдәләне Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова. Яңы йөк машиналары театр һәм филармония коллективтарының гастролдәре ваҡытында декорациялар ташыу өсөн тәғәйенләнә.

✓ **Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика журналистикаһының иң яҡшы вәкилдәрен - "Хәҡиҡәт. Яуаплылыҡ. Ҡаһарманлыҡ" беренсе республика конкурсы еңеүселәрен бүләкләне.** Конкурстың төрлө номинацияларында еңеү яулаған журналистарға дипломдар һәм 300 мең һум премия тапшырылды. "Хеҙмәтегеҙгә хөрмәт менән ҡарайым. Беҙҙең 30-ға яҡын журналист даими рәүештә махсус операция зонаһына командировкаларға сыға. Хәрби хәбәрселәр пулы барлыҡҡа килде. Азат Саҙрыев, Айнур Кәбиров, Вәдүт Исхаҡов, Эдуард Ҡусҡарбәков, Гүзәл Хәмитова һәм башҡалар. Журналист өсөн үҙ геройы менән аралашыу, ваҡиғалар урынында булыу мөһим. Бының өсөн һеҙ меңләгән саҡрым юл үтәһегеҙ. Шартлауҙар яңғыраған, пилотһыҙ осҡостар һөжүм иткән урында эшләү өсөн, ысынлап та, ҡыйыулыҡ талап ителә. Унын ҡарауы, һеҙҙең сюжеттарҙа, мәҡәләләрҙә, китаптарҙа - окоптағы ысынбарлыҡ, ир-егеттәрҙең батырлығы, бына шуларҙы кешеләргә еткерергә кәрәк", - тине Радий Хәбиров.

✓ **Башҡортостанда айырым категориялар өсөн шәхси йорттарға газ үткәреүгә сертификаттар тапшырыу тәртибенә үҙгәрештәр индерелде.** Хөкүмәт ҡарарынан күренеүенсә, ирекле формированиелар составында Махсус хәрби операцияға киткән граждандар газды бушлай тоташтырыу хоҡуғына эйә була. Бынан алдағы редакцияла "ирекле отрядтар" тип яҙылғайны. Милли гвардия ғәскәрҙәре сафында хеҙмәт иткән полицейскийҙар Украина, Луганск Халыҡ Республикаһы, Донецк Халыҡ Республикаһы, Запорожье һәм Херсон өлкәләре биләмәләрендә МХО-ла ҡатнашыуын белешмә менән раҫларға тейеш, тиелә документта. Шулай уҡ ишле ғаиләләргә сертификаттар тапшырыу тәртибенә аныҡлыҡ индерелде. Өс һәм унан күберәк балаһы булған (шул иҫәптән уллыҡҡа йәки опекаға алынған) ғаиләләр ишле тип иҫәпләнә. Льгота 18 йәшкәсә йәки көндөҙгө бүлектә уҡыған 23 йәшкә тиклемге өс бала тәрбиәләгән осраҡта бирелә.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ШАҠША КҮПЕРЕ АСЫҠ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Шаҡша күперенең дүрт һыҙатында хәрәкәтте асыу тантанаһында ҡатнашты.**




1984 йылда Ҡариҙел йылғаһы аша һалынған күпер Шаҡша биҫтәһен һәм Иглин районы ауылдарын республиканың баш ҡалаһы менән тоташтырған берҙәнбер юл булып тора. Шаҡша күперен капиталь төҙөкләндереү эштәре 2023 йылдың яҙында башланды. Билдәләнеүенсә, капиталь ремонттан һуң күпер 50 йылға тиклем хеҙмәт итергә тейеш. Радий Хәбиров Өфөлә күперҙәрҙе ремонтлау һәм төҙөү буйынса артабанғы пландар хаҡында һөйләне. "Беҙгә тәү сиратта, әлбиттә, быйыл аркалы күпер өҫтөндә эште тамамларға кәрәк. Был эште тамамларбыҙ, унда барыһы ла аңлашыла. Затон күпере етди хәүеф тыуҙыра. Беҙ яҡынса хаҡын беләбеҙ, беҙҙә проект, экспертиза бар, шуға күрә бер йылдан һуң эште башларға тейешбеҙ, әле финанслау сығанағы тураһында уйлайбыҙ. Беҙҙә тағы ла ике күпер төҙөкләндерелә. Интернациональ урамы яғында һәм Нижегородка күпере. Бында ла концессиялар буйынса вариант эҙләйбеҙ. Көнсығыш сығыу юлы кешеләргә ошо йәһәттән альтернатива биреүҙе күрһәтте. Көньяҡ ҡапҡаларҙы ла быйыл сафҡа индерәбеҙ. Ләкин беҙгә шунда уҡ Көньяҡ урау юлына тотонорға кәрәк. Пландар шундай", - тине Радий Хәбиров.

# БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ АРНАП...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығына әҙерлек һәм уны билдәләү буйынса республика ойоштороу комитеты ултырышын үткәрҙе.**

"Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығы - илебеҙ һәм союздаштарыбыҙ өсөн мөһим ваҡиға. Унын совет халҡының батырлығы символы булараҡ әһәмиәте бөгөнгө көндә баһалап бөткөһөҙ. Был дата беҙҙе герой-фронтовиктарға, тыл эшсәндәренә тиңләшергә, бөгөнгө һынауҙар осоронда уларға лайыҡлы булырға саҡыра, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Был датаны байрам итеүгә айырым мәғәнә һалырға, тарихи нигеҙ һәм заманса күҙаллау менән тулыландырырға, барлыҡ сараларҙы ла ошо йәһәттән байытырға тейешбеҙ".

Республика Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев байрам саралары тураһында хәбәр итте. Төп тантаналар 2025 йылдың 9 майына планлаштырылған. "Еңеү көнөнөң төп сараһы булып Октябрь проспектында уҙасаҡ хәрби хеҙмәткәрҙәр һәм хәрби техника парады тора. Смотрҙа Өфө территориаль гарнизоны хәрбиҙәре, хәрби хәрәкәттәр ветерандары, уҡыу йорттары курсанттары һәм кадеттарының ҡатнашыуы көтөлә. Шулай уҡ "Үлемһеҙ полк" акцияһын һәм тантаналы йыйылыш үткәреү планлаштырыла. 2025 йылдың июнендә республика илдең Оборона министрлығы проектына ҡушыла, һәм барлыҡ муниципалитеттарҙа ла Армия мәҙәниәте көндәре уҙасаҡ, - тип белдерҙе Урал Килсенбаев. - Юбилей йылында кире ҡайтарылған исемдәр музейын да асырға, тарихи үҙәктә музей кварталын булдырырға ниәтләйбеҙ. 2025 йылдың октябрендә режиссер Булат Йосоповтың Башҡортостан Башлығы Гранты фонды ярҙамында төшөрөлгән "Фәрзәнә көнбайышҡа бара" фильмы сыға".

Ойоштороу комитеты ултырышында ҡаралған мәсьәләләр иҫәбендә - өлкән быуын батырлыҡтары тураһындағы хәтерҙе һаҡлау. Төбәк етәксеһе, был темаға айырым иғтибар бүлергә кәрәк, тип билдәләне. "2022 йылдан республикабыҙҙа "Ватанды һаҡлағанда һәләк булғандарҙың иҫтәлеген мәңгеләштереү" федераль маҡсатлы программаһы тормошҡа ашырыла. 2023 йылда унда 46 муниципалитет ҡатнашты, 111 хәрби ҡәберлек тергеҙелде, - тине Радий Хәбиров. - Был эш барлыҡ финанс сығанаҡтары иҫәбенә даими нигеҙҙә алып барылырға тейеш".

Башҡортостанда 2 410 һәйкәл, мемориаль таҡтаташ, обелиск, 312 тематик аллея һәм 4 500-гә яҡын зыярат иҫәпләнә. "2025 йылдың 19 апреленән 8 майына тиклем һәйкәлдәрҙе, мемориалдарҙы һәм саралар үткәреү урындарын йыйыштырабыҙ, бысраҡтан һәм сүп-сарҙан таҙартасаҡбыҙ, - тине Башҡортостандың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирина Голованова. - Хәтер һәм иҫкә алыу көнөн 26 апрелдә "Йәшел Башҡортостан" акцияһы менән бергә үткәрергә планлаштырабыҙ".

Ултырыш аҙағында Башҡортостан Башлығы, эште тейешле кимәлдә ойоштороу маҡсатында, барлыҡ ведомстволарҙы һәм ойошмаларҙы берлектә эшләргә саҡырҙы.

# ШЫРШЫ ЛА АЛЫП БАРҘЫЛАР

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы депутаттары ошо көндәрҙә Донбассҡа гуманитар йөк тейәгән колоннаны оҙатып барҙы.**

Был юлы гуманитар ярҙам менән бергә Красный Луч ҡалаһынан хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең балалары өсөн Яңы йыл бүләктәре һәм Петровское ауылы өсөн Яңы йыл шыршыһы ебәрелде. "Балалар, ғәҙәттә, Яңы йылды түҙемһеҙләнеп көтә, мөғжизә көтә. Беҙ Красный Луч ҡалаһына - Яңы йыл бүләктәре, ә Петровское балаларына Күмертауҙан шыршы алып барҙыҡ. Баҡтиһәң, ауылда һәм тирә-йүндә шыршы ҡалмаған тиерлек. Бер өлөшө янғында юҡҡа сыҡҡан, бер өлөшөн халыҡ утынға ҡырҡҡан. Ошо көндәрҙә ауылдың төп майҙанын Башҡортостандан килтерелгән һигеҙ метрлыҡ шыршы биҙәне", - тине Константин Толкачев. Депутаттар ярҙам йыйыу эшен даими алып бара, ләкин нәҡ ошо йөк Башҡортостандың Конституция советы ағзалары ҡатнашлығында парламентарийҙарҙың шәхси аҡсаһына йыйылған, тип белдерҙе парламент спикеры. Колонна составында яугир яҡташтары янына Архангел, Ауырғазы, Дыуан, Ҡырмыҫҡалы һәм Шаран районадары вәкилдәре лә барҙы. Дәүләт Йыйылышы рәйесе һәм сәфәрҙә ҡатнашҡан депутаттар Бердянск, Красный Луч, Днепрорудное, Геническ, Мелитополь, Донецк, Луганск ҡалаларында хәрбиҙәр менән осрашты. Луганск госпиталендә парламентарийҙар Башҡортостандан килгән ирекмән ҡатын-ҡыҙҙарҙы барып күрҙе. Ҡаһарманлығы менән айырылып торған яугирҙар дәүләт наградалары менән бүләкләнде. Донецкиҙа һәм Луганскиҙа парламент-ара хеҙмәттәшлек мәсьәләләре тикшерелде.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөнөң Совет майҙанында 31 декабрь - 1 ғинуарҙа "Терра-ҡыш" Яңы йыл фестивале үтте. Ҡаланың тарихи үҙәге, әйтерһең, һабантуй майҙанына әүерелде. Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу ярыштар, әүҙем күңел асыуҙар ойошторҙо. Ә 1 ғинуарҙағы конкурс-парадта ҡаланың үҙәк урамдары буйлап әкиәт, фильм, йәнһүрәттәр персонаждары булып кейенгән 200-ләгән ҡатнашыусы үтте. Байрамға килгәндәр Совет майҙанында һепертке ярҙамында хоккей уйнаны, арҡан тартышты, тоҡ менән алышты, концерт ҡараны.

✓Башҡортостандың эске эштәр органдары ветерандары һәм хеҙмәткәрҙәре Өфө үҙәгендә урынлашҡан 12 ҡатлы яңы йорттан фатир алды. Был хаҡта Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр иттеләр. Торлаҡ йәшәү шарттарын яҡшыртыуға мохтаж полицейскийҙар өсөн тәғәйенләнгән. Бинала 117 фатир һәм 21 студия, ихатала балалар майҙансығы бар. Төҙөлөш Федераль адреслы инвестиция программаһы буйынса финансланған.

✓Башҡортостан спортсылары тау саңғыһы спорты буйынса Бөтә Рәсәй инвалидтар спартакиадаһының беренсе этабында 9 миҙал яуланы. Республиканың Спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Башҡортостандан туғыҙ спортсы ҡатнашты. Карина Закирова һәм Александр Лебединцев слалом-гигант дисциплинаһында еңеүсе булды. Шулай уҡ улар супер-гигантта һәм слаломда көмөш миҙалдар алды. Ошо уҡ дисциплиналарҙа Ләйлә Аҡсурина бер көмөш һәм бер бронза миҙал алды, Риза Йыһаншин ике бронза миҙал яуланы. Ярыштарҙа илдең 7 төбәгенән 46 спортсы ҡатнашты, тип билдәләнеләр Спорт министрлығында.

✓Өфөнөң Киров һәм Ленин районадары хәрби комиссары Ринат Латипов юғарыраҡ вазифаға тәғәйенләнде. Офицер - Башҡортостан Республикаһының хәрби комиссары урынбаҫары. Был хаҡта Киров районы хакимиәте башлығы Илвир Нурдәүләтов хәбәр итте. "Ринат Альберт улы эште аныҡ һәм һөҙөмтәле ойоштора белә. Илебеҙҙәге ҡатмарлы осорҙа ул үҙен Киров районында тәжрибәле хәрби комиссар итеп күрһәтте. Булдыҡлылығы һәм эшкә тоғролоғо унын уңыштарға өлгәшеренә шик ҡалдырмай", - тип яҙҙы Илвир Нурдәүләтов социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓Өфө рапирасыһы Дәүләт Хәйретдинов кадеттар араһында ойошторолған Бөтә Рәсәй ярыштарында алтын миҙал яуланы. Фехтование буйынса турнир Санкт-Петербургта уҙҙы. "Турнирҙа ҡатнашҡан 131 спортсынан Дәүләт Хәйретдиновҡа етеүсе булманы", - тип хәбәр иттеләр республиканың Спорт министрлығынан.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

✔ *Ҡалала совет осоронда ултыртылған ҡарт тирәк ағастары әлегә тиклем күп, улар беҙҙең мегаполис өсөн ҡулайлыраҡ ағастар менән алыштырыласаҡ. Иң тәүҙә йүкә ағастарын ултыртыу ҡаралған.*



...ГӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАШ ҠАЛАНЫҢ...

## 2025 йылға өмөттәре

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев Башҡортостан юлдаш телевидениеһында баш ҡалабыҙҙың бөгөнгөһөнә һәм киләсәгенә ҡағылышлы мөһим һорауҙарға ентекле яуаптар бирҙе. Өфө мэры һөйләгәндәрҙе уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**



### Баш ҡала: үҫеш дауам итә

Өфө - республикабыҙҙың иҡтисади, ижтимағи һәм мәҙәни үҙәге, төбәк халҡының дүрттән бер өлөшөнән күберәге бында йәшәй, етештерелгән барса продукцияның 50 проценттан ашыуы - баш ҡала предприятиеларыныҡы.

Беҙҙең бурыс - ҡалабыҙҙа йәшәүселәргә уңайлы йәшәү шарттары булдырыу. Иң тәүҙә яңы юл үткәргестәр, юлдар һәм күперҙәр төҙөргә кәрәк. Ошо йәһәттән бик яҡшы темп алдыҡ. Йәнә үҙенә тартып торған үҙәктәр булдырыу мөһим. Донъя кимәлендәге Өфө фән-белем биреү үҙәгенең 20 заманса лабораторияһы бар, был миллионлы ҡала өсөн бик яҡшы. Был беҙҙең йәштәребеҙҙе алға әйҙәйәсәк. Беҙ йәйәү йөрөүсе граждандарыбыҙға ла уңайлы шарттар булдырырға тырышабыҙ: тротуарҙарҙы киңәйтәбеҙ, йәшелләндереү сараларын ҡулланып, ҡаланың яңы йәшел ялмаһын булдырабыҙ. Беҙҙә яҡын йылдарҙа ни булыры ғына түгел, ә ҡала мөхитенең бер нисә тиҫтә йылдан һуң ниндәй буласағы нығыраҡ борсой. Мәҫәлән, урамдарға һәм майҙандарға бөгөн бетон плитәһе генә түгел, гранит та түшәлә, ә ул 50 йыл унан да артығыраҡ йылдар буйына сифатын юғалтмаясаҡ.

Тарихи мираҫ объекттарын тергеҙеү процесы бик яҡшы бара. Быйыл үҙенсәлекле рекордҡа өлгәштек - бер юлы 20 мәҙәни мираҫ объекты тергеҙелде. Һәр хәлдә, Өфө ҡалаһын үҫтереү программаһы бер бөтөнлөктә тәшкил итә. Был проектҡа "Өфө ихатаһы", "Өфө муйынсағы" проекты ла, социаль һәм спорт инфраструктураһы объекттары ла инә. Физкультура-һауыҡтырыу комплекстарын төҙөү буйынса беҙ алған темптар быға тиклем бер ҡасан да булмаған икәнен лә белгәнһегеҙҙер.

### Торлаҡ төҙөлөшө һәм архитектура үҫеше

Тамам туҙған торлаҡ фондын бөтөрөүгә шәхси инвесторҙарҙы йәлеп итеү һәм өйҙәр төҙөү менән параллель рәүештә яҡын киләсәктә бында йәшәйәсәк кешеләр өсөн социаль инфраструктура объекттарын төҙөү күҙаллана. Әле Өфөлә территорияларҙы комплекслы үҫтереү буйынса 8 килешеү төҙөлгән, уның дөйөм майҙаны 73,8 гектарға етә, төҙөлөш потенциалы - 872 мең квадрат метр торлаҡ майҙанын сафҡа индереү. Ошо килешеүҙәр нигеҙендә авария хәлендәге торлаҡтың дөйөм майҙанының 24 проценты бөтөрөләсәк.

Киләсәктә Ағиҙел һәм Өфө йылғалары арьяғында ҙур торлаҡ төҙөлөшөн башлау күҙаллана - унда миллиондарса квадрат метр күләмендәге йорттар төҙөп буласаҡ. Ә бының өсөн иң элгәре база инженер инфраструктураһын булдырыу фарыз. Әлеге көндә был процесс башланды ла инде.

Тағы ла бер проблема - архитектура проекттарын раҫлағанда уға бәйләнешле булған барса яҡтарҙың позицияларын иҫәпкә алырға тейешбеҙ. Яҡын-тирәлә йәшәүселәргә проблемалар булдырмау маҡсатында махсус кәңәшмәләр уҙғарыла, унда һәр бер яңы төҙөлөш проекты айырым ҡарала, архитекторҙарҙың, ер эштәре белгестәренең һәм надзор органдары вәкилдәренең фекерҙәре иҫәпкә алына.

### 2025 йылда ниҙәр эшләнәсәк

Алдағы йылда республика баш ҡалаһының Ленин исемендәге иң боронғо паркында төҙөкләндереү эштәре башланасаҡ. Ул күҙ алдына үҙгәртеп ҡоролаcаҡ.

Ҡаланың тарихи өлөшөндә йәйәү йөрөүсе халыҡ һәм велосипедсылар өсөн комфортлы булған берҙәм ял итеү селтәрен булдырыу күҙаллана.

Йәшелләндереү мөһим бурыстарҙың береһе булып ҡала. Ҡалала совет осоронда ултыртылған ҡарт тирәк ағастары әлегә тиклем күп, улар беҙҙең мегаполис өсөн ҡулайлыраҡ ағастар менән алыштырыласаҡ. Иң тәүҙә йүкә ағастарын ултыртыу ҡаралған, уны беҙ күптән билдәле Өфө брендтарының береһе итеп ҡарайбыҙ. Үҙгәрештәр ҡалабыҙҙың бик күп урындарында буласаҡ, ҡалабыҙҙың төрлө райондарын бәйләүсе "Өфө муйынсағы" проекты буйынса эштәр дауам итәсәк. Әле Дим районын һәм Өфөнөң тарихи үҙәген велоюл менән тоташтырыу проекты әҙерләнә. Көндәр йылыныу менән төҙөлөш эштәре лә башланасаҡ.

"Өфө муйынсағы"ның маршруттары билдәле, улар видеокүҙәтеү системалары, спорт һәм балалар майҙансыҡтары менән тулыландырыласаҡ.

**Шулай итеп, Ратмир Мәүлиев әңгәмәнең аҙағында баш ҡала кешеләренә былай тип әйтте: "Өфөлә нимәләр эшләнеүе менән ҡыҙыҡһынығыҙ, уны өйрәнегеҙ, яратығыҙ һәм, ышанығыҙ, һеҙ беҙҙең гүзәл ҡалабыҙҙы үҙегеҙ өсөн яңы яҡтан асасаҡһығыҙ".**

ҠЫҪҠАСА

# ЯРҘАМ ЙЫЛЫ

**2024 йылда Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам сараларын ғәмәлгә ашырыуға 10 миллиард һум йүнәлтелде.** Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ошо турала белдерҙе. "Алда Махсус хәрби операция бурыстарын хәл итеү буйынса етди эш тора. Беҙ фронтҡа, яңы төбәктәргә, Курск һәм Белгород өлкәләренә 142 гуманитар ылау оҙаттыҡ. МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына 40-тан ашыу төбәк ярҙам сараларын бойомға ашырабыҙ. Ошо маҡсатҡа 10 миллиард һум йүнәлтелде. Был беҙҙең өсөн төп йүнәлеш булып тора. Шуға күрә быйылғы йыл республикала Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам йылы тип иғлан ителде", - тине Радий Хәбиров.

✔ **Башҡортостан статистиктары социаль әһәмиәтле аҙыҡ-түлеккә уртаса ҡулланыу хаҡтарының үҙгәреүе хаҡында хәбәр итте.** Башстаттың һайланма аҙналыҡ мониторингы мәғлүмәттәре буйынса, макарон һәм ҡарабойҙай ярмаһы - 1,33-1,48 процентҡа, банан 1,2 процентҡа арзанайған. Бынан тыш, арзаныраҡ аҙыҡ-түлек исемлегенә шулай уҡ бешкән колбаса, шәкәр, помидор, сосиска, сарделька, картуф, дөгө, яңы аҡ кәбеҫтә инә. Һәм, киреһенсә, төбәктә кишер, сөгөлдөр һәм йомортҡа ҡиммәтләнгән. ошо арала уларҙың хаҡы 3,71 - 6,37 процентҡа артҡан. Ҡиммәтерәк аҙыҡ-түлек исемлегенә шулай уҡ туңдырылған балыҡ, тоҙ, балалар өсөн емеш-еләк һәм ит консервалары, һуған, аҡ май, маргарин, ҡара сәй, он, яңы ҡыяр, сусҡа ите, алма, һөт, эремсек, печенье, икмәк, вермишель, тары ярмаһы, тауыҡ, сыр һәм башҡа аҙыҡ-түлек ингән.

✔ **Рәсәй Президенты Владимир Путин әсирлеккә алынған йәки хәбәрһеҙ юғалған хәрбиҙәрҙең балаларына, шул иҫәптән Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан осорҙа айлыҡ социаль түләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы.** "Хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең айырым категорияларының балаларына өҫтәмә социаль ярҙам саралары күрһәтеү маҡсатында ҡарар итәм: 1. МХО-ла ҡатнашҡан осорҙа йә иһә Сүриә Ғәрәп Республикаһы биләмәһендә махсус бурыстарҙы үтәгәндә әсиргә төшкән йәки хәбәрһеҙ юғалған хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең балаларына Рәсәй Федерацияһы субъектында (балаларҙың йәшәгән урыны буйынса) билдәләнгән балалар өсөн йәшәү минимумы дәүмәлендә айлыҡ социаль түләү тәғәйенләргә", - тиелә документта. Был социаль пособие башҡа түләүҙәргә йоғонто яһамай. Айлыҡ түләү командирҙың бойороғонда күрһәтелгән (әсиргә төшкән йәки хәбәрһеҙ юғалған көндән) датанан билдәләнә, ләкин 2024 йылдың 1 декабренән һуң ғына. Сығымдарҙы финанслау Рәсәй хөкүмәтенә, пособие тәғәйенләүҙең һәм аҡса түләүҙең аныҡ тәртибен билдәләү башҡарма власть органдарына йөкмәтелгән. Указ уға ҡул ҡуйған көндән, 2024 йылдың 26 декабренән көсөнә инде.

✔ **Владимир Путин юғары белем биреү программалары буйынса уҡыған студенттар, курсанттар һәм тыңлаусылар өсөн Рәсәй Федерацияһы Президенты стипендияһын булдырҙы.** Ул 2025 йылдың 1 сентябренән тәғәйенләнә. Президент стипендияһының күләме - 30 мең һум. Стипендия йыл һайын бер йылға тәғәйенләнә һәм ай һайын түләнә. Рәсәй Федерацияһы Президенты стипендияһын алыусылар йыл да 3400 кешенән артмаҫҡа тейеш. Рәсәй Федерацияһы Президенты стипендияһы федераль бюджетта илдең Фән һәм юғары белем биреү министрлығына ошо маҡсаттар өсөн ҡаралған бюджет ассигнованиелары сиктәрендә түләнә.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Һарыгүҙ

Һарыгүҙ, йәки русса золототысячник зонтичный - бер йәки ике йыллыҡ үҫемлек, 40 см тирәһе бейеклектә, июль-августа сағыу алһыу төҫтә сәскә ата. Уның һәр өлөштәрендә лә 0,6-1 процентҡа тиклем алкоолидтар, 0,3 процент гликозидтар, ә ер өҫтө өлөшөндә аскорбин кислотаһы бар. Дауаланыуҙа сәскә атҡан осоронда төбөнә яҡын розеткаһы менән бергә ҡырҡып алынған йыйылған үләнде ҡулланалар. Үт ҡыуыу, газдарҙы сығарыу, бабасырға ҡаршы файҙалы. Ашҡаҙан һутының кислоталығын кәметә, аппетитты аса.

❖ Алкоголизмдан 4 өлөш һарыгүҙгә 1 өлөш әрем ҡушырға, әҙерләмәнең 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төрәндөрөп, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Гастриттан һарыгүҙ, ҡануләм (тимьян обыкновенный), ат бөтнөгө (шандра) үләндәрен тигеҙ өлөштә алырға. Әҙерләмәнең 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм һыуынғансы төнәтергә. Төнәтмәне аҙ-аҙ ғына уртлап, көнөнә 1-2 стакан эсергә.

Тағы ла һарыгүҙ үләне, бөтнөк (мята перечная), болон туҡранбашы (клевер луговой) япрағын бер тигеҙ алып та дауаланырға була. Әҙерләмәнең 1 ҡалағына 1,5 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм һыуынғансы төнәтергә. 3-кә бүлеп, ашарҙан 30 минут алда эсергә. Был аш һеңдереүҙе яҡшырта.

❖ Бабасырҙан 20 грамм ваҡланған һарыгүҙ үләненә 1/2 стакан 40 процентлы спирт йәки араҡы ҡойорға, көн һайын һелкетеп, 1-2 аҙна төнәтергә һәм һөҙөргә. Ашарҙан 20-30 минут алдан 15-20 тамсы эсергә.

❖ Кизеүҙән бер тигеҙ өлөштә һарыгүҙ үләнен (золототысячник обыкновенный), шифалы ромашка сәскәһен һәм өсъяпраҡ (вахта трехлистная) япрағын алырға. Әҙерләмәнең 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, йылыға төрөп 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Температура юғары күтәрелеп, кизеү менән сирләгәндә көнөнә 3 тапҡыр 1-әр стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✔ *Закон нигеҙендә сит ил балалары дәүләт һәм муниципаль дөйөм белем биреү ойошмаларында рус теленән бушлай имтихандарҙы уңышлы тапшырған хәлдә генә Рәсәй мәктәбенә уҡырға инә ала.*

*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Тәтелдәүес, ҡыҙылаяҡ сәпсәү

**(Травник)**



Һаҙ сәпсәүенә оҡшаған, саҡ ҡына унан ҙурыраҡ, суҡышы нескәрәк һәм ҡыҙылыраҡ, ҡанатында аҡ тап яҡшы күренеп тора. Аяҡтары сағыу ҡыҙыл йәки ҡыҙғылт һары төҫтә (был төркөмдәге башҡа ҡоштарҙан уны айырып тороусы төп билдә). Осҡан саҡта ҡанаттары аҡ булып күренә, ҡанат осо - ҡара. Ергә төшкәс тә ҡыҙылаяҡ сәпсәү ҡанаттарын күбәләк кеүек өҫкә күтәрә.

Йәш ҡоштар күгелйем, ҡыҙғылт таптары бар, суҡыштары ҡарараҡ ҡыҙғылт.

Тауышы моңло, таҙа, моңһоуыраҡ, "тьюою", "тюлю", "тью-лю-лю" тип ишетелә. Ҡош туйы мәлендә "тьюлюлю-тьюлюлю" йәки "тьлияиу-тюлиу" тип һайрай.

Көнсығыш Европаның бөтөн территорияһында, Азияла таралған.

Башҡортостандың бөтөн территорияһында оя ҡора тигән фекерҙә ғалимдар. Урал аръяғында уның һаны күберәк, Көньяҡ Уралдың төньяғындағы урманлы райондарҙа осраған булмаған. Беҙҙең тикшеренеүҙәр ҙә шуны күрһәтә. Әбйәлил, Учалы, Саҡмағош райондарында өйрәнеү өсөн унлап тәтелдәүесте тотҡаныбыҙ бар.

Йәшәгән урыны - дымҡыл яландар, мул үләнле һаҙлыҡтар, күлдәрҙең һаҙлыҡлы ярҙары. Ошо төркөмгә ҡараған башҡа ҡоштар менән колониялар яһап йәшәй.

Ояһын ҡоро ергә, үләнгә ҡора. Уға кипкән үлән түшәй. 4 йомортҡа һала. 22-24 көн буйына инә ҡош менән ата ҡош сиратлап баҫалар. Яңы сыҡҡан бәпкәләрҙе оя тирәһендә тоталар. Улар бик һаҡ, тиҙ генә йәшенә белә, әммә күренеп ҡалһалар, ҡасмайҙар, хатта ҡулға алып ҡарарға була. 4 аҙналыҡ бәпкәләр оса башлай. Әгәр ҙә ниндәйҙер сәбәп менән тәүге һалған йомортҡалары һәләк булһа, тәтелдәүес яңынан йомортҡа һалып баҫып сығара.

Июль аҙағында - август башында 2-3 тиҫтә ҡош бергә туплана башлай. Ошо уҡ ваҡытта йылы яҡҡа оса. Максималь билдәле йәше - 17 йәш.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов, "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан. (Дауамы бар).**

*КӨН ТЕМАҺЫ*

# ИЛ ЙОЛАҺЫНА...

## хан да буйһона

**(Башы 3-сө биттә).**

### Телдәр белгән - ил гиҙгән

Мигранттарға ҡағылышлы күп һанлы проблемалар араһында урындағы халыҡ телен белеү иң мөһимелер ҙә, бәлки, сөнки үҙең күҙ терәп барған ил телендә һөйләшә белмәйенсә, урындағы ойошмалар, кешеләр менән аңлашмайынса, аралашмайынса, нисек йәшәмәк кәрәк? Дмитрий Медведев миграция буйынса кәңәшмәлә әйтеп китеүенсә, Рәсәй мәктәптәрендә... 200 мең мигрант балаһы "уҡый", 40 проценттан ашыуы рус телен бик насар белә. Ә был,тәбиғи, уларҙың дөйөм белем программаһына эйә булыу мөмкинлегенә кәртә булып тора. Былтырғы рәсми мәғлүмәттәр буйынса яҡындағы сит илдәрҙән килеүсе мигранттарҙың 36 проценты ғына урта мәктәп бөткән, ә махсус һөнәри белемдәре юҡ; ни бары 16 проценты профтехучилище тамамлаған, ә ситтән килеүселәрҙең 24 процентының документтарында белем кимәле хаҡында бер ниндәй мәғлүмәт тә юҡ. Рәсми статистика буйынса Рәсәй мәктәптәре уҡытыусыларының 53 проценты мигранттарҙың балалары русса бер ауыҙ һүҙ белмәүенә зарлана. Ниһайәт, былтыр 11 декабрҙә Дәүләт Думаһы рус телен белмәгән мигрант балаларын Рәсәй мәктәптәренә алыуҙы тыйыу тураһында закон ҡабул итте. 19 декабрҙәге тура бәйләнештә был закон РФ Президенты Владимир Путин тарафынан да хупланды. Шул уҡ ваҡытта ул Үҙәк Азия илдәренең үҙҙәрендә рус теле мәктәптәре һәм курстарын асыу буйынса эшләү кәрәклеген билдәләне. Әлеге закон нигеҙендә сит ил балалары дәүләт һәм муниципаль дөйөм белем биреү ойошмаларында рус теленән бушлай имтихандарҙы уңышлы тапшырған хәлдә генә Рәсәй мәктәбенә уҡырға инә ала. 2025 йылдың 1 апреленән уларҙың рус теленән белемен тикшереү буйынса тест башлана. Шул уҡ ваҡытта мигрант балаларына рус телен өйрәтеү буйынса Рәсәйҙә лә бушлай курстар ойоштороу мөмкинлеге ҡарала.

Ләкин рус теле буйынса ошо ҡарарға ризаһыҙлыҡ белдереүсе мигранттарҙың да барлығы асыҡланды. Ә бындай белемһеҙ, һөнәрһеҙ, бер ниндәй квалификацияһы булмаған, өҫтәүенә, күп балалы ғаиләләрен күсереп алып килгән мигранттар армияһы менән Рәсәй ни эшләргә тейеш һуң? Улар ил иҡтисадына, хоҡуҡ һаҡлау һәм социаль өлкәгә көсөргәнеш тыуҙырыуҙан башҡа, бер ниндәй файҙа килтермәнә лә, адвокат Краснов әйтмешләй, ситтәр өсөн беҙҙең "гуманлы һәм йомарт" дәүләт тарафынан мәғариф, медицина хеҙмәтләндереүе менән файҙаланып, социаль түләүҙәр алып йәшәп яталар.

Ә инде улар тарафынан ҡылынған енәйәттәр хаҡында күпме генә яҙылмаһын! Башҡортостан эске эштәр министры Александр Прядко белдереүенсә, беҙҙең республика күләмендә генә лә мигранттар йәшәгән һәм эшләгән объекттар буйынса рейдтар ваҡытында 8 меңдән ашыу хоҡуҡ боҙоу теркәлгән. Былтыр йыл башынан алып республиканан 1454 сит ил кешеһе, шуларҙың 1239-ҙы мәжбүри рәүештә ҡыуылған. Рәсәй Федерацияһы буйынса һандар тағы ла ҡот осмалыраҡ. РФ Тәфтиш Комитеты мәғлүмәттәренә ҡарағанда, быйыл 8 ай эсендә генә илдә мигранттар тарафынан 26 мең енәйәт ҡылынған. Йәғни, Рәсәйҙә законһыҙ йәшәүсе сит кешеләр тарафынан ҡылынған енәйәттәр һаны өс тапҡырға артҡан! Әле ошо көндәрҙә генә Яңы Мәскәү биҫтәһендә (Мәскәү ҡалаһы яны) 40 мигрант өс үсмерҙе туҡмаған, Рәсәй Тәфтиш комитеты уларға ҡарата енәйәт эше ҡуҙғатты, тип хәбәр итә Эске эштәр министрлығы.




### Тыйыуҙар һәм контроль көсәйтелә

Һуңғы ваҡыт шуның өсөн дә Рәсәй граждандары араһында мигранттарҙың хоҡуҡ һәм әхлаҡ нормаларына һыйғыһыҙ ҡылыҡтары менән ризаһыҙлыҡтар артты, уларҙың закондарҙы һанламай, үҙҙәрен иркен тотоуына ҡаршы һәм илдә мигрант сығып китеүҙәрен талап иткән сығыштар айырыуса ҡырҡа һәм сәйәси төҫ алды. Ошо йәһәттән былтыр августа Дәүләт Думаһының бер төркөм депутаттары мигранттарға үҙҙәре менән ғаиләләрен алып килеүҙәрен тыйыу тураһында закон проектын ҡарауға индергәйне. Башҡортостан парламентарийҙары ла был мәсьәләгә битараф түгел. Мәҫәлән, республика депутаттарының Рәсәйгә мигранттар индереү ҡағиҙәләрен ҡәтғиләштереү буйынса закон проекты шулай уҡ Дәүләт Думаһында ята, ул быйыл яҙғы сессияла ғына ҡараласаҡ.

Күреүебеҙсә, көнүҙәк мәсьәләләр буйынса закондар сығарыу беҙҙә бик яй хәл ителә, үкенескә. Федерация Советы, ниһайәт, легаль булмаған миграция менән көрәшкә йүнәлтелгән закондар йыйылмаһын хупланы шулай ҙа. Эксперттар был закондарға әллә ни өмөт бағламаһа ла, унда аҡҡа ҡара менән ситтән килеүселәрҙән рус теле буйынса имтихандар алыу фәҡәт дәүләт учреждениелары на ғына рөхсәт ителә, тип яҙылған. Яңылыҡтарҙан тағы ла шул иғтибарға лайыҡ: киләһе йылдан Мәскәү аэропорттарында бөтөн ситтән килеүселәр өсөн дә биометрик контроль системаһын индереү, йәғни хәҙер визаһыҙ илдәрҙән килеүсе граждандарҙы Рәсәйгә килеп ингәс тә фотоға төшөрөү һәм бармаҡ эҙҙәрен алыу ҡарала. Мәскәүҙә шулай уҡ мигранттарға электрон паспорттар бирергә йыйыналар.

Бер һүҙ менән әйткәндә, бөтөн был саралар сит ил граждандарының берҙәм реестрын булдырырға ярҙам итәсәк. 7 ноябрҙән шулай уҡ уларҙан геном теркәүе өсөн биоматериал алынасаҡ. Мигранттар өсөн берҙәм цифрлы һәм геномлы мәғлүмәттәр базаһын булдырыу улар менән эште күпкә еңеләйтәсәк, ти белгестәр. 2025 йылдан, өҫтәүенә, хоҡуҡ боҙған мигранттарҙы илдән ҡыуыу буйынса махсус режим ғәмәлгә индерелә. Ундайҙарға Рәсәйҙә күсемһеҙ милек һатып алыу, кредит алыу һәм хатта автомобиль йөрөтөүгә тиклем тыйыу һалынасаҡ. Илдә законһыҙ миграция ойоштороу айырыуса ауыр енәйәт иҫәбенә индерелеп, ғәйепләнеүсене 8-15 йылға тиклем иркенән мәхрүм итеү һәм 3-5 миллионғаса штраф һалыу ҡарала. Әйткәндәй, легаль булмаған миграция ойошторған өсөн енәйәт яуаплылығы ҡаралған законға былтыр 9 ноябрҙә Владимир Путин ҡул ҡуйҙы. Унда шулай уҡ сит ил граждандарын законһыҙ рәүештә теркәгән һәм иҫәпкә ҡуйғандарҙы 5 йылға тиклем иркенән мәхрүм итеү кеүек яза сараһы ҡарала. Илдә законһыҙ йәшәгән мигрант тарафынан ҡылынған енәйәт яза сараһын уғата ауырлаштырасаҡ. Рәсәй Эске эштәр министрлығы 2025 йылдан визаһыҙ килгән сит ил граждандарына беҙҙең илдә булыуҙы 90 көнгә тиклем сикләне.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлбиттә, миграция сәйәсәтен ҡәтғиләштереү кәрәк ине, сөнки был илдә хәүефһеҙлек тәьмин итеүгә һәм тотороҡлолоҡҡа булышлыҡ итәсәк. Мигранттарҙың терроризм акттарына йәлеп ителеүе, улар арҡаһында енәйәттәр ҡылыныуы, милләт-ара һәм социаль конфликттарҙың тыуып тороуы бөтәбеҙгә лә яҡшы мәғлүм. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер эксперттар, мәҫәлән, HAN цифрлы компанияның генераль директоры Леонид Бацев һәм башҡа ҡайһы бер чиновниктар фаразлауынса, миграцияны сикләү саралары, ахыр сиктә, илдә етди иҡтисади һәм социаль проблемаларға килтереүе ихтимал. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та: мигранттар менән - проблемалар, уларһыҙ - тағы проблемалар... Бацев билдәләүенсә, илебеҙҙә эшсе көстәр ҡытлығы күҙәтелә. Был айырыуса төҙөлөш, ауыл хужалығы, хеҙмәттәр күрһәтеү тармаҡтарына хас. Мәҫәлән, төҙөлөштә 200 меңләп, ауыл хужалығында 80 меңләп эшсе ҡул етешмәй. Сәйәсмән Илья Марголин иһә был проблеманы хәл итеүҙе урындағы халыҡ иҫәбенә һәм эш барышын автоматлаштырып, ҡул хеҙмәтен яңы технологиялар менән алмаштырыу юлында күрә. Беҙ үҙ проблемаларыбыҙҙы үҙебеҙ хәл итергә тейешбеҙ. Тура бәйләнеш мәлендә был хаҡта РФ Президенты Владимир Путин да тап шулай тигәйне: илдә мигранттар һанын кәметеү өсөн беҙгә хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәрергә һәм юғары технологиялар менән эш итергә кәрәк.**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*✓ Минең фаразым буйынса, беҙҙең милләттең атамаһы төрки яңғырашҡа тиклем "башгурд" булғандыр. Фарсы телендә "бача" бала, тоҡом тигәнде аңлатһа, "гурд" баһадир, тип тәржемә ителә.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Граф В.А. Перовский**

**(1833-1842 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған).**

Был көндә бер ҙур ҡыйынлыҡ та була: мосолмандарҙа ураҙа айы бара, ҡояш байығас ҡына ашарға рөхсәт ителә, ә байрам эффектлыраҡ булһын өсөн мәжлесте алдараҡ, яҡты саҡта башларға кәрәк бит инде. Ҡунаҡтарҙы бер нисә рәткә ултырталар, һыйыр, ҡуй һәм ат итенән әҙерләнгән аштар ҡуйыла, әммә мәжлесте башлау хаҡында ымишара булмайынса, ризыҡҡа ҡағылыу ҡәтғи тыйыла.

Мәжлесте алып барыу татар телендә яҡшы һөйләшкән есаул Иван Иванович Филатовҡа тапшырыла. Нығыраҡ тәьҫирле булһын өсөн ул, һыбай көйөнсә, нагайкаһын әҙер тотоп, аҙыҡ ҡуйылған рәттәр араһынан йөрөй, бында башҡорт чиновниктары ултырыуына ҡарамайынса, әгәр кемдер аҙыҡҡа үрелә ҡалһа, ҡамсыһын эшкә егергә әҙер икәнен күрһәтә. Кантон начальниктары ашарға ултырмай.

Барыһы ла имен-аман тамамлана һәм ҡунаҡтар өйҙәренә таралыша, әммә барыбер ҙур булмаған скандал килеп сыға: Имәнғол ауылында аттарҙы еккән саҡта Өфө ҡазыйҙары арбанан төшмәй ултыра, ни сәбәптәндер, аттар ныҡ сабып сығып китә, нимәгәлер барып эләгеп, арба ауҙарыла; ҡазыйҙар арбанан ергә ҡолағанда уларҙың тубыҡтарындағы Ырымбурҙа алынған араҡылы штоф ватыла; йығылған кешеләрҙе торғоҙалар, быяла һауыт ватыҡтарын ошо ауыл башҡорттарының күҙ алдында йыйып алалар, улары төкөрөнә һәм үҙҙәренең остаздары итеп һаналған ҡазыйҙарҙы һүгә, ярай әле улар башҡорттарҙан түгел, татарҙар, тип үҙ-үҙҙәрен йыуаталар.

Ырымбурҙан 65 саҡрым ерҙә, Урал йылғаһы аръяғында, ҡырғыҙ далаһында киң билдәле тоҙ байлыҡтары - Илек тоҙ яҡтылыҡтары урынлашҡан, улар ҡаҙна милеген тәшкил итә. Тарихи өлөшөнә ҡағылып тормайынса, промысланың үҙе хаҡында күп һөйләргә була.

Ҡаҙна милеге булараҡ, Илек тоҙо кеше хеҙмәте менән соҡоп сығарыла; быны өсөн судтар тарафынан ошондай ҡаты язаға тарттырылған каторжандар һәм һөргөнгә ебәрелгәндәр файҙаланыла. Үҙенсәлектәре буйынса тау эштәренә тиңләнгәс, промысла финанс министрлығының тау һәм тоҙ эштәре департаменты ҡарамағында булһа ла, уның менән эш итеү урындағы граждандар чиновниктары ҡулында була, улар Илек Тоҙ Идаралығы тип аталған айырым учреждениела хеҙмәт итә, уныһы идарасынан, 2 кәңәшсенән һәм бер нисә канцелярия чиновниктарынан тора.

Ике мең саҡрымдағы Петербургтан бойороҡтар ебәреп торған етәкселегенән бик алыҫта булып, бөтөнләйе менән ниндәй ҙә булһа бойондороҡлолоҡтан сыҡҡан һәм хатта урындағы губернаторҙарҙың күсһөҙ, өҫтән-мөҫтән генә күҙәтеүенән ситтә ҡалған ошо идаралыҡ үҙен эре ҡаҙна талаусы итеп таныта. Тоҙ йөҙәрләгән мең ботлап сығарыла һәм унан йөҙәрләгән мең һум килем алына; 40-сы йылдарҙың урталарына тиклем ҡаҙнаға 180 - 200 мең һумдан да артыҡ аҡса килмәй, ҡалған сумма чиновниктарҙың кеҫәләрендә ҡала, улар ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында үҙҙәренә бик ҙур капиталдар туплай.

Бындай мөмкинлектәр менән бөтөнөһө лә, идарасынан башлап тоҙ соҡорондағы күҙәтеүселәргә тиклем файҙалана. Шунда уҡ Ырымбур казначействоһына аҡсаларҙы теүәл ебәреп тороуҙы күҙәтеүсе ҡаҙна палатаһы чиновнигы ла була. Барыһы ла урлаша, быны бөтәһе лә белә, әммә бер кем дә ошо законһыҙ ғәмәлдәр тураһында яҙмай, сөнки быны эшләү бушҡа ғына һәм файҙаһыҙ тип һанайҙар.

1839 йылда урлашыу шундай кимәлгә барып етә, хатта чиновниктар үҙҙәре лә быны насар тамамланыуы мөмкин икәнен күрә. Әйтергә кәрәк, чиновниктар, йәй айҙарында тоҙ ташыу ҡиммәт булыуы арҡаһында ситкә тоҙ аҙ ебәрелеү сәбәпле, үҙҙәренең өлөшөн күбеһенсә кешеләрҙе һәм йөк ташыусы аттарҙы иркен файҙаланып булған ҡыш айҙарында ала. 1839 йыл йот килә: бесән һәм ашлыҡ ныҡ ҡиммәтләнә, йөк ташыусылар тоҙҙо түбән хаҡҡа ташыуҙан бер ниндәй ҙә фәтүә күрмәй, сауҙәгәрҙәр ҙә тоҙ ташыу хаҡын күтәреүҙе өнәмәй; күп итеп әҙерләнгән тоҙ запасҡа ҡалыр ине, ә яңы уңыш ҙурыраҡ булған хәлдә, барса нәмәгә лә хаҡтар төшкәнлектән, тоҙ һатыу ташыу хаҡы түбән булғанда ла килемһеҙ ҡаласаҡ.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

*ТАРИХИ ФАРАЗДАР*

# "БАШҠОРТ" АТАМАҺЫ ҠАЙҘАН?

**XX быуат башында Сергей Иванович Руденко башҡорттар араһында ғилми тикшеренеүҙәр үткәреп йөрөгән. Шул ваҡыттан ул төшөргән бик күп фотоһүрәттәр һаҡланып ҡалған. Ғилми күҙәтеүҙәрендә ғалим башҡорттар араһында төрлө антропологик типтарҙы билдәләп үтә һәм был типтарҙы ул фотолар ярҙамында дәлилләй.**

Шул фотоларҙы ҡарап, ул саҡтағы башҡорттарҙың бөгөнгөләре менән антропологик яҡтан айырылмауы асыҡ беленә. Айырма шунда ғына: йөҙ йыл элек йәшәгән башҡорттар кәүҙәгә бик ҙур, физик яҡтан һау һәм ғәйрәтле булған. Боронғо һөйәктәрҙе өйрәнеү ҙә ошоно раҫлай. Бындай айырмалыҡтарҙың төп сәбәбе, әлбиттә, бар кешелек үҫешенә хас булғанса, боронғо башҡорттарҙың тәбиғәткә яҡын тороуында, экологик яҡтан таҙа тәбиғәт шарттарында үҫеп, меңәр йылдар буйы күнегелгән сифатлы милли ризыҡ менән туҡланыуында.

Сарматтар, савроматтар дәүерендә Дәүҙәр (беҙҙеңсә - алпамышалар) ырыуы йәшәгән. Дәүҙәр, йәғни Дағтар күбеһенсә хәҙерге Төркмәнстанда, Арал диңгеҙе буйында һәм көньяҡ Уралда көн күргән. Уларҙың йылғаһы Яйыҡ (Дәү-ыҡ) булған. Дәүҙәр антропологик яҡтан башҡорттар кеүек каспий, понтик тибына ҡараған. Һәр бер халыҡтың боронғолоғон понтик тибы күрһәтә. Минең фаразым буйынса, беҙҙең милләттең атамаһы төрки яңғырашҡа тиклем "башгурд" булғандыр. Фарсы телендә "бача" бала, тоҡом тигәнде аңлатһа, "гурд" баһадир, тип тәржемә ителә. Әгәр ошо ике атаманы ҡушып әйтһәк, "башгурд" "баһадирҙар тоҡомо" тигән төшөнсәне аңлата булып сыға. Башҡорт - баһадирҙар тоҡомо булғас, тимәк, улар Дәүҙәр тоҡомо ла. Дәүҙәрҙе Дағтар-Дактар тип тә атағандар, тинек. Шулай булғас, "иштәк" атамаһы беҙҙең милләттең боронғо атамаһы булып сыға. "Иштәк", тимәк, "Дағтарға иш" йәғни Дәүҙәрҙең, Дағтарҙың тоҡомо. Тимәк, бер үк боронғо дәүерҙә (сарматтар замандары) башҡорттарҙың бер йөкмәткеле ике атамаһы "иштәк" менән "башгурд" төрки дәүергә тиклем бергә йөрөгән.

**Тарихсы-антрополог Ринат ЙОСОПОВтан.**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Берлин стратегик һөжүм итеү операцияһында

Бранденбург - Германияның боронғо ҡалаһы. Шуға ҡарамаҫтан, унда 70 меңдән артыҡ кеше йәшәй, машиналар һәм суднолар төҙөү һәм текстиль сәнәғәте ныҡ үҫешкән була. Һуғыш йылдарында бында самолеттар һәм танкылар күпләп етештерелә. Ҡала янында ҙур аэродром урынлашҡан. Ҡала аша Германияның көнбайыш яғына илтә торған мөһим юлдар үтә. Шуға күрә Бранденбургты алыу ҙур әһәмиәткә эйә була: Был Берлинға көнбайыштан яңы көстәр килтереү юлын ябыр ине.

Дивизия командиры 58-се гв. атлы полкының ике эскадронын танкыларға десант итеп ултыртырға ҡарар итә. Боеприпастарын тулыландырып, улар Бранденбургҡа табан ынтыла. Танк батальоны десанты менән Зило-канал аша һалынған күперҙәрҙе биләп, уларҙы дивизияның төп көстәре килеп еткәнсе дошманға бирмәй торорға тейеш була. Әммә күперҙәрҙе алып өлгөрмәйҙәр: 47-се танк бригадаһы батальонын күреп ҡалыу менән, немецтар күперҙәрҙе шартлатып өлгөрә. Әммә танк батальоны үҙенең десанты менән, дошмандың ҡаршылығын еңеп, канал аша сыға һәм башҡа эскадрондарҙың канал аша сығыуына булышлыҡ итә.

Гв. сержанты Жакен Ҡорманов үҙенең отделениеһы менән беренсе булып шартлатылған күпер янында каналға төшә һәм уның икенсе яғына сыға. Яугирҙар дошман траншеяларына гранаталар ырғыта һәм унда бәреп инә. Немецтар контратакаға ташлана, әммә Ҡормановтың отделениеһы траншеяларҙы дошманға кире бирмәй. Ошо алышта отделение командиры ауыр яралана.

58-се гв. атлы полкының гв. өлкән лейтенанты Н. Н. Корсун командалыҡ иткән эскадроны, ҡыйыу рәүештә дошман окоптарына бәреп инеп, иң ситтәге өйҙәрҙә ҡаршылыҡ күрһәткән немецтарға һөжүм итә. Яугирҙар, танк утына ышыҡланып, немецтарҙың өй сарҙаҡтарында урынлаштырылған пулеметтарын юҡ итә. Яуланған плацдармды тотоп тороп, улар башҡа эскадрондарҙың да канал аша имен-аман сығыуына булышлыҡ итә.

Канал аша сығыу ауыр шарттарҙа башҡарыла, сөнки уның ярҙары бейек тимер-бетон стеналарҙан тора. Яугирҙар бер-береһен, бауҙар ҡулланып, каналға төшөрә, каналды күкрәккә тиклем еткән һалҡын һыуҙа кисеп сығырға тура килә. Беҙҙең артиллерия уты немецтарға баш ҡалҡытырға ла ирек бирмәй, шуның менән файҙаланып, яугирҙар ҡул аҫтындағы оҙонораҡ ағас-һағастар, таҡталар ярҙамында икенсе ярға күтәрелә һәм шундуҡ алышҡа инә. Гвардиясылар бик ҙур ауырлыҡ менән немецтарҙы Зило-канал буйындағы траншеяларҙан ҡыҫырыҡлап сығара һәм ҡаланың төньяҡ ҡырыйындағы бер нисә өйҙө ала.

Икенсе көндөң иртәһенән үк немецтар, өс батальонға яҡын көстәре менән бер нисә тапҡыр контратакаға ташланып, беҙҙең яугирҙарҙы каналға кире бәреп төшөрөргә ниәтләй. 60-сы гв. атлы полкының гв. өлкән лейтенанты Л. Г. Суворов командалығындағы 2-се эскадроны ауыр хәлдә ҡала, ул ҙур юғалтыуҙарға дусар була. Бында гв. өлкән сержанты, комсомолец Николай Черненко, станковый пулемет расчеты командиры, ысын ҡаһарманлыҡ өлгөһөн күрһәтә. Немецтар эскадронды ҡыҫырыҡлай башлағас, Черненко үҙебеҙҙекеләрҙән артта, дошман ҡамауында айырылып тороп ҡала. Әлбиттә, немецтар бер яңғыҙы ҡалған совет пулеметсыһын әсиргә алырға йә иһә юҡ итергә теләй. Әммә ҡурҡыу белмәҫ пулеметсы ҡымшанмай ҙа, мәргән атып, дошманды ҡырыуын дауам итә: һөҙөмтәлә ул немецтарҙың 50-нән ашыу һалдат һәм офицерын юҡ итә. Эскадрон яугирҙары, үҙҙәренең пулеметсыһының элеке позицияһынан тороп, бер үҙе генә лә дошманды алға ебәрмәй тороуын күреп, алға ташлана һәм үҙҙәренең элеке рубежын яңынан ала. Күпмелер ваҡыт үтеүгә, немецтар яңы көстәрен килтереп, тағы ла контратакаға күтәрелә. Был ваҡытта пулемет янында Черненко бер үҙе генә тороп ҡала. Уның мәргән уты аҫтында дошмандың йәнә 50-нән ашыу һалдат һәм офицеры теге донъяға оҙатыла. Әлеге тиңһеҙ алыш 1945 йылдың 27 һәм 28 апрелендә ике көн буйына бара. СССР Юғары Советы Президиумының 1945 йылдың 31 майындағы ҡарары менән дошман менән батырҙарса алышҡан Черненко Николай Власович Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була. Н.В. Черненко Ҡаҙаҡ ССР-ның Урал өлкәһендә тыуа, милләте буйынса украин, армияға Ырымбур өлкәһенән саҡырылған. Ул ошо алышта ауыр яралана. Һуғыштан һуң комсомол һәм партия органдарында эшләй.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Йәш драматургтар юҡлығын бөгөнгө йәштәрҙе аҡса менән генә ылыҡтырып бөтөрөп булалыр, тип уйлайым. Мәҫәлән, IT-белгестәргә шундай мөмкинлектәр булдырылғас, улар һаны күпләп арта бара.***

# ЯҘҒАНЫҢДЫҢ фәһемле

**Айбулат - Башҡортостан юлдаш радиоһындағы "Теге өсәү"ҙең береһе. Телевидение, радио эфиры кешеләрҙе тиҙ популярлаштыра. Шуға беҙ уны тауышы, йәнле башҡорт һөйләше, радиотапшырыуҙары аша бик яҡшы беләбеҙ, әммә респондентымдың күптәргә артыҡ уҡ билдәле булмаған бөтөнләй икенсе сифаттары, тормошҡа, бөгөнгө йәштәргә хас булмаған, үҙенсәлекле ҡараштары бар. Айбулат СӘСӘНБАЕВҡа, Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы булыуға ҡарамаҫтан, әлегә яҙыусы, драматург, сценарийҙар яҙыусы мөһөрөн артыҡ ҡуша һалып бармайҙар, иҗадын күп яҙыусылар кеүек шиғри китаптан башлауын да белеп етмәйҙәр шикелле. Күрәһең, популяр булыу менән уҡымлы булыу икеһе ике төрлө бер-береһенә бөтөнләй ҡағылышы булмаған төшөнсәләрҙер. Беҙ Айбулат менән Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрында уның пьесаһы буйынса Зиннур Сөләймәнов ҡуйған "Беҙҙең байлыҡ" спектакленең премьераһында осраштыҡ. Һүҙ сәсән тамырлы йәш яҙыусыға.**

## Тәүге пьесалар

Тәүге пьесамды студент саҡта уҡ мәктәп программаһы буйынса үтелгән классик әҫәрҙәргә оҡшатып яҙып маташтым. Әмин батыр тураһында ине ул тәүге драма әҫәрем. Тәңҡитсе булараҡ, ни әйтер, тип, яҙғанымды уҡытыусым Зәки Әлибаевҡа уҡырға бирҙем. Ул мине театр тормошон яҡшы белгән Зиннур Сөләймәнов менән таныштырҙы. Пьесамды ҡарап сыҡҡас, билдәле режиссер Стәрлетамаҡ ҡалаһында үтәсәк өс көнлөк драматургтар семинарына саҡырҙы. Шунда мин пьеса яҙыу өсөн иң башта төп фекер кәрәк икәнлеген аңланым. Ул фекер күңелдә өйкәгән, ныҡ борсоған проблемаға ҡағылышлы булырға тейеш.

Беҙгә бер һөйләм менән буласаҡ пьесаларыбыҙҙың төп фекерен яҙырға ҡуштылар. Тыуған ерҙе һаҡлау, атай нигеҙен ҡоротмау проблемаһы мине күптән борсой ине. Матди яҡтан бай булып йәшәү яҡшымы, әллә рухи байлыҡ мөһимерәкме, тигән һорауҙы ла үҙемә йыш бирә инем. Ошо мәсьәләне күтәргем килде. Уны ниндәйҙер драма, йә трагедия итеп түгел, ә көлкөлә, әммә етди төшөнсәләр тураһында уйландырғандай итеп яҙырға тигән ниәт тыуҙы. Маҡсат булғас, тарҡау уйҙарым ипкә килде, персонаждар төҫмәрләнде, сюжет ҡоролдо, ваҡиғалар үсешеп китте.

Семинарҙа ҡатнашҡандар пьесаларыбыҙҙы ҡыҫҡа ваҡыт эсендә яҙып бөтөп, бер-береһебеҙгә уҡып ишеттерҙек. Зиннур ағай пьесамды оҡшатты, әммә әлегә ниҙер етмәй, сәхнәгә әҙер түгел, тигән фекерен әйтте, һәм яңы бешкән сәхнә әҫәрем 3-4 йылға онотолоп торҙо. Һуңынан бер осрашҡанда Зиннур ағай пьесаны тағы бер ҡарап сығып, урынеренә еткерәйек, тине. Шулай итеп сәхнәгә сыҡҡандай кимәлдәге пьеса барлыҡҡа килде.



## Быуа быуырлыҡ

Драматургтар семинарҙары бик файҙалы һәм һис шикһеҙ кәрәк сара, тип уйлайым. Сөнки улар йәш драматургтарға юл яра. Мәҫәлән, Баныу Ҡаһарманованың Стәрлетамаҡтағы семинарҙа яҙылған "Шахтер"ын да Сибай драма театры ҡуйҙы. Ике йыл элек Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында Башҡортостандың Драматургия һәм режиссура үҙәге менән берлектә "Замандаш" тип аталған республика заманса драматургия семинары ойошторолдо. Шул семинарҙа ла "Супер Булат" тигән пьеса яҙып ҡатнаштым.

Йәш драматургтар юҡлығын бөгөнгө йәштәрҙе аҡса менән генә ылыҡтырып бөтөрөп булалыр, тип уйлайым. Мәҫәлән, IT-белгестәргә шундай мөмкинлектәр булдырылғас, улар һаны күпләп арта бара. Әгәр иҗади өлкәгә лә шундай иғтибар булһа, әҙәбиәттә йәштәр быуа быуырлыҡ булыр ине.

## Күләмдән - кимәлгә

Шиғырҙарҙы бала саҡтан яҙа башланым. Әле уҡый белмәгәндә үк Рәшит Назаровтың "Йөрәк" шиғырын яттан һөйләй торғайным - атайымдың ҡысҡырып ятлап йөрөгәнен тыңлап, уға эйәреп ятлағанмын. Шулай шиғыр яҙыу менән мауығып киттем. Мәктәп йылдарында әҙәбиәт дәрестәрендә инша урынына шиғыр яҙып ҡотола торғайным. Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә "Йәштәр тауышы" серияһында "Күләүектәге болоттар" исемле тәүге китабым баҫылды. Ҡайһы бер уйҙарымды шиғыр күләменә һыйҙыра алмағас, хикәйә итеп яҙа башланым, аҙаҡ яйлап повестарға күстем. Әле һаман үҫешәм, иҗад итәм.

## Сценарийҙар

"Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһында эшләй башлағас, "Башҡорт йыры" концерты өсөн сценарий яҙырға ҡуштылар. Эфир өсөн яҙғаным бар ине, ә бында концерт өсөн булғас, башта баҙап ҡалдым. Шиғырҙар, хикәйәләр яҙғас, булдыраһың, тинеләр. Ҡалайтаһың, яҙҙым инде, һәм ул сәхнәгә ҡуйылды. Шунан "Башҡортостан" дәүләт концерт залында үткән тамашаларҙың күбеһе өсөн сценарийҙар яҙа башланым. Өфө ҡалаһының 450 йыллығына арналған тамашаларҙың береһендә лә минең өлөшөм бар, ғөмүмән, хәҙер сценарийҙар яҙыу менән күберәк шөғөлләнәм, тиһәң дә була.

## Иҗад һәм яңы технологиялар

Мин компьютер заманы балаһы, шуға уйҙарымды ноутбукта йә телефонда яҙам, ҡул менән яҙғанда ҡай саҡ үҙемдең почеркымды таный алмайым хатта. Интернет ярҙамын ныҡ тоям. Мәҫәлән, сценарийҙар яҙғанда темаға ҡағылышлы цитаталар табһам, аҡыллы фекерҙәрҙе башҡортсаға тәржемәләйем. Бөгөн бер нисә көндә бөтөнләй хәбәрҙар булмаған өлкәлә белгескә әйләнергә була. "2021: диван, себен, Венер" тигән повесымдың төп геройы - ветеринар. Һөнәрем буйынса филология факультетын бөтөргәс, мин был өлкәне бөтөнләй белмәйем, мал тотоп тәрбиәләгән кеше лә түгелмен. Ярай, кәләшем ветеринар, белмәгәнде унан һораштым, ҡалғанын интернеттан өйрәндем, кәрәкле терминдарҙы төп геройҙың телмәренә индереп яҙҙым, һәм повесть тыуҙы.

## Ҡәнәғәтлек тойғоһо

Иҗад миңә тик ҡәнәғәтлек тойғоһо килтерә, һәр ваҡыт ниндәйҙер проект, сценарий, йә күләмле проза әҫәре менән янып йөрөйөм. Береһен бөтһәм, икенсеһенә тотонам, буш торған ваҡытта нимә эшләргә белмәй аптырап ҡалам хатта. Башҡалар нисек көн үткәрә икән, тип аптырап ҡуям ҡай саҡ. Яҙыу ваҡыты төнөн булһа, шәберәк, әлбиттә, тик әлегә ундай мөмкинлек һәр саҡ тәтемәй, сөнки көн һайын иртәнге эфирҙа эшләгәс, таңғы биштә торам, шуға иртәрәк йоҡларға ятырға кәрәк. Эфирҙан һуң киләһе көнгә сценарий яҙғас, рубрикаларымды, тапшырыуҙарымды барлап, дүрт-биштәрҙә генә бушайым, шунан өйгә ҡайтмай кабинетта үҙемдең иҗад менән шөғөлләнәм. Уҡығанда ла бер генә китап уҡымайым, береһен башлайым да, ҡайһылыр ерендә ҡалдырып торам, икенсеһенә тотонам. Шулайтып, ҡай саҡ ике-өсәүҙе бер ваҡытта уҡыйым. Яҙғанда ла шулай уҡ бер нәмәне яҙа башлайым да, стенаға бәрелгән һымаҡ туҡтаһам, көрсөккә эләкһәм, икенсе нәмәгә тотонам. Баш әҙәрәк ял итһә, яңы уйҙар тыуа ла, береһенә кире ҡайтыуы еңелерәк була.

## Пьесалар

"Әмин батыр"ҙан башлап һанағанда, дүрт пьесам бар. "Беҙҙең байлыҡ"ты Сибай театры сәхнәләштерҙе. Буллинг, йәғни бөгөнгө йәштәр араһында йәйелә барған агрессив үсекләшеү тураһында "Пифпаф" тигән пьеса яҙҙым. Сюжет буйынса йәберләнгән егет атаһының мылтығын тотоп, мәктәпкә килә. Яңылыҡтарҙа бындай ваҡиғалар йыш ишетелеп тора. Буллингты туҡтатырға буламы, кем ғәйепле, кеүек һорауҙарға яуап эҙләргә тырыштым. 2022 йылда радио һәм тыңлаусылар мөнәсәбәте тураһында яҙған "Буран ФМ" тигән пьесамды "Юлдаш" коллективы менән сәхнәләштереп, Әбйәлил районы Күсем ауылында күрһәттек, аҙаҡ БСТ каналы уны фильм итеп тә төшөрҙө. Сәхнәгә Зилә Лира сығарҙы, телефильм режиссеры Фрәнгизә Илбәкова булды. Коллегаларыма ҙур рәхмәтлемен, улар һәр башланғысты хуплап, уңыштарым өсөн үҙемдән дә нығыраҡ ҡыуаналар. Шундай дәртләндереүселәр булғанда тағы иҗад итке килә.

## Көнүҙәк проблема

Ошо тормошта үҙ урыныңды табыу проблемаһы борсой мине. Ветеринар тураһындағы повесым да, "Супер Булат" та шул турала. Совет замана кешеләре тураһындағы әҫәрҙәрҙе уҡығанда, йә өлкән быуын кешеләре менән һөйләшкәндә, улар "Беҙ уҡып һөнәр алдыҡ, йүнәлтмә буйынса эш, ятаҡ бирҙеләр, барыһы менән дә тәьмин иттеләр", тиҙәр. Уларҙың күбеһе һаман да һөнәре буйынса эшләйҙәр, йүнәлтмә буйынса барған ҡалала, йә ауылда төпләнгәндәр. Бөгөнгө заманда улай түгел. Мәҫәлән, һабаҡташтарымдың күбеһе һөнәре буйынса эшләмәй. Был хәл эш урындары юҡлыҡтан түгел бит. Мәҫәлән, уҡытыусылар һәр ерҙә лә кәрәк. Был тормошта кем булырыңды алдан белмәүҙең касафатылыр, тип уйлайым. Шуға был проблеманы хәл итеү көнүҙәк булырға тейеш.

***Өлкән быуын кешеләре менән һөйләшкәндә, улар "Беҙ уҡып һөнәр алдыҡ, йүнәлтмә буйынса эш, ятаҡ бирҙеләр, барыһы менән дә тәьмин иттеләр", тиҙәр. Уларҙың күбеһе һаман да һөнәре буйынса эшләйҙәр, йүнәлтмә буйынса барған ҡалала, йә ауылда төпләнгәндәр. Бөгөнгө заманда улай түгел. Мәҫәлән, һабаҡташтарымдың күбеһе һөнәре буйынса эшләмәй. Был хәл эш урындары юҡлыҡтан түгел бит. Мәҫәлән, уҡытыусылар һәр ерҙә лә кәрәк. Был тормошта кем булырыңды алдан белмәүҙең касафатылыр, тип уйлайым.***

## Ауыл һәм ҡала

Күп геройҙарым, үҙем кеүек, ҡалала йәшәй. Ә пьесалағылары - ауыл кешеләре. Бәләкәй саҡта ауыл кешеләрен һүрәтләгән спектаклдәргә йыш йөрөнөм, шуға сәхнәлә мотлаҡ ауыл кешеләре булырға тейеш, тигән уй ҡанға һеңеп ҡалған микән? Әлегә ошо стереотиптан ары китеүе ҡыйыныраҡ. Беҙҙең әҙәбиәттә әлегә

***✓ Ижадты байыу сығанағы тип уйларға ярамай. Элек гәзит-журналдарға баҫтырған өсөн гонорарҙар елле булған, тиҙәр, әле бер-ике йөҙ һум килеп төшһә, был хәтлем табыш ҡайҙан килде икән, тип аптырайһың.***

ҡала прозаһы ла үҫешмәгән бит. Әммә ҡала уҡыусыһы булһа, ҡала прозаһы ла булыр, тип уйлайым.

### Төп шөғөл

Яҙышыу бөләкәйҙән килгән мауығыуым булғас, уны тормошомдоң төп шөғөлө тип ҡабул итәм. Бәлки, яҙыусылыҡ йөшәү рәүешемдер ҙә. Радиола эшләү - килемле эш урыны ғына. Ҡыҙыҡ, әммә мин уҡып бөтөүемә ныҡ ҡыуандым, сөнки төрлө курс эштәре менән булышмай, ихласлап, рәхәтләнеп, ижад менән шөғөлләнеү мөмкинлеге тыуҙы. Әлбиттә, университетта ла, "Тулҡын" әҙәби берекмәһе ағзаһы булараҡ, ижад өсөн мөмкинлектәр бар ине, әҙәби-ижад гәзиттәре лә сығара торғайныҡ. Шул берекмәлә гәзит-журналдарға мәҡәләләр яҙырға өйрәндем. Әҙәби төркөмдө беҙҙән ике курсҡа өлкән Денис Ғилманов етәкләй торғайны. Уға киләм менән ҡатнаштым, эре проза өлкәһендә өсөнсө урын алып, Республика Башлығы Грантына лайыҡ булдым. Был әҫәрем "Инеш" нәшриәтендә китап булып баҫыласаҡ.

### Ижад байыу сығанағымы?

Гранттар мәсьәләһенә килгәндә, улар һөҙөмтәгә ҡарап бирелергә тейештер, тигән фекерҙәмен. Ижадсы ас булырға тейеш, сөнки туҡ булғанда, нимәләр уҡырға, яҙырға теләк кәмей. Әйҙә, телевизорҙа, интернетта күбәйгән күңел аса торған шоуҙар, программаларҙы ҡара ла ултыр, һине бер нәмә лә борсомаҫ. Ашарға, фатир өсөн ҡуртымға түләргә аҡса кәрәк булған саҡта, теләйһеңме-теләмәйһеңме, ултыраһың да яҙаһың, яҙған һайын яңы фекерҙәр, уйҙар килә. Әлбиттә, ижадты байыу сығанағы тип уйларға ярамай, сөн-

### Әҙәби тел

Мин башҡортса фекерләйем, башҡортса яҙам, аң кергәндән алып русса ла, башҡортса ла белә инем. Башҡортса һөйләшһәм, башҡортса уйлайым, урыҫсаһы ла шул уҡ кимәлдә. Мәктәптә уҡығанда класташтар, дуҫтар менән күберәк русса һөйләшә инек, һуңынан башҡорт филологияһы буйынса уҡый башлағас, башҡортсаға күстем. Хәҙер эштә башҡортса һөйләшәбеҙ, көнкүрештә һирәк ҡулланғас, ҡайһы берҙә русса һүҙҙәрҙе онотоп та ҡуям. Һуңғы йылдарҙа диалекттарға иғтибар бирә башланылар, диктантты ла шулай яҙҙыралар, әҙәби әҫәрҙәрҙә лә улар йыш ҡулланыла башланы. Элек бит әҙәби телдә генә ижад иттеләр, хәҙер һәр яҙыусы үҙ диалектында яҙыуҙы хуп күрә. Был телде байытыуҙың һәм һаҡлауҙың бер ысулылыр, тип уйлайым. Бө-

# ФӘҺЕМЕ...

## булырға тейеш

дә, минә яҙырға өйрәт әле, тим. Хәҙер икмәк сәйнәгесенә бер тондорһам, яҙырһың, ти был. Шунан үҙең ултыраһың да яҙаһың инде, ни эшләйһең, яйлап өйрәнеп киттем.

### Яҙыусы һәм уҡыусы

Яҙыусы йәмғиәттә булған проблемаларҙы күтәреп сыға, ҡайҙалыр тураһын әйтеп, ҡайҙалыр кинәйәләп, халыҡҡа үҙ һүҙен әйтә. Уҡыусы ла бит буштан-буш ваҡыт үткәрер өсөн уҡымай, ниндәйҙер фәһем алырға теләй. Шуға фәһем матур булырға тейеш.

### Грант һәм китап

Аксаков урамындағы билдәле 6-сы ятаҡ Яҙыусылар союзы эргәһендә генә. Шуға беҙ күршеләргә ойошмаға йыш йөрөнөк. Ул осорҙа Союзды Наил Ғәйетбай етәкләй ине. Ҡульяҙмаларыбыҙҙы Рауил Бикбаев, Лариса Абдуллиналар тикшерә торғайны. БДПУ-ның "Тулҡын"ы, БДУның "Шоңҡар"ына йөрөгәндәр, осрашып, фекер алыша инек. Шул ултырыштарҙа тикшерелгән шиғырҙарымдан Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә "Йәштәр тауышы" серияһындағы "Күләүектәге болоттар" шиғри йыйынтығы сыҡты. Әле үҙемдең яҙғандарымды беренселәрҙән булып Мөнир ағай Ҡунафинға уҡырға бирәм. "Патриот бабай" тигән романымдағы төп герой сығышы менән Ғафуриҙыҡы. Шуға күрә уны шул райондан сыҡҡан Әмир Әминевка, Мөнир Ҡунафинға, Салауат Әбүҙәргә уҡырға бирҙем, уларҙың фекерҙәрен ишеттем. Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы ойоштурған "Заман ауазы" конкурсында ошо романым ки, дөрөҫөн әйткәндә, уның менән байып булмай. Элек гәзит-журналдарға баҫтырған өсөн гонорарҙар елле булған, тиҙәр, әле бер-ике йөҙ һум килеп төшһә, был хәтлем табыш ҡайҙан килде икән, тип аптырайһың.

### Хыялдар һәм тормош

Студент саҡта уҡ төп хыялым Яҙыусылар союзы ағзаһы булыу һәм үҙемдең китабымды баҫтырыу ине. Китап булғас, ҡалын булырға тейеш, тип, күләм яғын нығыраҡ ҡайғыртҡанмындыр. Хыялым тормошҡа ашҡас, ашығыуымды аңланым, хәҙер сифат яғына күберәк иғтибар итәм. Бәлки, ысынлап та, йәштәрҙе китап менән ҡыҙыҡһындырып булалыр. Һәр хәлдә, мине ҡыҙыҡһындырып була ине...

### Ижад юлы бормалы

Әле шиғырҙар һирәк яҙыла, кризис хәлендәмен. Элек улар күҙаллауым ысынбарлыҡ менән тап килмәгәндә, катарсис булғанда хистәрем шиғыр булып бәрелөнә торғайны. Йәшәй торғас, барыһына ла күнегеп бөттөм микән, белмәйем, артыҡ бер нәмә лә ғәжәпләндермәй ҙә, ҡыуандырмай ҙа. Шундай осорҙа шиғырҙар яҙылмаһа, ҡыйын булып, нимә эшләргә белмәй, ижадымдағы юлым ошоноң менән туҡтанымы икән, тип аптырайым. Һәм шул саҡта прозаға тотоноп, үҫешә башлауым өмөт уята. Ҡайһыныһы ауыр, прозамы, драматургиямы, әлегә әйтә алмайым. Мәленә ҡарап, әле минә проза яҙыуы еңел, ә шиғыр менән драма ауыр бирелә. Пьеса яҙғанда, киреһенсә, пьеса еңел тойола, ҡалғаны ауыр һымаҡ.

гән иҫәп өсөн көрәш бара. Иҫәп нығынғас, сифат өсөн көрәш башланыр. Йәш яҙыусылар ҙа әҙәбиәтте йәштәр телмәре менән байыта. Тик бына заманса технологиялар төшөнсәләренең башҡортсаға тәржемә ителмәүе, нисек бар, шулай ҡабул ителеүе күңелде өйкәй. Уйлай башлаһаң, берәй 20-30 йылдан телебеҙ рус һәм инглиз телдәренән ингән һүҙҙәрҙән генә тороп ҡалмаҫмы икән? Был ныҡ борсолдора.

### Кино

Драматургияла ғына сикләнмәй, кино өсөн дә сценарийҙар яҙырға хыялым бар. Булат Йософовтоң "Слово земли" тигән проектында киносценарийҙар яҙырға өйрәтәләр, һөҙөмтәлә ҡыҫҡа метражлы фильм төшөрөү ҡаралған. "Китапханасы" тигән ҡыҫҡа метражлы фильм эшләнем ул. Киносценарий өлкәһендә лә белемле булдым, тип, русса бер нисә синопсис яҙып, төрлө конкурстарға ебәреп ҡараным. Кино фонды ярты йыл һайын "Автор" тигән программалар ойоштора. Унда киносценарийҙар ҡабул итеп, 5-6 кешене бер йыл буйына уҡытып, тулы метражға тиклем еткерәләр. Шунда ла ярты йыл һайын ғаризаларымды ебәреп торам. Әлегә ҡабул итмәнеләр. Тимәк, күберәк уҡырға, күберәк яҙырға кәрәк. Ҡыҙыҡһыныу булғас, һуҡмағы табылыр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Үәт, беҙ шәп булдыҡ, хәҙерге йәштәр улай түгел", тигәнерәк фекерҙәр йыш яңғырай бөгөн. Бәлки, киреһенсә, "Үәт, бөгөнгө йәштәр шәп!" тиергә, уларҙы дөрөҫ, адекват баһалай белергә кәрәктер. Һис юғы, улар ҙа, беҙ ҙә шәп, кемдеке - шуныҡы, тиергәләр!**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**яҙып алды.**

УЙЛЫҒА - УЙ



# ЕР КЕШЕҺЕНӘ КҮРҺӘТМӘ

● Әгәр ҙә һинең тик Аллаһы Тәғәләгә генә табыныу ниәтең бар икән, кемгәләр оҡшарға тырышыу мөһим түгел. Аллаһ алдындағы баһаң да еткән. Кешелек сифаттарыңдың үҙең кеүек үк Аллаһ ҡулдарынан маҡталыуын көтмә. Кешеләрҙең нимә уйлағаны һинең өсөн улай уҡ мөһим булырға тейеш түгел...

● Алдауҙан алыҫ тор. Бөгөнгө алдауһыҙ йәшәп булмаған йәмғиәттә ауыҙыңдан сыҡҡан һәр һүҙең тос һәм ҡиммәт булһын. Әйткән һүҙең кешеләрҙә ышаныс тыуҙырһын. Үҙ һүҙеңдең хужаһы бул. Йылан һымаҡ борғоланыу - түбән йәнлеләр эше.

● Иман, Ҡөрьән һәм намыҫ күрһәткән юлдан алға бар. Артҡа боролоп ҡарама, һул һәм уң яғында нимә бар икән тип тикшермә, тура юлдан барыуыңды дауам ит.

● Хаҡлыҡ һәм ғәҙеллек яғында булыу, Аллаһ ярҙамы гел йәнәшәңдә булған йәннәткә аяҡ баҫыу өсөн юлда нықышмалы булыу ҙа етә. Ләкин шуны онотма: был юл - ауыр юл, үҙеңде ҡулыңда баҙлап торған күмер тотоп йөрөгәндәй хис итәсәкһең. Ауырлыҡтар менән көрәшкәндә генә кеше шәхес булып формалаша, эштәре Аллаһ тарафынан баһалана.

● Еңел тормош кешене йоҡлата. Бәйғәмбәрҙәр тарихына күҙ һал әле, кемеһе еңел көн күргән? Йәннәт - арзан түгел, йәһәннәм - алыҫ түгел.

● Ауырлыҡтарҙы сыҙамлыҡ менән генә үтеп сығырға мөмкин. Кешеләр аңламаҫ, һинән мыҫҡыл итеп көлөүселәр ҙә булыр. Уларға асыу тотма. Доға уҡып, дөрөҫлөк уларға ла ҡапҡа асһын, тип һора. Ғорурлығыңды ситтә ҡалдыр. Нәфрәт һәм дошманлыҡ кеүек хистәр һинең өсөн ят булһын, улар сирләтә. Һине кемдер яратмай, тип борсолма, йөрәгеңде Аллаһы Тәғәләгә йүнәлт.

● Үҙеңде башҡаларҙан өҫтөн ҡуйма, ләкин кәм дә тойма. Нисек барһың, шулай бул, үҙ тормошоң менән йәшә. Кеше һөйләгәндә һөйләмә һәм тыңлама. Бары тик Аллаһтың әйткәнен тыңла, Уның менән мөнәсәбәттәреңдә йәйлә. Иң мөһиме, хәрәкәттәрең, һүҙҙәрең, ҡылғандарың Аллаһы Тәғәлә оҡшарлыҡ булһын.

● Көн һайын етешһеҙлектәреңдең һанын әҙәйт. Мосолман һәм кеше булараҡ камиллашырға тырыш. Нәфсенән - намыҫҡа, ерҙән Аллаһҡа күсеүеңде дауам ит. Намыҫ - ул кеше йөрәгендәге Бәйғәмбәр кеүек.

● Кеше туҡтамай хеҙмәт итергә, киләсәк өсөн борсолмаҫҡа тейеш. "Мосолман киләсәге өсөн борсолорға тейеш түгел" тиеү, киләсәктән ҡурҡырға кәрәкмәй, тигәнде аңлата.

● "Хеҙмәт - ул ныҡлы таяныс. Йығылһаң да, уға тотоноп, аяғүрә баҫа алаһың".

● "Кем йәш сағында теләһә ниндәй урында йәшәй, шул ҡартлығында теләмәгән урында йәшәр".

● Халиф Али шулай тип әйтеп ҡалдырған: "Балаларығыҙҙы улар йәшәр заманға ҡарап тәрбиәләгеҙ".

● Аҡса һинең өсөн төп маҡсатты тәшкил итмәһен. Аҡса - ул изге эштәрҙе башҡарыуҙың бер сараһы ғына булып ҡалһын. Матди байлыҡты йөрәгеңә индермә. Бер йөрәккә ингән нәмәне кире сығарыу бик ауыр ул. Мәңге булмаған әйберҙәр бер ҡасан да кешегә бәхет килтермәҫ.

● Халиф Омар: "Кеше һөйләмә. Ул - ауыр бер сир. Аллаһты иҫкә төшөр. Бына ул дауа!" - тигән. Ниндәй хаҡ һүҙҙәр! Бер тапҡыр ғына булһа ла кеше тураһында нәфрәт, насар тойғолар менән яман һүҙ әйтһәң, шундуҡ үҙеңде насар хис итәһең. Ләкин Аллаһты иҫкә төшөргәндә йөрәк тыныслыҡ, ихласлыҡ менән тула.

● Кеше ихлас кешеләрҙән белем һирпергә тейеш. Иғтибар менән тыңла, ләкин һәр нәмәгә ышанып барма. Кем һөйләгәнен түгел, нимә һөйләгәненә ҡара. Тирә-яғыбыҙҙа нимә булғанын аңларға тырышмаһаң, ғүмеребеҙ заяға үҙасаҡ. Үҙ ышаныуҙарыбыҙ, фекерҙәребеҙ булмаһа, юғаласаҡбыҙ.

● Дуҫым, шуға ышан: әлеге заманда күптәр үҙҙәренең көсһеҙлөгән еңә белмәй. Үҙ башың менән уйла. Һинең менән идара итмәһендәр. Барыһын да белеп, аңлап йәшә. Үҙеңде тормошоңдан ситләтер нәмәләр күп ул. Кеше-робот менән идара итеүе еңелерәк тә.

***✓ Юҡ, булмаһа булмай икән, ашағаны елгә оса әллә, көҙгө алдына барып баҫыу менән кәйефе юғала, йоҡа кәүҙәһен тикшереп, ҡабырғаларын һанап эсе боша.***




–Һи-и-и, мындай весың менән... Үләкһә... - Сибәр табип ҡыҙ алдында баҫып торған тәбәнәк буйлы ҡаҡлас егеткә йөҙөн сирып ҡараны. Буласаҡ һалдат әллә арыҡ кәүҙәһенән оялды, әллә эске кейеменән тартынды, ҡыҙарып, итһеҙ нәҙек ҡулдарын артына йәшереп, килешһеҙ тапанды. Табипты егеттең уй-кисерештәре ҡыҙыҡһындырмай ине, бер саҡырылышта ғына уның ҡулынан йөҙләгән призывник үтә, шуға йәнһеҙ әйберҙе тикшергәндәй ҡыланды. Сибектең ауыртҡан еренә баҫҡанын һиҙмәне сибәркәй, бөксәйеп, тағы ла бәләкәсәйгән бисараны әптән юҡҡа сығарып ҡуйҙы:

- Рәсәй армияһы һиндәйҙәр менән көслө инде, хи-хи-хи...

Өҫтәл артындағы ҡаты ҡышта күтәртә яҙып, ҡара тупраҡҡа тояҡ терәгән һыйыр һымаҡ ябыҡ ҡатын, ҡыҙыҡһынып, оҙон муйынын һуҙҙы. Ул егеттең ауырлыҡ-оҙонлоғон теркәгән ыңғайы һонтор кәүҙәһе менән бергә күнәк элерлек осло яуырындарын һерелдәтеп хихылданы ла, ихласлап мыҫҡыллауға ҡушылды:

- Ошондай ил һаҡсыларына ышанып... Йоҡлағанда яҫтыҡ аҫтына балта һалып ятмағанда...

- Ишегендә йөҙ ҡат йоҙаҡҡа бикләп, тиген! - Кәртинкә ҡыҙ "үләкһә"гә сәнсеп ҡарап, күҙҙәрен йомдорғансы сәпәне.

Эх, белһәләр икән егеттең эсендә ниҙәр ҡайнағанын! Бармаҡ башындай әпәйгә тилмергән ас әҙәмдәй күҙҙәрен мөлдөрәтеп баҡты ул мыҫҡыллаусыларға. Ниндәй генә һүҙ булһа ла күтәрергә әҙер егет яҙмышын алдында торғандар хәл итә бит. "Алһалар ғына ярар ине, алһалар ғына ярар ине", - тип дөп-дөп типте йөрәге. Бүлмәлә һалҡынса булһа ла, тиргә батты ҡаҡса кәүҙәһе, маңлайында ҡалҡҡан бөрсөк-бөрсөгө тәҙрәнән төшкән һүрән яҡтылыҡҡа йылтыраны, борсолоуҙан эсе борорға тотонмаһынмы. Һөйләп бирергә теле генә әйләнмәй. Шуны ла аңла-мағастары: илһөйәр кешегә Тыуған ил алдындағы бурысын үтәү мөһим дә һуң. Борон-борондан ир ҡоралға ынтылған, мылтыҡтан атып, дары төтөнөн еҫкәп, үҙен ысын ир-егет итеп тойоу елкендерә һәр көслө затты. Үҫмер саҡта барыһының да шөрләгәне - ут-һыу кисеүҙән мәхрүм ҡалып, ғүмерлеккә ауылдаштары, бигерәк тә ҡыҙҙар алдында хурлыҡҡа төшөү.

Хәүеф яҡынлағанын һиҙеп, егет баҙаны, ғәргә тейеүҙе ишетмәҫкә теләп, сытырлатып күҙҙәрен йомдо ла, муйынын эскә тартты...

* * *

Унынсыны алдынғылар рәтендә тамамлаһа ла, күп кенә тиҫтерҙәре ише мәктәптән һуң училищеға уҡырға инде Ғәлим. Атаһына оҡшап, тракторсы булыу ине хыялы. Бәләкәйҙән тимер-томор араһында буталып, тимер ене ҡағылғайны егеткә, баҫыу техникаһы күңел түрен биләне. Училищенан һуң артабанғы хыялдары күп ауыл малайыныҡы һымаҡ ябай: армия, колхоз, кәләш алыу, өй һалыу, донъя ишәйтеү. Әммә көтмәгәндә йәшәү графигы боҙолдо егеттең. Алдан ҡоролған тормош кәмәһе һәүетемсә генә ағым ыңғайына аҡҡанда, осло төпһәгә эләгеп, түңкәрелгәндәй булды. Әрмегә саҡырылыу ваҡыты яҙын ине, олонан табын ҡороп, туғандары иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуын теләп ҡалғайны, ауырлығың етмәй, тип, Өфөнән бороп ҡайтарҙылар. Ғәрлеге ни тора, бөтә ауыл менән оҙатҡайнылар бит, ғәм алдында үҙен ысын ил һаҡсыһы итеп тойғайны. Етмәһә: "Ғәлим, беҙ һиңә ышанабыҙ, атай-олатайҙар йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермә", - тип барыһы ла уға өмөт менән баҡҡандай ине. Их, ни битең менән кире ҡайтаһың!

Әрме һурпаһын һемергән атаһы ҡара янып, танауын төшөргән кинйәһен тынысландырҙы: "Егетмен тигән кеше юҡ-барға бирешеп барамы шул, ана, ҡатыҡ-иттән өҙөлмә, күберәк хәрәкәт ит. Ярты йылдан, бармайым, тиһәң дә алып китерҙәр". Ағалары йомарлап тимер бөгөрлөк шул, йылға буйында үрә ҡатҡан һомғол тирәктәр шикелле. Ғәлим үтә кәтмәндәй ҙә түгел, ваҡыты еткәс, шулар һымаҡ һуҙылыр, тип уйлайҙыр. Мөғжизә тыуһа икән дә, әкиәттәге һымаҡ, ай үҫәһен көн үҫеп.

Әсәһе лә һиҙгер, улының кем тип йән атыуын белә йөрөй, шуға һалпы яғына һалам ҡыҫтырҙы: "Төҫ тиһәң - төҫөң, буй тиһәң, буйың бар, улым, мына, Алла бирһә, әрменә лә һерәп ултырған тракторҙы йүнәтеп алды. Ауылда механизатор йыл әйләнәһенә бушамай. Баҫыуҙарҙа уңыштан һуң һалам эҫкерттәре баш ҡалҡытҡас, ер һөрөү башланды. Егет халыҡ араһында мәж килеп өйрәнгәйне лә, бер көндө әсе теллеһе, эшкинмәгәнлегенә төрттөрөп, иҫке яраһын ҡайтанан яңыртты. А-а-ах, ниңә генә шулай бәғерһеҙ икән ауылдаштары, ниндәй ғәйебе бар һуң уның? Һаҡһыҙ ҡыланып, яңы балалыҡтан сығып, үҙаллы тормошҡа аяҡ баҫа башлаған үҫмерҙең рухын йығыу бит! Быяланы бер ваттыңмы, йәбештереп ҡара! Уйланып, үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәне Ғәлим, тағы йомоҡланды. Өндәшмәй баш баҫып тир түкте, йыш ҡына ваҡыт

Автобустан төшкәс, әрәмәлеккә сумып кис еткерҙе Ғәлим, тауыҡ күҙе бәйләнгәс, ҡасабоҫа һаңғырау тыҡрыҡтарҙан өйөнә тартты.

* * *

Беренсе көндә, ояһына төшөп ҡасҡан йомрандай, ишектән башын да сығарманы, йомошона хатта асмалы тәҙрә аша барыр булды. Иртәгәһен бала саҡтан оҡшатып, әле күҙ һалып йөрөгән күрше ҡыҙы Гөлсирә, ҡойма аша "һалдатты" шәйләп, уйламаҫтан үпкәләтте: "Хеҙмәтең үттеләме ни?" Ғәлим яуапҡа ауыҙын асҡансы, сылтырап көлөп, өйөнә йомолдо оҙон сәс. Ах, мәсхәрә-ә-ә, күрше ауыл егеттәре менән танауға танау килгәндә тас маңлайға эләккән йоҙроҡтан яман ине быныһы. Туғыҙҙы тамамлаған эскәрһеҙ ҡыҙҙың ябай хәбәре шулай шаңҡытыр тип башына ла килмәгәйне. Ныҡ кәмһенде шул мәл, етерлек туҡланһа ла, йоҡмаған тәнен ҡапшап, көҙгөләге сағылышына текләп оҙаҡ торҙо, аҙаҡ мендәргә ҡапланып көнө буйы ятты. Ҡолағында күрше гүзәленең һүҙҙәре яңғырап тик торҙо, йөрәге янды егеттең, йәне үртәлде. Хәрби кейемдәге бәхетле тиҫтерҙәрен күҙ алдына килтереп, тағы бөтөрөндө, байтаҡ ҡына ваҡыт хистәрен йүгәнләй алмай аҙапланды. Бер көн кипкән балыҡтай еҙнәһе лә, шаяртып, утҡа кәрәсин өҫтәне: "Көймә бушҡа, ҡәйнеш, һәйбәт әтәс һимеҙ булмай ул..." Өс йыл алырҙар. Ике йылдан тағы ла килбәтлерәк булып ҡайтып төшһәң, артыңдан ҡыҙҙар үҙҙәре йүгерер". Шулай тип өмөт сатҡылары ҡабыҙып әүрәтә лә, тәмле-тәмле аштар бешереп һыйларға тырыша ғәзизен. Ауылда көҙгә саҡырыласаҡ ике синыфташы ла хәленә инеп, тупһа тапаны. Улар ҙа мәктәптә: "Күркә елгә һимерә, һин дә һарай башына менеп ҡунаҡлап ҡара, бәлки күҙгә ташланырлыҡ көрәйерһең", - тип, аҙ үсекләмәгәйне, әле ҡайғыһын уртаҡлашып, өлкәндәрсә кәңәш-төңәш ҡорҙолар. Ҡартатаһы, мәлен тура килтереп, әҙме-күпме асҡыс тапты ейәненең күңел һандығына. "Ҡалайтаһың, улым, Хоҙай кәүҙә бирмәгәс", - тип яраһына тоҙ һибеп торҙо ла, һүҙен дауам итте: "Һинең булмышың шул. Беҙҙең халыҡта матур бер мәҡәл бар: ҡарама беләккә, ҡара йөрәккә. Ана, урам буйлап әҙмәүерҙәй ир-ат, араҡынан алйып, ҡайҙа барып төртөлөргә белмәй йөрөй, уларҙың илгә файҙаһы бармы инде? Кәүҙәләме эш, аҡыл кәрәк, аҡыл..."

* * *

Яҙғы ташҡындан һуң үҙ ярҙарына ҡайтҡан йылғалай, яйлап тынысланды Ғәлим. Кешенән күпме генә ситләшмәһен, уны гараж тирәһе магниттай үҙенә тартты, ике ай тирәһе сыбыртҡы шартлатып, һыҙғырынып йөрөнө лә, ҡан даулаған һөнәренә күсте, бригадир ярҙамында етем-иҫәбен юғалтты, ҡайһы саҡ бригаданы аптыратып, ҡараңғы төшкәнсе гектарҙарҙы иңләне. Лайыҡлы маҡтауҙарына ла ҡолаҡ һалманы егет, трактор ҡарышлауыҡтарының шатырлауы ғына иғтибарын ала, ә уйҙарында ул ҡайҙалыр алы-ы-ҫта, сик буйында, автомат аҫы, сит яҡты күҙәтә, дошмандар һөжүм иткәндә батырҙарса ҡаршы тора, ҡамауҙа ҡалһа, Ватаны өсөн ғүмерен дә бирергә әҙер. Шулай хыял диңгеҙендә йөҙөп, күңеле күтәрелә бер аҙ, тик әлеге тауыҡ кеткелдәр хәле иҫенә төшөү менән тәрән көрһөнөп ҡуя.

Кистәрен клубҡа аяғы тартманы Ғәлимдең, йәштәргә күренһә, күҙ астырмай көлөрҙәр һымаҡ, эштән ҡайтып әйләнгәнендә генә күрше ихатаны байҡаны. Ҡыҙҙың ҡаршына барып өндәшергә оялды егет, нимә тип һүҙ ҡатһын, яратам, тик эйәреп йөрөй алмайым, тиһенме? "Кит, бешмәгән", - тип ысҡындырһа, йығыл да үл. Өйҙә йоҡлап ятһа, клубтан Гөлсирәне кемдеңдер оҙатыуы ла мөмкин бит әле, башҡаларға ла оҡшауы бар ундай матурҡайҙың, шуны уйлап йөрәге ҡыҫыла. Бер төн хатта ҡойма артына боҫоп, уйындан ҡайтҡандарын көттө, янында иптәш ҡыҙҙарынан башҡа егет-елкенсәкте абайламағас, ҡыуанғаны-ы-ы! Көндөҙ ымһындырғыс һынды бер күреп ҡалһа, тағы ла дәртләнеп тотондо эшенә, тамағына аш барҙы, әсәһе ҡыҫтырып ебәргән тәм-томдоң валсығын да ҡалдырмай йыпырып ҡуя. Ашханала бешерелгән төшкө бутҡаны ла ситкә этмәне бөтмөр тракторсы, өҫтәп, баҡса йәшелсәһе менән туҡланды. Юҡ, булмаһа булмай икән, ашағаны елгә оса әллә, көҙгө алдына барып баҫыу менән кәйефе юғала, йоҡа кәүҙәһен тикшереп, ҡабырғаларын һанап эсе боша. "Шауҡал малды аны артынан сыҡҡансы ашатһаң да шалдырлап торған һөйәктә ҡала", - ти торғайны атаһы, мандымаған һыйырҙы әрләп. Ғәлим, бәлки, көҙгө алдайҙыр, тип төпкө бүлмәләгеһенә яҡынлап, мускулдарын ҡатыра, ә яуырындан түбән ҡаҙ йомортҡаһылай төйөр, киреһенсә, сыбыҡтай ҡулдарын йәмһеҙләй. Уфтанып, үҙен баштан-аяҡ күҙҙән үткәрә, йөҙө әртистәрҙекеләй матур, килешле былай, э-э-эх, кәүҙәһе шул, кәүҙәһе-е-е!

**(Дауамы бар).**

# ҠАЙҒЫ УРТАҠЛАШАБЫҘ



**Башҡортостан һәм Рәсәй Яҙыусылар ойошмаһы ағзаһы Сабит Фазлыев 2024 йылдың ғинуарында РФ Оборона министрлығы менән килешеү төҙөп, Махсус хәрби операцияға китә һәм күп тә үтмәй, "хәбәрһеҙ юғалды" тигән хәбәре килә. Ошо көндәрҙә уны тыуған яғы Ейәнсура районына алып ҡайтып ерләнеләр.**

- Әҙәбиәтебеҙ өсөн ҙур юғалтыу кисерәбеҙ. Сабит Фазлыевтың ижады хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә айырым урын алып тора. Уның "Ҡара этап" романы журнал вариантында баҫылып сыҡҡас, күренекле яҙыусыларҙан юғары баһа ала. Уҡыусылар ҙа коллективлаштырыу, ер тартып алыу, крәҫтиәндең яҙмышы, репрессиялар, Себер һөргөнө, тыл, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы ауыл тормошона арналған был әҫәрҙе яратып ҡабул итте, авторҙы ижади осрашыуҙарға йыш саҡырҙылар, - тип һөйләй Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе, Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты Айгиз Баймөхәмәтов. - Сабит Мәғәз улының ижади мөмкинлектәре ғәйәт ҙур ине. Уның повесы хәҙер рус телендә баҫмаға әҙерләнә. Батырҙың иҫтәлеген мәңгеләштереү, әҙәби мираҫын киң ҡатлам уҡыусыларға еткереү өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләйәсәкбеҙ.

*АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА*

# БОРОНҒОЛАР ӘЙТКӘНДЕ...

## бөгөнгө тормошобоҙ ҙа раҫлай

(Эссе)



**"Дуҫың бәлә килгәндә, герой - һуғышта, намыҫлы - бурысын түләгәндә, ҡатын кеше - фәҡирлектә, туғандар - ҡайғы-хәсрәт килгәндә таныла". Иң боронғо замандарҙан беҙҙең дәүергә килеп еткән афоризмдарҙың береһе был, ундағы һәр аҡылға айырым туҡталып, сурытып алайыҡ әле.**

Был тапҡыр әйтемде уйлап сығарған кеше ысын философ булған: күреп тораһығыҙ бит, ул антиномиялар, йәғни ҡапма-ҡаршылыҡлы һүҙҙәр ҡулланған - йәшәйештең бер яғында дуҫың, ил батыры, намыҫын юғалтмаған кеше, ҡатының һәм туғандарың. Тап шул кешеләр - һинең өсөн иң яҡын булырға тейеш тә һуң, тик фәлсәфә таяғының икенсе осо булыуын да оноторға ярамайҙыр: унда башыңа төшкән бәлә, һуғыш-ҡырылыш, намыҫһыҙ әҙәм затының һинән алған бурысты түләргә теләмәүе, фәҡирлектә йәшәгәнеңдә ҡатыныңдың бер туктауһыҙ үртәүе, һәм, иң аламаһы - ҡайғылар, бәхетһеҙлектәр ҡыҫҡан бер мәлдә туғандарыңдың һиңә ярҙам итмәүе, иғтибарһыҙ һәм илтифатһыҙ ҡалыуҙарындалыр.

Иң элгәре талантлы йырсыбыҙ, Башҡортостандың халыҡ артисы Рамаҙан ағай Йәнбәковтың бер йыры иҫкә төшә: "Ашаған-эскән саҡта, һай, дуҫ-иштәр күп, башына бәлә килһә, бер кеме лә юҡ". Ни өсөн йәш сағында дуҫтар кәрәк? Әлбиттә, бергәләшеп күңел асырға. Ана шул-шул: ул саҡтағы дуҫ-иштәрең башҡа бер нәмәгә лә эшкинмәйҙер ул. Шулай, бер журналист коллега әйтә ҡуйғайны: йәш сағымда дуҫтарым күп булды, шуға ҡыуана торғайным. Йылдар үтә торҙо, дуҫтар юғала торҙо. Хәҙер бер нисә генә ысын дуҫым бар, тип ышаныслы әйтә алам. Уларға теләһә ниндәй ваҡытта ла эс серҙәреңде һөйләй алаһың, улар һине ярты төн уртаһында ла ҡабул итергә әҙер, һинең шатлыҡ-ҡыуанысыңа улар ҙа ихлас шатлана, ҡайғылы сағыңда терәк була белә. Юғары вазифа бирһәләр, ысын күңелдән ҡотлайҙар, эшеңдән алһалар, һүҙҙәрен табып, йыуата ла беләләр. Көнсөллөк тигәнеңдең эҙе лә юҡ уларҙа. Ниҙелер яңылыш эшләйһең икән - тураһын күҙгә ҡарап әйтәләр. Ҡыйын булһа ла, уларҙың тәнҡит һүҙенә һис асыуланыу юҡ.

"Был донъяла иң ауыры нимә ул?" тиһәләр, һуғыш, тип яуаплар һәр кем. Кешелек донъяһы шундай алама ҡоролған ки, кешеләр, халыҡтар таш быуатынан бирле бер-береһе менән һуғышып йәшәй. Донъя философтары ла, Карл Маркс, Владимир Ленин кеүектәре лә һуғыштарҙың барса сәбәптәрен, уларҙың асылын ахырынаса аңлата алманы. Меҫкен әсәләр миллионлап ул тыуҙыра, бәпләп үстерә, ә һуңынан улар һуғыштарҙа миллионлап ҡырылып бөтә. Шулмы ни уларға йыһандан, Илаһтан бирелгән тәҡдир? Һуғыш булғас, батыры ла, бахыры ла була. 1941 йылдың йәй айҙарында төшөрөлгән немец кинохроникаларын ҡараһаң, иҫеңаҡылың китер. Улар күптән онотолоп бөткән инде, ә беҙ ул батырҙарыбыҙға дан йырлайбыҙ, сөнки улар ил намыҫын, ир намыҫын аяҡ аҫтына һалып тапатырға ирек бирмәгән.

Намыҫ тигәндәй, хәҙер тирә-яғыбыҙҙы бихисап намыҫын юғалтҡан кешеләр баҫып алған кеүек. Улар төрлө юлдар менән ҡарт-ҡоронон, асығауыҙҙарҙың, ил буйынса һанай китһәң, миллиардлаған һум аҡсаларын алдап, мутлашып алып китә. Төрлөсә мутлашыуға, дәүләт аҡсаһын (тимәк, беҙҙең барыбыҙҙың да аҡсаһын) үҙҙәренең тоҡтай ҙур һәм төпһөҙ кеҫәләренә күсерергә әҙер генә торған намыҫһыҙ әҙәмдәр түрәләр араһында ла етерлек ул. Шунан ни, ҡай сағында, хыялый әҙәмдәй, уйлап ҡуяһың: и-и-х, бар кеше лә намыҫлы йәшәһә, барса халыҡ бай ҙа, бәхетле лә булыр ине, тип. Тик бындай тормош, совет халҡы ихлас ышанған коммунизм кеүек, әллә ҡайҙағы киләсәктә генә төҫмөрләнә...

Ҡатындарыбыҙ - хәләл ефеттәребеҙ хаҡында ла әйтеп үтмәйенсә булмаҫтыр ул (ныу һуңынан кәрәкте бирерҙәр инде, тип шыртлап та ҡуям бер аҙ). Ә ниңә әйтмәҫкә ти? Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә, ти бит: "Ирҙе ир иткән дә, ер иткән дә ҡатын". Унһы шулайҙыр, ихлас ышанам, әммә ҡатынһыҙ йәшәгән ир-аттан дә ҡәҙерһеҙерәк башҡа кеше юҡтыр. Йәлләһәң ни ҙә, йәлләмәһәң ни? Кәләш йәрәшкән булһалар, барыһы ла ер булмаҫтар ине, "Мин ирмен!" тип күкрәктәренә һуғып йөрөрҙәр ине шулар. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға ла гәйеп күптер: башҡорт егеттәрен хурлап тороп, башҡа милләт егеттәре ҡосаҡтарына ингәндәрен белмәй ҙә ҡала бәгзеләре.

Ҡатын кеше фәҡирлектә һынала, тиелә юғарылағы афоризмда. Эш бер фәҡирлектә генә түгелдер. Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың байтағы үҙҙәрен теге урыҫ әкиәттәрендәге принцессалай тота хәҙер: Аҡбуҙатҡа атланған принцтарын (хәҙергесә - олигархтарҙы) ҡартайып-мыртайып бөткәнсе көтә улар. Йәнә, бик үҙһүҙлеләр, арҡырылар, берәй нәмә хаҡында икенсерәк һөйләй башлаһаң, алдарына сығырмын тимә. Һай, боронғолар маладис та инде, шәп фекер эйәләре булған: ҡатын-ҡыҙҙар хаҡындағы хәҡиҡәтте яра һалып әйткәндәр! Бына ул ҡәҙерлеләребеҙ хаҡында шул архаик замандарҙан ҡалған бер нисә афоризм: "Илаһ ике хата ебәргән: ҡатын-ҡыҙҙарҙы һәм алтынды бар иткән"; "Дуҫлыҡты һаҡлау һиңә ҡиммәт икән, ҡәҙерле ҡунаҡ йә иһә туғандай булып, берәй өйгә инһәң - ҡатын-ҡыҙҙарҙы, хәүефле бер нәмәләй күреп, урап үт!"; "Аҡылың булһа, байға, хакимға, балаға, ҡарт кешегә, аскетҡа, аҡыл эйәһенә, ҡатын-ҡыҙға, йүләргә һәм уҡытыусыға ҡаршы һүҙ әйтә күрмә"; "Ҡырағай ишәк өсөн уның ҡолағындағы ҡулсаларҙан бер ниндәй ҙә файҙа булмағандай, буй-һының ғорур тотоп, текә баҫып йөрөүсе ҡатын-ҡыҙҙан, әгәр ул хәйләле, мәкерле һүҙҙәр һөйләһә, аҡылы етешмәһә, һүҙсән һәм күп һөйләүсән булһа, бер файҙа ла булмаҫ"; "Батшаларға, утҡа, оло кешеләргә һәм ҡатындарға артыҡ яҡын да килмә, артыҡ ныҡ йыраҡ та китмә: бик яҡын килһәң - һине һәләк итерҙәр; бик ныҡ алыҫ булһаң - уларҙың һинең өсөн бер кәрәге лә ҡалмаҫ"; "Урыны, осрағы йә иһә уны теләгән кешеһе булмаһа - ҡатын-ҡыҙҙың семтеп алыр ере юҡ һәм ул саф. Әгәр ҙә ки уға мөхәббәт илаһы үҙе әләкһен ти - ул икенсе ирҙе теләйәсәк. Барса ҡатындарҙың тәбиғәте шулай бит".

Ярай, булмаһа, етеп торор, әтеү күрмәгәнемде күрһәтерҙәр нескә заттар. Төп һығымта өсөн халҡыбыҙҙың тағы ла бер әйтемен килтереү ҙә етә: "Аттың алаһы ла, ҡолаһы ла була". Шуға күрә, егеттәр, аламы ул, әллә ҡоламы - үҙегеҙ һайлап алығыҙ, тик ике зат ярашып, аңлашып йәшәй алһын өсөн тормош йөгөн икәүләп, үтә лә тырышып тартыу зарурлығын онота күрмәгеҙ.

Иң аҙаҡтан - туған-тыумасалыҡ хаҡында. Халҡыбыҙ туғанлыҡ хисенә хөрмәт менән ҡарай: үлгәндәренең ҡәберен, тереләренең ҡәҙерен белергә ҡуша. Ғәзиз туғандарын ташлағандарҙы инҡар итә. Бик хисле бер йырҙың моңло көйө лә, йәнгә ятыш һүҙҙәре лә туғанлыҡты хәтерләтеп торһон, тим: "Бер алманы бишкә бүләйек, беребеҙ өсөн беребеҙ үләйек". Һуңғы һүҙе хис ташҡынын ғына аңлата: йәшәйек әле, милләттәштәр, дуҫтарыбыҙҙы ҙурлап, батырҙарыбыҙҙы данлап, намыҫыбыҙҙы һаҡлап, ир менән ҡатын араһындағы мөхәббәтте дәрләтеберәк ебәреп, туғандарыбыҙҙың ҡәҙер-хөрмәтенә разый булып! Был минең Яңы йыл теләгем булды!

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

*ИШАРАЛАП...*

# БЕР ТЕМАҒА - ИКЕ ШИҒЫР

## йәки Мөтәшағирҙарға

**Һәр заманда ла булған һәм бар мөтәләр: мөтәмөғәллимдәр, мөтәтүрәләр, мөтәғалимдар, мөтәшағирҙар һ.б. мөтәләр... Шәйехзада Бабич, мәҫәлән, мөтәшағирҙарҙы рисуай итеп, "Мөтәшәббиһат" тигән хеҙмәтендә уларҙың "һүҙ" менән "йондоҙ", "Аҡмулла" менән "Шура", "дин мәғишәт" менән "мәғлүмәт", "тормош" менән "ҡояш", "ҡармаҡ" менән "ҡаҙаҡ" һүҙҙәрен рифмалаштырыуын килтерә.**

**1917 йылда Бабич мөтәшағирҙарҙы фашлап, "Миндә көс" тигән сатирик шиғыр яҙған. Тағы ла 75 йыл үткәс, беҙҙең заман төртмә теле Буранбай Исҡужин 1992 йылда "Тумырҡҡалар" шиғырын ижад иткән. Ике шағир ҙа бер үк теманы күтәрә, үҙенсә яҙа. Тимәк быуат башындағы проблема үҙгәрешһеҙ ҡала килә. Бер әҙип һәр заман өсөн дә мөтәләрҙең зарурлығын шулай аңлатҡайны: "Былай яҙырға ярамай икәнлеген белдерер өсөн, ғибрәт өсөн дә мөтәләр кәрәк..." Бәлки шулайҙыр, әммә шуныһы: берәү ҙә үҙенең мөтә икәнлеген танырға теләмәй, үәт, ҡайҙа мәсьәлә!**

### Шәйехзада БАБИЧ
### МИНДӘ КӨС
**(Мөтәшағирҙарға)**

Миндә көс бар, мин һиҙәм бик,-  
Миндә көстәр аллаһы.  
Ҡурҡа минән түлке сысҡан,  
Үрмәкестәр - һәммәһе.

Ҡырға сыҡһам, күренешемдән  
Ҡарға, ҡуяндар ҡаса;  
Күлдән өйрәк, балыҡтар,  
Ҡаҙ, һайыҫҡандарғаса.

Янмаған бер шырпыны мин  
Бер һыҙыуҙа ут итәм,  
Сынлаһам мин, бер һуғыуҙа  
Бер себенде юҡ итәм...

Кисә мин бер таш киҫәгән  
Иҙәнгә атып елләнем;  
Ҙур итеп тиштем ҡырыйын  
Бик матур һыу сүлмәген.

Шул ҡаһарманлыҡ өсөн  
Әнкәй мине бик маҡтаны -  
Тал сыбыҡ берлән, тотоп,  
Майлап бешерҙе арҡаны.

### Буранбай ИСҠУЖИН
### ТУМЫРТҠАЛАР
**(Йыр өлгөһө)**

Тумыртҡалар...Тумыртҡалар...  
Туҡ-туҡ һайрайҙар.  
Ағастарҙың тышын тишеп,  
Эсен ҡарайҙар.

Тумыртҡалар... Тумыртҡалар...  
Һеҙ әрһеҙ ҡоштар...  
Шул тиклем дә бер-беренә  
Йырығыҙ оҡшар.

Тумыртҡалар... Тумыртҡалар...  
Ҡумәкһегеҙ бит!  
Һайрар ҡоштар тауыштарын  
Ҡумәһегеҙ бит!

Тумыртҡалар...Тумыртҡалар...  
Туҡылдамағыҙ!  
Һандуғастар серем итә,  
Бимазаламағыҙ!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әҙерләнә.**

***✓ Скульптор бигерәк тә эпостың Йыһан ваҡиғаларына һәм уның бәләкәй сюжеттарына иғтибар бүлә. Замандашыбыҙ фекеренсә, эпос үҙендә ҙур энергия, көс һәм фәлсәфә туплаған.***

ИНТЕРНЕТТАН



# НИСЕК ТУҠЛАНА БИТ!

■ Британияның Бристоль университеты ғалимдары әйтеүенсә, баланың аҡыл ҡеүәһе үҫеше уның бәләкәй сағында нисек туҡланыуына бәйле. Өс йәшкә тиклем "зарарлы" аҙыҡ-түлек ашаған балаларҙы биш йылдан һуң тикшереп ҡарағандар һәм интеллект коэффициентының тиҫтерҙәренекенә ҡарағанда түбәнерәк булыуын асыҡлағандар. Ғалимдар әйтеүенсә, өс йәшкә тиклем балаға "дөрөҫ" аҙыҡ биреү мөһим, сөнки мейе йәшәүҙең тәүге өс йылында әүҙем үҫешә.

■ Һуңғы ун йыл эсендә үткәрелгән тиҫтәләрсә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, майһыҙ диеталар сәләмәтлек өсөн зыян ғына килтерә. Бөгөн түбән калориялы аҙыҡ-түлек ҡулланыу модаға инеп китте һәм ул иң сәләмәт туҡланыу өлгөһө итеп ҡабул ителә. Бындай продукттар етештереүселәр вәғәҙәләүенсә, май күләме түбән булған аҙыҡ йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән, яман шеш һәм диабеттан һаҡлай. Әммә был аҙыҡ төрҙәре составындағы тоҙ, трансмай, зарарлы углеводтар берәүгә лә файҙа килтергәне юҡ әле. Сәләмәтлек өсөн майҙың күләменә ҡарағанда, уның сифаты күпкә мөһимерәк. Мәҫәлән, түбән калориялы икмәктә май күләме аҙ, тик аҡ он һәм шәкәр күп, шуға ла майһыҙ, әммә эшкәртелгән углеводтарҙан торған диета ауырлыҡтың артыуына, йөрәк сирҙәренә, 2-се типтағы диабетҡа килтерә.

■ Әфлисунда, грейпфрутта һәм башҡа цитрус емештәре составындағы берләшмәләр ҡатын-ҡыҙҙар араһында инсульт хәүефен түбәнәйтә. Норвичтағы Англия Көнсығыш университеты ғалимдары көндәлек рационы юғары күләмдәге флаванондарҙан торған ҡатын-ҡыҙҙар араһында ишемик инсульт менән ауырыу хәүефе 19 процентҡа кәмеүен асыҡлаған. Флаванондар - флаваноидтарҙың бер төрө, улар башлыса үҫемлектең пигментацияһы өсөн яуап бирә. Флаваноидтарҙың сығанағы булып цитруслылар, еләк-емеш, йәшел сәй, ҡыҙыл шарап, ҡара шоколад иҫәпләнә.

■ Ашҡаҙан сире менән яфаланыусыларға табиптар абрикос ашарға кәңәш итә. Абрикос емеше аппетит булмағанда, ашҡаҙан һуты насар бүленгәндә файҙалы. Уның составында калий күп, шуға ла ул йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан, гипертониянан килешә. Абрикос организмдан азотлы шлактарҙы сығарыуға булышлыҡ итә, гемоглобинды күтәрә, арыуҙы бөтөрә. Абрикос шулай уҡ метаболизм боҙолғанда тәҡдим ителә.

■ Аҙыҡ-түлек ҡабындағы матдәләр ҡыҙ балаларҙың һимеҙлегенә килтерә, ти табиптар. Был химикаттар организмдың матдәләр алышыныуына тәьҫир итә һәм балаларҙың ябығыуын ҡатмарлаштыра, тип яҙа USA Today. Балаларҙың һимеҙлегенең төп сәбәбе булып дөрөҫ туҡланмау һәм физик әүҙемлек булмауы тора. Хәҙер яңы тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, аҙыҡ-түлек ҡаптарындағы ДФП тип аталған химик матдә лә артыҡ һимеҙлеккә килтереүе ихтимал, ти мәҡәләнең авторы Фатима Васим. ДФП йәки бисфенол А барлыҡ ҡаптарҙы ла, пластик, металл шешәләрҙе лә етештереүҙә ҡулланыла. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, туғыҙ йәштән ун ике йәшкә тиклемге ҡыҙҙарҙың организмында ДФП кимәле күп булған һайын, уларҙа һимеҙлек хәүефе лә арта. Йәғни, тап ошо осорҙа улар был матдәгә тиҙерәк бирешеп бара.

РУХИӘТЕБЕҘ

# БАШҠОРТОСТАНЫБЫҘҘА...

## "Урал батыр" эпосы көнө лә билдәләнһен ине

**2025 йылда фольклорсы-ғалим Мөхәмәтша Буранғоловтың Ғәбит сәсән Арғынбаев менән Хәмит сәсән Әлмөхәмәтовтан "Урал батыр" ҡобайырын яҙып алыуына 115 йыл тула. Ошо мөһим сараға арнап, Башҡортостандың Милли музейы "Урал батыр уҡыуҙары"н ойошторҙо. Ҡорҙа фәндең төрлө тармағын өйрәнеүсе ғалимдар - филологтар, этнографтар, тарихсылар һәм философтар, шулай уҡ рәссамдар, скульпторҙар һәм эпос менән ҡыҙыҡһынған башҡа шәхестәр ҡатнашты. Сарала башҡорт халҡының төп эпосын өйрәнеү, уны танытыу, киләсәктә ҡобайырҙы мәңгеләштереү һорауҙары менән бергә аныҡ тәҡдимдәр ҙә яңғыраны.**



Башҡортостандың халыҡ сәсәне Мөхәмәтша Буранғоловтың халҡыбыҙҙың аҫыл сәсәндәренән мәшһүр эпосты яҙып алып, атын бүләк итеп, үҙе йәйәүләп ҡайтып китеүе лә һис бушҡа булмаған. Башҡорт әҙәбиәте классиктарын тыуҙырған Ырымбур ерененең иң олуғ шәхестәренең береһе ул Мөхәмәтша Абдрахман улы. Ул 1888 йылдың 15 декабрендә Һамар губернаһы Быҙаулыҡ өйәҙе Үрге Ильяс ауылында (халыҡ телендә - Тәңес) тыуған. 1900 йылда эпосты яҙып алыуын иҫәпкә алғанда, был мәлдә егеткә ни бары 22 йәш кенә булған. Ғәжәпләнмәҫ ерендән ғәжәпләнерһең дә, тағы ла бер тапҡыр "Аллаһҡа шөкөр!" тип ҡуярһың!

"Урал батыр" эпосы халыҡтың аҫабалығын, уның боронғолоғон раҫлаусы ҡомартҡы. Башҡортостандың Милли музейы, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты менән берлектә ойошторолған беренсе ғилми-ғәмәли түңәрәк ҡорҙа ошо хәҡиҡәти һүҙ күптәр тарафынан әйтелде. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, ҡор модераторы Зөһрә Рәхмәтуллина ғилми-ғәмәли түңәрәк өҫтәлде асып, "Урал батыр" эпосының ата-бабаларыбыҙҙың донъяға ҡарашы һәм боронғо мифологияһы ғына түгел, ә тәү сиратта, рухи ҡиммәттәрҙе, илһөйәрлекте, ғәҙеллекте һәм халыҡ йолаларын, шулай уҡ өлкәндәргә хөрмәт һәм ихтирам өлгөһө лә булып тороуын телгә алды. БР Милли музейы директоры Рөстәм Исхаҡов "Урал батыр" эпосын өйрәнеү, таратыу һәм популярлаштырыуҙың әһәмиәтен һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм музейҙа ошо темаға арашлы экспозиция ойоштороу кәрәклеген билдәләне. "Урал батыр" эпосын өйрәнеү һәм популярлаштырыу процесын әүҙемләштереү, уның ҡиммәттәрен һаҡлауға һәм киләһе быуындарға тапшырыуға булышлыҡ итеү - беҙҙең төп маҡсаттарҙың береһе. Бөгөн башҡорт халыҡ ҡобайыры күп телдәргә тәржемә ителгән, әммә уның бөтә версиялары ла бер урынға йыйылмаған. Эпос өҫтөндә эшләгән кешеләр күп түгел. Әлеге сараға ла ҡобайырға битараф булмаған белгестәр, тикшереүселәр йыйылды", - тине Рөстәм Әхмәт улы.

Филология фәндәре докторы Гөлнур Хөсәйенова үҙ сығышында эпостың боронғолоғон, унда һүрәтләнгән кешеләр, тәүтормош йәмғиәте һәм бөтә донъя туфан һыуы тураһындағы космогоник мифтар барлығын, шулай уҡ башҡорт халҡының донъяға ҡарашы, бай тарихы һәм мәҙәниәте тураһында бәйән ителеүен билдәләне. "Урал батыр" эпосы донъя яралыуы тураһындағы боронғо мифтарҙың саҡтыларын, донъяның космик моделе өс ҡатлы булыуын (күк, ер, ер/һыу аҫты), донъя тауы, донъяны барлыҡҡа килтереүҙә геройҙың роле тураһындағы мәғлүмәттәрҙе һаҡлауы менән ҙур әһәмиәткә эйә", - тине ул.

Тарих фәндәре кандидаты Вячеслав Котов "Урал батыр" эпосының тарихи тамырҙары" тигән докладында эпик әҫәрҙең һәм уның мифологик нигеҙҙәренең боронғолоғон билдәләп үтте. Ғалим эпостың тексын, уның төҙөлөшөн һәм йөкмәткеһен анализлай, тарихи сығанаҡтарға һәм археологик табыштарға мөрәжәғәт итә. Бындай һәр яҡлы ҡараш эпостың йөкмәткеһен яҡшыраҡ аңларға ғына түгел, уның милли үҙаңды формалаштырыуҙағы ролен дә күрергә мөмкинлек бирә. "Эпос палеолит дәүерендә барлыҡҡа килгән боронғо мифтар нигеҙендә формалаша. Урал-Алтай халыҡтары мифологияһының уртаҡлығы бик боронғо булыуын раҫлай, ә мифтарҙың эпосҡа әйләнеүе беҙҙең эраға тиклем II-III мең йыллыҡта төрлө мәҙәниәттәрҙең үҙ-ара тәьҫир итешеүе йоғонтоһонда булған. Шулай итеп, "Урал батыр" эпосы Төньяҡ Евразия территорияһында иң боронғо эпик текст булып тора", - тип билдәләне Вячеслав Котов.

"Урал батыр" эпосы контексында башҡорттарҙың космогоник ҡарашы философия фәндәре кандидаты Закирйән Әминев тарафынан яҡтыртылды. Филология фәндәре докторы Гөлнур Бохарова "Урал батыр" эпосының ономастик киңлеген анализланы. Ғалимә ҡобайырҙа Башҡортостандың географик объекттарының эпик геройҙар рәүешендә күрһәтелеүенә иғтибар итте. "Эпоста был образдар яҡшылыҡ һәм яуызлыҡ, яҡтылыҡ һәм ҡараңғылыҡ, тормош һәм үлем көрәшен, шулай уҡ кеше менән тәбиғәт араһындағы бәйләнеште лә символлаштыра", - тине ул.

Рәсәй скульпторы, Рәсәй художество академияһы академигы һәм Рәсәйҙең халыҡ рәссамы Салауат Щербаков ҡорҙа онлайн бәйләнеш аша ҡатнашты һәм "Урал батыр" эпосының һәр башҡорт өсөн әһәмиәтле булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Салауат Дәүләтхажи улы (Александрович) Урал батыр образын әҙәбиәттә, кино һәм театр кеүек башҡа сәнғәт төрҙәрендә башҡорттарҙың стилистикаһында һәм фекерләүендә нығытыуҙың мөһимлеген еткереп, был теманы өйрәнеүҙе дауам итергә теләүен белдерҙе. Скульптор бигерәк тә эпостың Йыһан ваҡиғаларына һәм уның бәләкәй сюжеттарына иғтибар бүлә. Замандашыбыҙ фекеренсә, эпос үҙендә ҙур энергия, көс һәм фәлсәфә туплаған. Салауат Щербаков шулай уҡ Башҡортостанда ҡанатлы атта осоусы һыбайлының скульптура образын тыуҙырыу кәрәклеген билдәләне.

Түңәрәк ҡорҙа ҡатнашыусылар әҫәрҙе һаҡлау һәм популярлаштырыу мәсьәләләрен тикшереп кенә ҡалманы, уның Башҡортостан мәҙәниәтен һәм тарихын үҫтереүгә индергән өлөшөн дә баһаланы. Фекер алышыуҙа "Урал батыр" эпосын популярлаштырыуға ҙур өлөш индергән профессиональ һәм һәүәҫкәр фольклорсылар өсөн махсус премия булдырыу тәҡдим ителде. Шулай уҡ Мөхәмәтша Буранғоловтың исемен мәңгеләштереү, һәйкәл ҡойоу, урамдарҙы уның исеме менән атау, йәмәғәт урындарын эпос персонаждары менән биҙәү кеүек тәҡдимдәр ҙә яңғыраны.

### ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

***Салауат Щербаков, Рәсәйҙең халыҡ рәссамы:*** Республикала башҡорт халҡының эспосы мәңгеләштерелгән тотош скульптура комплексын булдырыу мөһим. Уның аша балалар, өлкәндәр ҙә үҙҙәрен был тарихтың бер өлөшө итеп тойорға, уның рухын өйрәнергә һәм дә үҙләштерергә мөмкинлек аласаҡ. Беҙгә тәүҙә берләшергә, комплексты булдырыуға әҙерлек алып барырға кәрәк, был эпостың әһәмиәтен грамоталы һәм тулы сағылдырыу өсөн бар яҡлап, шул иҫәптән идея, әҙәби һәм тарихи эшкәртеүҙе үҙ эсенә алырға тейеш.

***Зәйтүнә Шәрипова, филология фәндәре докторы, профессор:*** Эпослы халыҡбыҙ, аҫабалыҡ тураһында һүҙ йөрөтәбеҙ. Әммә, ниңәлер, ул һаманғаса һүҙҙә генә ҡала килә. Ни өсөн "Шүлгәнташ" мәмерйәһе үҙ атамаһында түгел? Шулай уҡ эпосҡа ҡағылышлы ниндәйҙер экспозиция булдырылмауы аптырауға һала. "Урал батыр"ҙың әһәмиәтен мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренә, экскурсоводтарға аңлатыуҙы тәү сиратта Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты - фән сығанағы булараҡ, үҙ өҫтөнә алырға һәм белгестәрҙе уҡытыуҙы ойоштороорға ла тейеш. "Шүлгәнташ"ҡа һуңғы барғанымда миңә мәмерйәләге һүрәттәрҙең Франция традициялары буйынса эшләнгән тигәнен ишетергә тура килде. Тимәк, борон заманда Франция кешеләре "Шүлгәнташ" мәмерйәһенә һүрәттәр эшләп киткән булып сығамы?

***Айгөл Ҡужахмәтова, БР Милли музейы ғилми хеҙмәткәре:*** Башҡортостандың ете мөғжизәһенә ингән "Урал батыр" эпосын ҙурыраҡ кимәлгә сығарыу, бөтә донъя кимәлендә тағы ла нығыраҡ танытыу тигән маҡсат менән ниндәйҙер этәргес көс, дәрт бирер өсөн барыһын да бер сараға тупларға тырыштыҡ. Һәр еткерелгән тәҡдим нигеҙендә беҙ айырым резолюция эшләргә уйлайбыҙ. Республика Башлығы Радий Фәрит улы тарафынан башҡорт милли байрамдарына өҫтөнлөк бирелеүен иҫәпкә алғанда, кем белә, бәлки, "Урал батыр" эпосы көнө лә рәсми рәүештә билдәләнә башлар. Ул беҙҙең өсөн, беҙҙең халыҡ өсөн бик әһәмиәтле булыр ине тип уйлайым.

**Әйткәндәй, 2021 йылда Бөрйән ерендәге Йылҡысыҡҡан күле эргәһендә башҡорт халҡының эпостары, мифтары һәм легендаларының төп персонаждарының береһе - Аҡбуҙатҡа һәйкәл асылғайны. Мифик образға арналған тәүге композиция авторы Өлфәт Ҡобағошов заманында Өфөлә "Урал батыр" эпосына арналған тотош комплекс булдырыу хыялы менән дә яна. Ҡыҙғаныска, эш тик макеттарҙа ғына тороп ҡала. Өлфәт Ҡобағошов кеүек, халыҡты аҫабалы иткән боронғо ҡомартҡы менән "янып" йәшәүселәр бөгөн дә бар, шөкөр! Яңы йылда яңы аҙымдар, күркәм дата менән башҡорт йәмәғәтселеге Йылан йылына аяҡ баҫа һәм "Урал батыр" ҡобайырының яңыса балҡыуына оло өмөттәр бағлай.**

**Азат ҒӘЛИУЛЛИН.**

✓ Иғтибар итегеҙ: балалар һәм йәштәр бигерәк тә ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, традицион байрамдарҙы ярата. Сөнки улар донъяны танып өйрәнә, уның йолаларын, тарихтарын үҙләштерә.



ЫШАНҺАҢ - ЫШАН...

**Быйылғы 2025 йылдың символы - Йәшел Ағас Йылан йылы, тигәйнек былтырғы һуңғы һанда. Яңы йыл Көнсығыш календары билдәләренә ниҙәр вәғәҙә итә икәнен дә белгәйнек. Билдәләнеүенсә, Көнсығыш йондоҙнамәһе буйынса йылан бик ихтирамлы йән эйәһе, ул аҡыллы, һығылмалы һәм бер үк ваҡытта хәйләкәр. Тап ошо сифаттары менән ул үҙгәрештәргә тиҙ өйрәнә һәм яраҡлаша ала. Йыландар тыныс күренһә лә, үҙҙәренә хәүеф янағанда дошманына ҡаршы тора алырға һәләтле. Был йән эйәләре маҡсаттарына ынтылышлы һәм шул уҡ ваҡытта сабыр: ул, ғәҙәттә, ҡарар ҡабул итергә ашыҡмай; ошо сифаттары уға уңыш ҡаҙанырға ярҙам итә лә инде. "Йылан йылы нигеҙендә шуға ла аҡыл менән уйлап һәм үлсәнгән аҙымдар менән эш итеү хуплана", - ти йондоҙнамә белгестәре. Ә хәҙер Йәшел Ағас Йылан йылы йондоҙнамә буйынса ниҙәр вәғәҙә итә икән?**

# ЙЫЛДЫҢ НИСЕК БУЛЫРЫ...

## бары үҙеңә бәйле




***Ҡуҙыларға*** 2025 йыл үҫеш өсөн яңы мөмкинлектәр аса. Был билдә эйәләре ниндәй генә хәлдә лә лидерлыҡ ынтылыштарынан сигенмәйәсәк; яңы йылда планеталар йоғонтоһо был сифатты көсәйтәсәк кенә. Яңы мөнәсәбәттәр, танышлыҡтар булдырыу һәм ғаилә ҡороу өсөн уңай осор етә.

***Буғалар*** үҙҙәренең консерватизмы менән билдәле. Шуға ла, күрәһең, яңы йылдағы теләһә ниндәй үҙгәрештәрҙе ҡыйынһынып, борсолоп ҡабул итә. Шул уҡ ваҡытта йыл йоғонтоһо уларҙы үҫешкә, яңырыуға табан этәрер, ихлас булығыҙ!

***Игеҙәктәргә*** лә үҙгәрештәргә әҙер булыу ҡамасауламаҫ: йыл улар өсөн яҡшы мөмкинлектәр һәм онотолмаҫ тәьҫораттар бүләк итә. Шулай ҙа уларға маҡсаттарына өлгәшеү өсөн ярайһы ғына көс һалырға тура килеүе бар. Уның ҡарауы, тап ошо осор карьерағыҙҙа боролош яһау ихтималы бирә. Насип ишегеҙҙе ҡаҡҡанда ысратыу, шулай уҡ аҡса эшләү мөмкинлеге тыуыр.

***Ҡыҫала*** яңы йылдың тәүге айҙарында әкрен темптар менән, ләкин ышаныслы рәүештә ҙур маҡсатына ынтыла. Эшендә йондоҙҙар был билдәгә ихтирам һәм танылыу вәғәҙәләй. Шәхси тормоштарында күсемһеҙ милек һатып алыу, ремонт эштәре өсөн уңайлы мәл тыуа.

***Арыҫлан*** өсөн йылдың тәүге яртыһы уңышлы килер. Был билдәләрҙең абруйы һәм йоғонтоһо артабан үҫер, ә был иһә яңы ниәттәр һәм проекттарға юл асыр. Яңы дуҫтар һәм фекерҙәштәр табырһығыҙ. Йылдың икенсе яртыһында эш сәфәре буйынса проблемалар килеп тыуыр.

***Ҡыҙҙарҙы*** шәхси тормоштарында ла, һөнәри өлкәлә лә етди үҙгәрештәр көтә. Айырыуса яҙғы һәм көҙгө айҙар мөһим ваҡиғалар менән һөйөндөрөр. Янғыҙаҡ Ҡыҙҙар көҙ үҙ иштәрен табыр. Йылдың тәүге осорондағы һынауҙар яҡшы үҙгәрештәр менән алмашыныр.

***Үлсәүҙәр*** өсөн йылдың тәүге яртыһы һөнәри белем арттырыуҙа, сит телдәр өйрәнеүҙә уңай осор булыр. Тап ошо осорҙа инегеҙгә алынған эш буйынса яңы партнерлыҡ һөҙөмтәләре ҡыуаныс килтерер: яҡшы ғына килем алырһығыҙ. Яҙға табан сәләмәтлеккә иғтибарҙы арттырығыҙ: көсөргәнешле эштең организмды ҡаҡшатыуы, иммунитетты көсһөҙләндереүе бар.

***Саяндар*** яңы йылдың тәүге яртыһын оҙайлы, тоторолҡло киләсәктәре өсөн нигеҙ һалыуға бағышлар. Февраль айы тирәһендә күсемһеҙ милек һатып алыу, ремонт эштәре ихтималлығы бар. Планеталарҙың ыңғай йоғонтоһон матди һәм рухи үҫешегеҙ өсөн файҙаланығыҙ, быйылғы йыл һеҙҙең өсөн иң һәйбәте булыр.

***Уҡсылар*** өсөн дә был йыл мөһим ваҡиғалар һәм үҙгәрештәргә бай булмаҡсы. Был айырыуса эш һәм шәхси мөнәсәбәттәр өлкәһенә ҡағылыр. 2025 йылда эш менән шәхси тормошоғоҙ араһында тигеҙлекте һаҡлағыҙ, ғаиләгеҙгә, яҡындарығыҙға күберәк иғтибар бүлегеҙ. Яҡындарығыҙ һаулығы йә күсенеү эштәре менән бәйле мәшәҡәттәрҙе сабыр үткәрергә тырышығыҙ.

***Ылаҡтарға*** 2025 йылдың айырыуса феврале карьера һәм бизнес өлкәһендә уңыш килтерер, ләкин был һөҙөмтә фәҡәт тырышлыҡ, үҙ-үҙеңә ышаныс һәм сабырлыҡтар аша яуланыр. Яңы вазифағыҙ лидерлыҡ сифаттарығыҙҙы асыр. Янғыҙаҡ Ылаҡтар быйыл үҙ иштәрен табыр, ғаилә ҡорор.

***Һыуғоярҙарға*** үҙгәрештәр өҫтөнә үҙгәрештәр шарттарына өйрәнергә түгел, уларҙың тормошо гел бер төрлөлөк һәм ялҡытҡыс мәлдәрҙән азат. Шулай ҙа уларға һаулыҡ торошо кеүек мөһим тормош ҡиммәте хаҡында ла онотоп ебәрергә ярамаҫ. Яҙғы айҙарҙа был айырыуса көнүҙәк булмаҡсы. Эштә бөтәһе лә яҡшы, коллегалар менән мөнәсәбәттәр яйлы. Был осор яңы танышлыҡтар, уҡыу һәм бизнесты үҫтереү өсөн генә түгел, мауыҡтырғыс сәйәхәттәр ҡылыу өсөн дә уңайлы йыл.

***Балыҡтар*** үҙҙәре өсөн билдәләгән маҡсаттарына яҡынайыр. Улар өсөн иң яйлыһы көҙ айҙарына тап килмәксе. Был осорҙа Балыҡтарға партнерлыҡ мөнәсәбәттәрендә иғтибарлы булыу кәрәк, шуның һөҙөмтәһе булараҡ, финанс йәһәтенән отошҡа өлгәшерһегеҙ, килем алырһығыҙ, матди хәлегеҙ яҡшырыр. Ә инде йыл башынан быныһ өсөн тырышлыҡ һалмаһағыҙ, үҙегеҙгә үпкәләргә тура килмәгәйе.

**Гөлфиә МӨХӘМӘТШИНА** әҙерләне.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# КӨНДӘЛЕК ДОҒАЛАР ҺӘМ ЗЕКЕРҘӘР



### ЗЫЯРАТҠА БАРҒАНДА УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒА

Аллаһ Илсеһе (саллаллааһу ғәләйһи үә сәлләм) зыярат янынан үткән саҡында былай тиер булған:

**Әссәләәмү ғәләйкүм дәәра ҡаумин мү'миниинә үә иннәә бикүм ләәхиҡуунә үә иннәә лилләәһи үә иннәә иләйһи раадҗиүүн. Ләкад әсабтүм хайран биджиләп үә сәбәктум шәрран тауиилә.**

"Сәләм һиңә, мосолмандарҙың мәкамы! Хәҡиҡи, беҙ һеҙгә ҡушылырбыҙ, һәм, хәҡиҡи, беҙ Аллаһтыҡы һәм ҡайтыуыбыҙ ҙа Уға. Һеҙ инде маҡтауға лайыҡ булдығыҙ һәм оҙаҡ яуыҙлыҡ менән һынауҙы артта ҡалдырҙығыҙ".

### ҠЫҪҠА ДОҒАЛАР

**Ләә иләәһә илләәллааһ. Әлхәмдүлилләәһ.**

"Кәлимәи тәүхид", йәғни "Ләә иләәһә илләәллааһ" тип әйтеү ул - диндең нигеҙе һәм шуға ла зекерҙәрҙең иң яҡшыһы булып тора. "Әлхәмдүлилләәһ" тип әйтеү, йәғни Аллаһ Тәғәләгә шөкөр итеү, рәхмәтеңде белдереү ул - Уның иҫәпһеҙ-һанһыҙ ниғмәттәрен ишәйтеүгә сәбәп һәм шуға ла доғаларҙың яҡшыһы булып тора.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

### Егерме етенсе хат: "Дүртенсе үлсәм"

Үткәндәр тураһында хәтер һәм белем донъяны тулыландыра, уны ҡыҙыҡлы, мәғәнәле, рухлы итә. Әгәр һеҙ тирә-яҡ донъяның үткәнен күрмәйһегеҙ икән, ул һеҙҙең өсөн буш. Һеҙгә күңелһеҙ, моңһоу һәм ахыр сиктә һеҙ яңғыҙ, сөнки ысын мәғәнәһендә иптәш тип иҫәпләп булғандар менән уртаҡ үткәндәр берләштерә: мәктәп, институтты беҙгә тамамлағанһығыҙмы, беҙгә эшләгәнһегеҙме, ә ҡарттар яуҙаштарын, ниндәйҙер ауырлыҡтарҙы беҙгә кисергән кешеләрен айырыуса бер йылылыҡ менән иҫкә ала.

Беҙ эргәләренән үтеп йөрөгән йорттар, беҙ йәшәгән ауылдар һәм ҡалалар, хатта беҙ эшләгән завод, йәки беҙ йөҙгән караптар беҙҙең өсөн тере булһын, хәтирәләр һаҡлаһын. Тормош - ул йәшәйештең бер мәле генә түгел.

Беҙҙе уратып алған бөтә нәмәнең тарихын беләйек. Был бит донъяның дүртенсе, иң мөһим үлсәме. Әммә үҙебеҙҙе уратып алған бар нәмәнең тарихын, ғаиләбеҙҙән алып, ауыл һәм ҡалабыҙ, ил һәм донъя тарихына тиклем белеүҙән тыш, тағы ла уны, ошо тирә-яҡтың баһалап бөткөһөҙ тәрәнлеген, һаҡларға ла тейешбеҙ.

Иғтибар итегеҙ: балалар һәм йәштәр бигерәк тә ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, традицион байрамдарҙы ярата. Сөнки улар донъяны танып өйрәнә, уның йолаларын, тарихтарын үҙләштерә. Тормошобоҙҙо мәғәнәле, бай һәм рухлы иткән бар нәмәне әүҙемерәк һаҡлайыҡсы.

### Егерме һигеҙенсе хат: "Бергә булыу"

Минән йыш ҡына ни өсөн көнкүрешебеҙҙән урыҫ уйындары бөтөнләйгә юғалып барыуы хаҡында һорашалар. Ҡаҡма туп, әбәк-көбәк йәки бура һуғыу?

Ҡатмарлы һорау. Урыҫ уйындары ғына түгел, ғөмүмән, уйындар юғала. Уларҙы бейеүҙәр, йәки бейеү тип аталған нәмә алмаштыра. Ә бит тәрбиәүи әһәмиәте йәһәтенән уйындар бик мөһим. Уйын - ҡаҡма туп булһынмы, волейбол, әбәк-көбәк йәки башҡа берәйе - социаллекте тәрбиәләй, ул бергә торорға, бергә уйнарға, иптәшеңде һәм ҡаршы кешене тоя белергә өйрәтә. Уйын - бик әһәмиәтле тәрбиәүи сара. Уйындар беҙҙең тормошта кире тергеҙелергә тейеш. Сөнки мин инде, әйтәйек, крокет уйнағандарын күргәнем юҡ. Ә крокет - бик мөһим уйын, сөнки уны өлкәндәр ҙә, балалар ҙа уйнай һәм был улар араһында аралашыу мөмкинлеге. Был мөһим. Өйҙә телевизор ҡарау менән мәшғүлдәр. Быны был осраҡта телевизор бик етди көнәркәш булып сыға. Ә элек өлкәндәр ҙә, балалар ҙа цифралы лото уйнай торғайны, һәм был уларҙың аралашыуына булышлыҡ итеп, тәрбиәүи йәһәттән үтә әһәмиәтле мәлдәрҙең береһе булды. Лото ғына түгел, бөтә ғаилә ҡатнашҡан уйындар күп булды. Әйтәйек, Себерҙең ҡайһылыр нөктәһендә бөтә ғаилә халыҡ йырҙарын күмәкләп башҡарыуҙа ҡатнашҡан кеүек. Был бик мөһим, сөнки хор эстетик ҡәнәғәтлектән тыш, ҡыш көнөндә, ҡарлы буранда бер урынға йыйылған ғаиләне, йәмғиәтте туплай. Йырлайҙар - шул рәүешле кешеләр бер-береһе менән аралаша, бәйләнешкә инә. Ә бөгөн беҙҙә кешеләр араһында бәйләнештәр нисек аҙ. Быны ошо уйындар, йырҙар мәлендә барлыҡҡа килгән бәйләнештәр, һиҙемләүгә королған, эскерһеҙ бәйләнештәр бик әһәмиәтле. Шуға көнкүрешебеҙҙең ошо яғына, унан уйындар юҡҡа сығып барыуына педагогия ойошмаларының иғтибары талап ителә. Һәм мәктәптәребеҙҙә физкультура дәрестәрен уйын рәүешендә үткәреүҙе ойоштороорға кәрәкмәҫме? Был бер юлы физик, әхлаҡи үҫеш тә бирер, класты ла берләштерер ине.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



## 13 ЯНВАРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.00, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Арбатские тайны". [16+]
0.10, 3.05 Новогодняя ночь на Первом. "30 лет вместе". [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 15.55 Т/с "Кулагины". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10, 3.30 Т/с "Доктор Рихтер. Продолжение". [16+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]
12.00 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]
12.15, 13.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 2.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Башкорттар. [6+]
16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Защитники Отечества. [12+]
19.00, 4.30 Телецентр. [12+]
20.00 Сәнгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Д/ф "Герой своего времени. Сосланбек Тавасиев". [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 Новогодний Огонёк. [6+]
3.00 Спектакль "Откройте, милиция!" [12+]

## 14 ЯНВАРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Арбатские тайны". [16+]
0.10 Д/ф "Премьера. "Я никогда не жил по расчету". К 80-летию Максима Дунаевского". [12+]
1.15, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 15.55 Т/с "Кулагины". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10, 3.30 Т/с "Доктор Рихтер. Продолжение". [16+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00, 23.45 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 13.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Тайм-аут. [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 0.45 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Городок АЮЯ. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Автограф. [12+]
17.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
19.00, 4.30 Телецентр. [12+]
20.00 Сәнгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Д/ф "Меня зовут Салават". [12+]
23.00 Башкирские каникулы. [12+]
2.15 Спектакль "Молодые сердца". [12+]
4.15 Мама. [12+]

## 15 ЯНВАРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Арбатские тайны". [16+]
0.10 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 15.55 Т/с "Кулагины". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10, 3.30 Т/с "Доктор Рихтер. Продолжение". [16+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00 Дорога к храму. [6+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45 Криминальный спектр. [12+]
12.00 Дознание. [16+]
12.15, 13.45, 16.45, 17.45 Интервью. [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Физ-ра. [6+]
15.30 Зерно. [6+]
16.00 "100 имен Башкортостана". [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Тормош. [12+]
18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Нефтехимик" (Нижнекамск). КХЛ.
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Байык представляет... [12+]
2.30 Спектакль "Песнь во сне". [12+]
4.15 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
5.00 Тайм-аут. [12+]

## 16 ЯНВАРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Арбатские тайны". [16+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 15.55 Т/с "Кулагины". [16+]
17.30 "Малахов". [16+]
21.30, 22.30 Т/с "Склифосовский". [12+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.10, 3.30 Т/с "Доктор Рихтер. Продолжение". [16+]
4.36 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00, 0.00 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45, 12.15, 13.45 Интервью. [12+]
12.00 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 1.00 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Сулпылар. [6+]
15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Патриот РФ. [12+]
16.15 Дознание. [16+]
16.45 Мегасело. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Йома. [6+]
19.00 Брифинг.
20.45 Мама. [12+]
21.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]
22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
2.30 Спектакль "Салават". [12+]

## 17 ЯНВАРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.40 "АнтиФейк". [16+]
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Фантастика". Следующий уровень. [12+]
23.40 Спецпроект. "30 лет вместе". [16+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 18.30 "60 минут". [12+]
13.00 "Наши". [12+]
14.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.55, 15.55 Т/с "Кулагины". [16+]
17.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Один в один. [12+]
0.30 Истории Большой Страны. [12+]
1.30 Х/ф "Когда на юг улетят журавли..." [16+]
4.56 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Сәләм.
10.00, 0.30 Т/с "Сломанные жизни". [16+]
11.00, 4.30 Йома. [6+]
11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
11.45 Криминальный спектр. [12+]
12.00, 13.45, 17.45 Интервью. [12+]
12.15 Ҡурай даны. [12+]
12.30, 5.30 Счастливый час. [12+]
13.30, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]
14.00, 1.15 Бәхетнамә. [12+]
15.00 Гора новостей. [6+]
15.15 Тирмәкәй. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Аль-Фатиха. [6+]
16.45 Ради добра. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
18.00 Башкорттар. [6+]
18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Автомобилист" (Екатеринбург). КХЛ.
22.00 СВОих не бросаем. [12+]
22.15 Письма солдатам. [12+]
23.00 Ете егет. [12+]
0.00 Ҡурай-шоу. [12+]
2.45 Спектакль "Раб божий предполагает". [12+]
4.00 Простые истории. [12+]
5.00 Хазина. [12+]

## 18 ЯНВАРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф "Я никогда не жил по расчету". К 80-летию Максима Дунаевского". [12+]
11.05 "Играем свадьбу!" [12+]
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Х/ф "Мэри Поппинс, до свидания". [0+]
15.20 Спецпроект. "30 лет вместе".
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Народный ледниковый". [0+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.35 Х/ф "Треугольник печали". Золотая пальмовая ветвь Каннского кинофестиваля". [18+]
2.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 Доктор Мясников. [12+]
12.55 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
17.50 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Море. Солнце. Склифосовский". [12+]
0.40 Х/ф "Биение сердца". [16+]
3.55 Х/ф "На выдохе". [16+]
5.34 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Доброе утро! [12+]
7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45 Мегасело. [12+]
8.30 Аль-Фатиха. [6+]
9.00 Ҡурай даны. [12+]
9.15, 20.15 Квадратные метры. [12+]
9.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]
9.45 СВОих не бросаем. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Книга сказок. [6+]
10.45 Әкиәтсе. [6+]
11.00 Гора новостей. [6+]
11.15 Преград. Net. [6+]
11.30 Ат уйнатып. Битва командиров. [12+]
12.00 Елкән. [6+]
12.30 Ете егет. [12+]
13.30, 5.00 Башкорттар. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
15.15 Колесо времени. [12+]
16.15 Телеспектакль "Золото собирается крупицами". [12+]
19.00 Ради добра. [12+]
19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
20.00 Сәнгелдәк. [6+]
20.30 Байык представляет... [12+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]
22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30, 2.00 Новости недели (на баш. яз.). [12+]
23.15 "Башкорт йыры" представляет... [12+]
0.00 Караоке по-башкирски. [12+]
0.30 Первый концерт Государственного ансамбля кураистов Республики Башкортостан. [12+]
2.45 Спектакль "Счастье". [12+]
5.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]

## 19 ЯНВАРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 2.35 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.50 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.35 "Часовой". [12+]
8.05 "Здоровье". [16+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь других". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
12.20, 15.15 Д/ф "Крещение Руси". [12+]
16.10 "Горячий лед". Фигурное катание. Чемпионат России по прыжкам 2025. Трансляция из Санкт-Петербурга. [0+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00, 23.00 "Три аккорда". Новогодний выпуск. [16+]
21.00 "Время".
0.10 Д/ф Премьера. "Святая Параскева. Крест в пустыне". [16+]

### РОССИЯ 1

5.35, 1.35 Х/ф "Простить за все". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
11.50 Большие перемены.
12.50 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 Парад юмора. [16+]
17.50 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

7.00 Доброе утро! [12+]
7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]
7.45 Тормош. [12+]
8.15 Ради добра. [12+]
8.30 Ҡустәнәс. [12+]
9.00 Ҡурай даны. [12+]
9.15, 4.30 Мама. [12+]
9.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]
9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Тирмәкәй. [6+]
10.45 Городок АЮЯ. [6+]
11.00 Гора новостей. [6+]
11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]
11.30 Зерно. [6+]
12.00 Сулпылар. [6+]
12.30 Новости недели (на баш. яз.). [12+]
13.15, 4.45 Башкирские каникулы. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
15.00 Дорога к храму. [6+]
15.30 Честно говоря. [12+]
16.15 Телеспектакль "Золото собирается крупицами". [12+]
18.00 Д/ф "Дон Кихот. История одной оперы". [12+]
18.30 Мегасело. [12+]
19.15 Әлләсе... [12+]
20.00 Патриот РФ. [12+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Автограф. [12+]
21.00 Дознание. [16+]
21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]
22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]
22.45 "Башкорт йыры" представляет... [12+]
1.15 Спектакль "Дурочка". [12+]
3.30 Колесо времени. [12+]

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Ғинуар (Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ахшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 13 (13) дүшәмбе | 7:49 | 9:32 | 13:30 | 15:28 | 17:18 | 19:02 |
| 14 (14) шишәмбе | 7:48 | 9:31 | 13:30 | 15:30 | 17:20 | 19:03 |
| 15 (15) шаршамбы | 7:47 | 9:30 | 13:30 | 15:31 | 17:21 | 19:05 |
| 16 (16) кесе йома | 7:46 | 9:29 | 13:30 | 15:33 | 17:23 | 19:06 |
| 17 (17) йома | 7:45 | 9:28 | 13:30 | 15:34 | 17:25 | 19:08 |
| 18 (18) шәмбе | 7:44 | 9:27 | 13:30 | 15:36 | 17:27 | 19:10 |
| 19 (19) йәкшәмбе | 7:43 | 9:26 | 13:30 | 15:38 | 17:29 | 19:11 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Изгеләр һәләк булған урында... яуыздар еңеүҙе тантана итә.*
*(Генрих Гейне).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧТЫҢ ТЫУЫУЫНА - 130 ЙЫЛ

**Шәйехзада Мөхәмәтзакир улы Бабич 1895 йылдың 2 ғинуарында Өфө губернаһының Бөрө өйәҙе Әсән ауылында, хәҙерге Башҡортостандың Дүртөйлө районында, мулла ғаиләһендә тыуған. Шәйехзада Бабич - башҡорт әҙәбиәте классигы, Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте эшмәкәре. Сираттағы башваҡысты ялҡынлы һүҙ оҫтаһы ижадына арнайбыҙ. Килтерелгән шиғырҙар, шиғри юлдар аша атамаларын табып ҡарағыҙ.**



## Халҡым өсөн

Ап-аҡ алтын йырҙарымды
Йырламайым данлыҡ өсөн;
Йырлаймын алтын илем өсөн,
Үҙ туған халҡым өсөн.

Саф көмөштәй йырҙарымды
Йырламайым алтын өсөн;
Йырлайым тик саф көмөштәй
Саф йөрәк халҡым өсөн.

Сәскә төҫлө йырҙарымды
Йырламайым зауҡым өсөн;
Йырлайым тик сәскәләй
Ҡыҙҙарға бай халҡым өсөн.

Дәртле ҡайнар йырҙарымды
Йырламайым дәртем өсөн;
Йырлайым тик мәңге шат,
Дәртле, көләс халҡым өсөн.

Иламайым мин көндәрем
һырғаҡ, һыуыҡ һалҡын өсөн;
Илайым тик ярлы, меҫкен,
Ҡыҙғаныс халҡым өсөн.

Йәш сағым, алтын сағым,
Ялҡын сағым булһын фиҙа
Халҡым алдында минең
Биргән таҙа антым өсөн.

*1914*




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**51-се һандағы сканворд яуаптары.**
**Горизонталь буйынса:** Йылан. Һарысай. Ҡая Талаҡ. Тышау. Алабута. Ҡомалаҡ. Ҡашҡа. Солтан. Алйот. Һүҙ. Ҡалаҡ. Бала. Ватт. Баҡыр. Ыҡ. Як. Шура. Алтын. Нотоҡ. Еңенән. Калягин.
**Вертикаль буйынса:** Ҡолаҡсын. Томбойоҡ. Листовка. Һауа. Липецк. Ҡаҡса. Йыраҡ. Һытҡы. Нарния. Ямб. Туҙбаш. Урман. Найҙа. Ян. Таҡ. Ҡабан. Алма. Ҡара. Уҡа. Ҡараҡ.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**14 ғинуар "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш). 12+
**15 ғинуар "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+
**18 ғинуар "Килен"** (З. Мусина, З. Бураҡаева инсц.). 18.00 16+
**19 ғинуар "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова). 18.00 16+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**17 ғинуар "Белый ангел с черными крыльями"** (Д. Балько), ҡала тарихы. 16.00 16+
**18 ғинуар "Дни Савелия"** (Г. Служитель), сәйәхәт. 18.00 12+
**19 ғинуар "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00 6+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**18-19 ғинуар "Верные друзья"** (А. Хайт, А. Левенбук). 12.00, 15.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**13 ғинуар "Ну, што! Опять?!"** Иҫке Яңы йылды ҡаршы алабыҙ. 6+
**18 ғинуар "Ым-ишара музыкаһы: камерный оркестр һәм терменвокс"**. 18.00 6+
**"Ер һәм күк музыкаһы"**. 18.00 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**13 ғинуар Премьера! "Иҫке йылдың яңы моңдары"** (Р. Ғәйнуллин), театрлаштырылған тамаша. 12+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**13 ғинуар "Доктор"** (М. Икрамова), лирик комедия. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**13 ҡинуар "Премьера! "О, музыка! Вздох ангела в душе!"**, Яңы йыл концерты. 6+
**18 ғинуар "Эх, күгәрсенкәйҙәрем..."** (Ф. Бүләков), комедия. 18.00 12+
**19 ғинуар "Сын земли"**, бейеү театры. 12.00 0+
**Премьера! "Дала буйлап икәү бара"** (Э. Йәһүҙин), музыкаль комедия. 18.00 12+

## БР Милли музейы

**14 ғинуар "ПроСВОих"**, күргәҙмә асыла. 15.00 12+
**МХО тураһында кино** күрһәтелә. 16.00 12+

БЕҘҘЕҢ БАЛАЛАР

# САМИРА - ЕҢЕҮСЕ!



**Мәскәү ҡалаһында VIII "Беҙ - космос балалары" халыҡ-ара балалар һүрәттәре конкурсының "Мөхәббәт - йән һәм космос гармонияһы" темаһына һүрәттәр номинацияһында еңеүселәрҙе бүләкләнеләр.**

Улар араһында Стәрлебаш ауылы балалар сәнғәт мәктәбе уҡыусыһы Самира Туҡтарова ла бар ине. Ҡыҙ сараға уҡытыусыһы Ләйлә Хисаметдин ҡыҙы Абайҙуллина менән барған.

Быйыл конкурста Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән, шулай уҡ Беларусь Республикаһынан, Ҡаҙағстандан, Болгариянан, Черногориянан һәм Грузиянан 2400 йәш рәссам үҙ көсөн һынап ҡараған. Стәрлебаш районы хакимиәте башлығы Рөстәм Рахманғолов хәбәр итеүенсә, Самира бындай конкурстарҙа беренсе тапҡыр ғына ҡатнашмай икән.

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ЯҢЫ ТЕЛЕКАНАЛМЫ?

**Башҡортостанда яңы "Сәнғәт" телеканалы эшләй башлаясаҡ. Был хаҡта Өфө дәүләт сәнғәт институтының тәрбиә, ижади һәм йәштәр сәйәсәте буйынса проректоры вазифаһын башҡарыусы Зиннур Сөләймәнов хәбәр итте.**

Уның һүҙҙәренсә, БР-ҙың заманса драматургия һәм режиссура үҙәге "Башҡортостан" киностудияһы менән берлектә Башҡортостан халыҡтары мәҙәниәте тураһында яңы "Сәнғәт" художество-ағартыу телеканалын булдырыуға Президент мәҙәни башланғыстар фонды грантын отто. Каналдың төп контенты Башҡортостан Республикаһында профессиональ һәм үҙешмәкәр коллективтар, шул иҫәптән мәҙәни-тарихи үҙәктәр, республикабыҙҙа йәшәгән төрлө халыҡтарҙың мәҙәни үҙәктәре үткәргән мәҙәни ваҡиғаларға һәм сараларға арналасаҡ. Шулай уҡ патриотик тапшырыуҙар трансляциялау планлаштырыла. "Яңы телеканал илебеҙҙең мәҙәни һәм рухи ҡиммәттәрен һаҡлау тураһында Президент указы буйынса эшләйәсәк. Быйыл йыл башында контентты әүҙем йыя башлаясаҡбыҙ һәм тест режимында эшләйәсәкбеҙ. Каналдың кабель тапшырыу селтәрҙәре лә, социаль селтәрҙәрҙә интернет-варианты ла буласаҡ. Рәсми асыу датаһын һуңғараҡ хәбәр итербеҙ", - тип билдәләне спикер.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

# МИЛЛИ ЙӘШТӘР ФЕСТИВАЛЕ




**"Юлдаш Plus" радиоһы - күп алып барыусылар һәм йәш йырсылар ҡанат нығытҡан ҙур ижади майҙан. Ул 2014 йылдан алып эшләй. Көн дә тура эфирҙар алып барыуҙан тыш, радио коллективы йыл да һәр айҙың хит-парад еңеүселәрен бер сәхнәлә йыя. Һуңғы биш йылда концертта һәләтле йәштәргә төрлө йүнәлештәге номинациялар тапшырылды.**

Радионың былтырғы йомғаҡлау сараһы "Юлдаш Plus" Милли йәштәр фестивале булараҡ үтте. Ул Республика Башлығы гранты ярҙамында ойошторолдо. Фестиваль Башҡортостандың иң ҙур музыкаль ваҡиғаларының береһе. Тамашала төрлө йүнәлештә ижад итеүсе йәш һәләттәргә номинациялар тапшырылды, радионың хит-парад еңеүселәре сығыш яһаны. Тамашасы араһында iPhone 16 уйнатылды. Проект туған телендә ижад итеүсе йәш һәләттәрҙе асыуға йүнәлтелде. Фестивалдең гала-концертында сығыш яһаусылар асыҡланды.

Һайлап алынған ҡатнашыусылар йыл аҙағында "Торатау" конгресс-холында фестивалдең финалында сығыш яһаны. Номинация еңеүселәре тамашасыларҙың Баш.-ньюс сайтында тауыш биреү һөҙөмтәһендә һайланды. Номинация еңеүселәре: "Йыл йырсыһы"- BELOVME (Динара Ғәлләмова), "Йыл йырсыһы", "Йыл ремейкы", "Йыл тренды", "Йыл йыры" - BABY TI, "Йыл асышы" - Азат Хоҙайғолов, "Йыл төркөмө" - Бишбармаҡ оркестры, "Йыл дуэты" - Ирдан һәм Илнар Ғәниев, "Йыл блогеры" - Физәлиә Вәлиева, "Йыл композиторы" - СКАНИ, "Йыл Сниппеты" - Ilgizmo, "Йыл аранжировщигы" - Илнар Ғәниев, "Йыл шағиры" - Айгөл Ямилева, "Йыл каверы" - Ян Лира, "Йыл инструменталисы" - Юлай Ҡасимов, "Иң әүҙем йәштәр ойошмаһы" - Йәш яҡташтар берлеге. Ҡатнашыусылар артабан радионың тура эфирҙарына, концерттарға саҡырыла, йырҙары даими радиола яңғыраясаҡ.

# РӘСӘЙ КИМӘЛЕНДӘГЕ ПРЕМИЯ...

**Мәскәүҙә "Йыл студенты-2024" Рәсәй милли премияһы еңеүселәрен бүләкләнеләр. Дүрт көн буйы Рәсәйҙең 67 төбәгенән 600 студент үҙ-ара көс һынашты. М. Аҡмулла исемендәге Башҡортостан дәүләт педагогия университетының Педагогика институты студенты Марсель Закиров "Йылдың ижади шәхесе" номинацияһында еңеүсе булды.**

Марсель Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты магистратураһының беренсе курсында уҡый. Ул университеттың бөтә ижади сараларында әүҙем ҡатнаша, "Студенттар яҙы" республика фестиваленең күп тапҡырҙар лауреаты. "Йылдың йәш лидеры", "Иҙел" халыҡ-ара башҡорт һәм татар йырҙары фестиваль-конкурсы һәм "Ҡырым берләштерә" Бөтә Рәсәй музыкаль конкурс-фестивале лауреаты ла. Әлеге ваҡытта Марсель уҡыуын һәм ижадын Өфө ҡалаһының "Северный" үҫмерҙәр клубындағы эш менән бергә алып бара.

- Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән килгән талантлы йәштәр менән осраштым. Аҙаҡҡа тиклем кемдең еңәсәген, кемдең лауреат буласағын аңламаныҡ, сөнки студенттарҙың күпселеге бер тиң көрәш алып барҙы, конкуренция ҙур ине. Һәр кем үҙенсә көслө, үҙенсәлекле, ҡабатланмаҫ. Финал этабында һынауҙар күп булды. Ижади сығыш мөһим ине, мин "Ҡыҙыл раузалар" йырын башҡарҙым. Бындай ҙур конкурста Башҡортостан исеменән сығыш яһау яуаплы эш булды. Миңә ҙур ярҙам күрһәткән университет етәкселегенә бөтә саралар өсөн ҙур рәхмәт! Бары шундай теләктәшлек менән генә еңеүгә өлгәшергә мөмкин! - ти Марсель.

ТЕЛҺӨЙӘР

# ШҮМӘН МЕНӘН ЯРЫП...

**"Һ" хәрефенә башланған һүҙҙәр араһында телмәребеҙгә һирәк ҡунаҡ кеүек килеп ингәндәре лә байтаҡ. Бына бер нисә миҫал.**

**Һәл.** Диалекттарҙа "саҡ", "әле генә" тигән мәғәнәгә тура килгән һүҙ, руссаһы "только что". *Һәл ҡайтып торам. Ҡар һәл яуа башланы.*

**Һәләтсел.** "Һәләтсел" "эшлекле" тигәнде белдерә. *Һәләтсел йәштәр бик күп. Һәләтсел ҡиәфәттә йөрөү.*

**Һәмгелсәк.** Хәҙер һирәк осраған был әйберҙең "сәнгелдәк" тигән атамаһы һәммәбеҙгә яҡшы таныш. "Һәмгелсәк" - шул уҡ "сәнгелдәк", "бишек". *Сабый һәмгелсәктә иҙерән йоҡлай. Балалар баҡсала һәмгелсәк өйә.*

**Һәңгәр: йәшел һәңгәр.** Химия дәресендә өйрәнелгән баҡыр купоросы беҙҙеңсә йәшел һәңгәр була. "Һәңгәр" мотлаҡ иптәшлекҡә "йәшел" һүҙен талап итә. *Тәжрибә юлы менән йәшел һәңгәр алыу. Ағас-ҡыуаҡтар бөшмәкләмәһен өсөн, йәшел һәңгәр менән эшкәртелә.*

**Һәркәш.** "Һәркәш" - "һөҙгәк" һүҙенең синонимы. *Һәркәш мал. Һәркәш һыйыр һөттө күп бирә.*

**Һәргиз.** "Һәргиз" - "һәр ваҡыт", "гел", "даими" тигән һүҙҙәргә иш. *Һуңғы арала һәргиз күрешеп торабыҙ. Яңылыҡтарҙы һәргиз һөйләп ҡуҙәтәбеҙ.*

**Һәптеркә.** "Һәптеркә - кейемгә тегелгән киң балитәк, руссаһы - широкая оборка. *Башҡорт ҡатын-ҡыҙы борон күберәге һәптеркәле күлдәк кейгән. Алъяпҡыстар ҙа һәптеркә менән биҙәлгән.*

**Һәпәйтеү.** "Тиҙ ашау" тигән мәғәнәлә ҡулланылған һүҙ. *Оҙаҡ уйнағандан һуң бала ашты һәпәйтеп тә ҡуйҙы. Тәмле бутҡаны ла һәпәйтмәү мөмкин түгел.*

**Һәргәү.** Һәргәү - ағас ҡайырын алыу өсөн ҡорал. *Уңайлы һәргәү. Имән ҡайырын һәргәү менән һыҙырыу.*

**Һәрпәк.** Шүмән. Ә утын яра торған ҡалын балтаны халыҡ элек "шүмән" тип йөрөткән. Был эш ҡоралының тағы бер атамаһы - "һәрпәк". *Һәрпәкте яңынан һапланыҡ. Егеттәр утынды бысып, шүмән менән ярып, өйөп тә ҡуйҙы.*

**Шулай итеп, "Киске Өфө"нө һәргиз уҡып барыусылар тыған телебеҙҙең һүҙ байлығы менән артабан да һәргиз танышыр.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТЫУА БАЙЫҠМА...

## тора байыҡ

Уйлы уйлап торғансы, тәүәккәл эшен бөтөрөр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Әйберҙәр иҫкермәй, ә беҙҙең теләктәр аҙым һайын яңыра.

**(Марсель Пруст).**

Изгеләр һәләк булған урында... яуыздар еңеүҙе тантана итә.

**(Генрих Гейне).**

Тотлоҡҡандар үҙенә ышаныс тыуҙырыусан.

**(Фридрих Ницше).**

Һүҙҙәр алиһә һымаҡ кейенергә, ҡош һымаҡ осорға тейеш.

**(Тибет халыҡ мәҡәле).**

Шағир - ул дөрөҫтө һөйләүсе алдаҡсы.

**(Жан Кокто).**

Хәҡиҡәт - ваҡыттың ҡыҙы.

**(Авл Геллий).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бөтөн донъяны яулап алып бөткән көндә Александр Македонский бүлмәһенә бикләнеп илаған, тиҙәр. Хәрби начальниктары бөйөк яугирҙың был ҡылығына бик аптыраған. Күпме яу юлы үтеп тә уның илағанын береү ҙә күргәне булмаған. Ҙур ҡурҡыныс алдында ҡалғанда ла, үлем менән күҙмә-күҙ осрашҡанда ла уның йөҙөндә ҡурҡыуҙың, ҡаушап ҡалыуҙың әҫәрен дә күрмәгәндәр. Александр һәр ваҡыт батырлыҡ, ҡаһарманлыҡ өлгөһө булған. Хәҙер, донъяны яулап алып ҡына бөткәс, ни булған һуң Александрға, ни өсөн илай?**

**Хәрби начальниктар, борсолоп, Александр Македонский бикләнгән бүлмәнең ишеген ҡаға һәм:**

**- Һеҙгә ни булды, ни өсөн илайһығыҙ? - тип һораған.**

**Александр шулай тип яуаплаған:**

**- Оошондай ҙур еңеүгә өлгәшкәс, мин үҙемдең еңелгәнемде аңланым. Мин әлеге мәлдә үҙемде, бөтөн донъяны яулаясаҡмын, тигән мәғәнәһеҙ хыялымды атҡара башлаған урында, юл башында баҫып торам, тип тоям. Быны мин әле генә аңланым. Ә элек аңламағанмын, сөнки мин юлда булғанмын, алда маҡсатым булған. Хәҙер миңә бер ҡайҙа ла барырға, бер нимәне яуларға ла кәрәк түгел. Мин үҙ күңелемдә ҡот оҫҡос бушлыҡ ҡына тоям. Мин еңелдем....**

**...Александр утыҙ өс йәшендә донъя ҡуя. Һуңғы юлға оҙатыу мәлендә бар халыҡ мәйеттең ҡулдары һәленгән көйө бәүелеп барыуын күрә. Бөйөк Александрҙың үҙенең васыяты шулай булған: уның әхирәткә буш ҡулдар менән киткәнен барыһы ла күреүен теләгән..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1582218911006 25001

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәррирәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33.
(453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
9 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2857
Заказ - 51